ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 май (һабанай)

2015

№20 (646)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Геройҙар тыуып торһон,**

тик улар һуғыш геройҙары булмаһын



3

**Герой хаҡында мәғлүмәт табылды!**



6-7

**Баланы ихлас яратырға кәрәк -**

дөрөҫ тәрбиә ошонан башлана



8-9

**Бәйге тоттолар...**

тапҡырлыкта



11

**ТВ-программа** 14


**ИҒТИБАР! АРЗАН ХАҠҠА ЯҘЫЛЫҒЫҘ!**

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 14 майҙан 23 майға тиклем матбуғат баҫмаларына яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо ун көнлөктә Башҡортостандың бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө"гә 469 һум 02 тингә (махсус индекс - ВО665), юридик шәхестәр 475 һум 02 тингә (махсус индекс ВО673), һуғыш ветерандары 417 һум 18 тингә (махсус индекс - ВО665) яҙыла ала.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халыҡ-ара ғаилә көнө билдәләнгән был көндәрҙә, ни өсөн йәштәребеҙ ғаилә ҡорорға ашыҡмай, тигән һорауға яуап алғы килә...

**Азат БАТЫРХАНОВ, менеджер, 31 йәш:** Йәштәр ошо һорау ҡуйылған саҡта, ғәҙәттә, заманаға һылтанырға ярата. Өйләнешкәс, ҡайҙалыр йәшәргә, донъя көтөргә кәрәк, ә күптәрҙең бындай мөмкинлеге, торлаҡ шарттары юҡ. Был айырыуса ҡала йәштәре өсөн хас проблема, ауылдағыларға был йәһәттән еңелерәктер, тип уйлайым: ата-әсәһе йорт һалып, йәштәрҙе башҡа сығара йә булмаһа ата йортонда бергә йәшәйҙәр. Икенсенән, хәҙер йәштәргә индивидуализм сифаты хас. Совет йәмғиәтендә, шул иҫәптән йәштәрҙә лә, коллективизм тойғоһо көслө ине, ләкин социализм йәмғиәтенең ҡиммәттәре юҡҡа сығарылғас, һәр кем үҙен генә ҡайғыртып, үҙе өсөн генә йәшәй башланы. Был тәү сиратта әлеге йәштәр психологияһына ҡағыла ла инде. Өйләнеү йәш кешене ошо "комфорт"тан сығып, үҙе хаҡында түгел, тәү сиратта ғаиләһе, йәғни кәләше, балалары, тормош-көнкүреше хаҡында уйларға, улар хаҡында ҡайғыртырға мәжбүр итәсәк бит инде, ә был унын өсөн бик үк ылыҡтырғыс тойолмай, күрәһең. Баш өҫтөндә үҙ ҡыйығың булһа, бер хәл, ә бына кеше фатирын ҡуртымға алып көн күреү, бар тапҡанынды сит кешегә түләп тороу шулай уҡ өйләнеүгә кәртә ҡора.

Илдә тыуым ҡырҡа кәмегәс, әсәлек капиталы булдырып, демографик хәлде үҙгәртеүгә өлгәштеләр бит, өйләнешергә ҡарар иткән йәштәргә лә шундай мөмкинлек тыуҙырып, булай булмаһа ла, ташламалы шарттарҙа фатир бирһәләр, нинә өйләнмәҫкә? Әлбиттә, бар ул дәүләт программалары, ләкин уларҙың һәр береһендә тип әйтерлек ниндәйҙер сикләүҙәр, тыйыуҙар ҙа етерлек. Мәҫәлән, шундай программаларҙың береһе ҡуйған шарттар буйынса, яңы өйләнешкән йәштәрҙең береһе йә инвалид булырға, йә Төньяҡ Кавказ һәм Чечняла һуғышып ҡайтҡан булырға, йә күп балалы булырға, йә дәүләт наградалары һәм почетлы исемдәргә эйә булырға тейеш. Яңы тормош ҡорорға йыйынған йәштәр нисек быларҙың барыһын да 30-35 йәшкә тиклем эшләп өлгөрә алыр икән һуң? Аңлашылмай. Тимәк, йәш ғаиләләрҙең күпселеге бындай программаға дәғүә итә алмай.

Шул уҡ ваҡытта тағы бер сәбәпте телгә алып китмәйенсә булмайҙыр. Ул туй сығымдарына ҡағыла. Тап ошо хаҡта күптән түгел "Киске Өфө" гәзитенең 16-сы һанында "Донъя көтөү туйҙан башланамы?" тигән мәҡәлә лә баҫылып сыҡҡайны. Унда әйтелгән фекер менән килешмәйенсә булмай: хәҙер бит бер-береһенән уҙҙырырға тырышып туй яһайҙар. Ресторан йә кафела туй мәжлеce үткәреү өсөн генә лә 100 меңгә яҡын аҡсаңды сығарып һалырға кәрәк. Бынан тыш, алтын балдаҡтар, кәләшкә туй күлдәге, башҡа төр кәрәк-яраҡ, машина, фото-видео өсөн сығымдар... Кәләш өсөн гөлләмә хаҡы ғына ла 3-4 меңгә барып баҫа. Ә ҡайҙан йәштәрҙә шул тиклем аҡса? Ата-әсәләре бай булғандар ғына иҫәп тота алалыр бындай олоғара шау-шоуға. Йәштәрҙең күбеһен бына ошо мәсьәләләр ҙә өркөтә торғандыр, тип уйлайым. Хәйер, кемдәр өсөндөр туй фәҡәт ике йәш йөрәктең теләгенән генә тороуы ла мөмкин бит әле. Бәлки, улар әлегеләй ҙурҙан ҡупмай, дуҫтары, яҡындары менән баҫалҡы ғына итеп тәбиғәткә сығыуҙы хуп күрәләр - быныһын аңларға була. Тик барыбер йәштәр өсөн торлаҡ - иң киҫкен мәсьәлә булып ҡала. Ошо йәһәттән берәй реаль ярҙам булмай тороп, ғаилә ҡорорға теләүселәр артып китер, тип өмөтләнергә тура килмәйәсәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ТУҠТА, МӘЛ!




*Ысын илһөйәрлек, энтузиазм өлгөһө булды был парад. Моразым Мөхәмәтов фотоһы.*

12+

**✓ Ғаилә короу - ул физик ихтыяждарҙы ғына ҡәнәғәтләндереү түгел, ул үҙеңдең һәм кәмендә тағы бер кешенең киләсәгенә йөгонто яһаясаҡ оло аҙым, оло аманат. Уға рухи яҡтан да, матди яҡтан да әҙер булырға кәрәк.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МИҢӘ ҠАҒЫЛМАЙ БЫЛ, ТИМӘ...

**Гөлйемеш САДИҠОВА, Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика художество гимназия-интернаты директоры:** Тормош - ул тәү сиратта хәрәкәт. Тимәк, тормошта булған ауырлыҡ, еңеллек, бәхет, уңышһыҙлыҡ, шатлыҡ һәм ҡайғылар - барыһы ла шул алға хәрәкәт арҡаһында бер-береһен алмаштырып, сиратлашып килә. Төрлө хәл-ваҡиғалар, ҡоролоштар араһында беҙ ҙә бер урында тик тормайбыҙ. Әммә ниндәй генә ситуацияла булмаһын, кеше барыһын да аныҡ аҡыл һәм сабырлыҡ менән хәл итергә тейеш. Был ғына ла түгел, бөтә нәмәне ыңғай яҡҡа көйләп ебәрә белергә кәрәк. Бының өсөн тик ыңғай фекер йөртөү генә талап ителә. Юғиһә, беҙ кешеләр араһында ҡапыл килеп тыуған аңлашылмаусанлыҡ, бер-береһенә ҡарата асыулы мөнәсәбәттәргә йыш шаһит булабыҙ. Дин, донъяға ҡараштар, холоҡтар төрлөлөгө, милли үҙенсәлектәр - барыһын да иҫәпкә алып, кешенең күңелен ҡыйып ҡуймайым, тип уйлап һөйләшеү зарур. Юҡҡа ғына халыҡ "Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән", тимәгән бит.

Тормош мәшәҡәттәре, үҙгәрештәр шауҡымында беҙҙән ҙур яуаплылыҡ талап иткән төп бурысты - атай һәм әсәй булыу, балаларға дөрөҫ тәрбиә биреү эшен артҡы планға ҡуймаһаҡ ине, тим. Сөнки балалар ата-әсәләренең дауамы, улар ғаиләлә нимә күреп үҫә, шуны ҡабатлаусан. Бөгөн беҙ балаларҙа тәртип, әхлаҡ, хеҙмәт, намыҫ, илһөйәрлек кеүек сифаттарҙы ғаиләлә тәрбиәләмәйбеҙ икән, киләсәктә барлыҡ хаталар өсөн йәмғиәтте ғәйепләргә хаҡыбыҙ булмаясаҡ.

Әлбиттә, бала тәрбиәһендә мәктәп тә ҙур роль уйнай - унда бала яҡшылыҡтан яуызлыҡты айыра белергә, төрлө һынауҙарға ҡаршы торорға өйрәнә. Сөнки уҡытыусылар ҙа шул уҡ ата-әсәләр, уларҙың да балалары, ейән-ейәнсәрҙәре бар. Ләкин хәҙер мәктәптә ата-әсәһе рөхсәт бирмәйенсә баланан таҡта һөрттөрөргә, ниндәйҙер эш ҡушырға, хеҙмәткә өйрәтергә, тыйырға, шелтәләргә лә ярамай. Миненсә, киләсәк өсөн яуаплылыҡ тойғоһо шулай йәйләп ҡына юғала, кешеләр битарафҡа әйләнә. Шуға күрә, тарих китабын үҙгәртеп яҙаһыңмы, ниндәйҙер "унайһыҙ" закон ҡабул итәһеңме, сит баланы алама ғәҙәткә өйрәтәһеңме - был эштәрҙең шауҡымы үҙеңә ҡағылмаҫ, тип уйларға ярамай. Милләттәштәрем һәр ваҡыт үҙ-үҙенә: "Был эшемдең (ҡылығымдың) һөҙөмтәһе минең балаларыма ла ҡағылып ҡуймаҫмы?"- тигән һорау биреп йәшәһен, үҙ-үҙенә тәнҡит күҙлегенән сығып фекер йөртһөн ине.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халыҡ-ара ғаилә көнө билдәләнгән был көндәрҙә, ни өсөн йәштәребеҙ ғаилә корорға ашыҡмай, тигән һорауға яуап алыу килә...

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәрйән АЙСЫУАҠОВ, хеҙмәткәр, 28 йәш:*** "25 йәшкә тиклем аҡса булмай, 25 йәштән һуң өйләнергә иртә", тип әйткәйне бер дуҫым өйләнеү хаҡында. Ысынлап та, был һүҙҙәрҙең нигеҙе бар. Өйләнеү теләге 18 йәштән шул 23-25 йәшкә тиклем көслө була, ләкин дуҫым әйткәнсә, был ваҡытта матди хәлеңде лә нығытып өлгөрмәгән булаһың, ата-әсәйең дә йыш ҡына иртә өйләнеүгә ҡаршы сыға. Һуңынан был теләк бер аҙ һүлпәнәйә. Ни тиһән дә, олоғайған һайын донъяны башҡа төрлө тоя башлайһың һәм үҙеңә өҫтәмә яуаплылыҡ алғы килмәй. Был ваҡытҡа иртә өйләнгән таныштарыңдың (бөтәһененә дә түгел, әлбиттә) ғаилә зарҙарын ишетәһең, күрәһең. Шуға күрә лә, ғаилә ҡороуға үтә етди ҡарай башлайһың. Сөнки йәш үткән һайын, яңылышыуҙың ни тиклем ҙур эҙемтәләргә килтереү мөмкинлегенән ҡурҡыу тойғоһо үҫә генә бара.

Миненсә, егеттәрҙә ошондай ҡараш барлыҡҡа килгәс, мотлаҡ өйләнергә кәрәк. Сөнки ғаилә ҡороу - ул физик ихтыяждарҙы ғына ҡәнәғәтләндереү түгел, ул үҙеңдең һәм кәмендә тағы бер кешенең киләсәгенә (фани донъяла ла, әхирәттә лә) йөгонто яһаясаҡ оло аҙым, оло аманат. Уға рухи яҡтан да, матди яҡтан да әҙер булырға кәрәк. Никах эшенә уйын кеүек ҡарау килешмәй, шул уҡ ваҡытта бөтә нескәлектәрҙе иҫәпкә алғанда ла, уңышҡа өлгәштем, бәхетле булам, тип әйтеп булмай. Шуға күрә, күҙ алдына килтереп булмаған эҙемтәләргә лә үҙеңде әҙерләү зарур.

Ошолай итеп, өйләнеүҙең ыңғай һәм кире яҡтары тураһында уйланып йөрөй-йөрөй, ваҡыт үтә лә үтә инде. Оҙаҡ кисектерергә лә ярамайҙыр ул. Буйҙаҡты юлдан яҙҙырыу иблискә еңелерәк, тиҙәр. Халыҡ та: "Арғымаҡтың билгеһе - ҡаҙы йыймаҫ, ял йыйыр, яман егет билгеһе - ҡатын алмаҫ, мал йыйыр", тип бушҡа әйтмәгәндер.

***Лилиә ӘСӘҘУЛЛИНА, бухгалтер, 30 йәш:*** Кейәүҙәге әхирәтемә ҡарайым да, эс бошоп китә: эштән һуң балалар баҡсаһынан өс йәшлек улын алып сыға (ярай әле, ҡыҙы мәктәптән үҙе ҡайтып йөрөй), магазинға һуғылып, сумка-пакеттарын аҫыҡтүлек менән тултыра ла тиҙерәк өйөнә йүгерә: ире ҡайтыуға бешеренә-төшөрөнә башлай, әйтерһең дә, ҡоҙа көтә! Унаһы ниндәй кәйеф менән ҡайта әле, етмәһә. Төҙәлештә эшләй, йыш ҡына иптәштәре менән төшөргөләп тә ҡайта, үҙем күргәнем бар. Унан китә һүҙ ҡуйыртыу, сыр-бор. Ипотекаға фатир алғайнылар, тарта-һуҙа саҡ түләп торалар. Әхирәтем иренең төп эшенән һуң да ҡайҙалыр эшләүен, йә булмаһа, оҙон аҡса артынан Себергә китеүен талап итә. Хәл-әхүәл белешәм дә тиҙерәк үҙемдең фатирҙағы аулаҡ бүлмәмә ныпыртам: йә Хоҙай, ас тамағым, тыныс ҡолағым! Ас тигәс тә, ысынында улай түгел, әлбиттә. Теләйем икән - бешерәм, теләмәйем икән - юҡ, иҫерек ир менән мыжыҡ бала башымды ҡаңғыртмай - йәнәнә рәхәт: китап уҡыйым, телевизор ҡарайым, интернет айҡайым, "Бәйләнештә" дуҫтар менән аралашам... Тик бына торлаҡ мәсьәләһе генә йөрәкте өйкәп тора: ай һайын фатир хужабикәһенә байтаҡ ҡына аҡсаңды сығарып биреүе еңел түгел, әлбиттә.

Ә шулай ҙа фатирлы берәйһе тәҡдим яһаһа, кейәүгә сығырға риза булыр инем, тип үҙемде ышандыра ла алмайым, сөнки туған-тыумаса, дуҫ-иштәрҙең ғаилә тормоштарын күрә-белә йөрөйөм һәм бындай перспектива мине бер ҙә ылыҡтырмай. Ә инде егеттәрҙең өйләнергә ашыҡмау сәбәбен бер генә нәмәлә - баш өҫтөндә үҙ ҡыйыҡтары булмауҙа күрәм.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Бына шундай ҡыҙыҡ ҡына яуаптар алдыҡ йәштәрҙең үҙҙәренән. Был хаҡта ололарҙың, ата-әсәләрҙең дә фекерен ишетке килгәйне. Бәлки, йәштәр араһында ла икенсе төрлө уйлағандар, кейәүгә сығыуҙы, өйләнеүҙе Хоҙай биргән бурыс тип ҡабул итеп, ғаилә тормошо ауырлыҡтарынан өркмәгәндәр барҙыр - уларҙан да хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

ИШАРА

# ҠӘҘЕР КҮРҺЕН ЭШ КЕШЕҺЕ...

**Гәзитебеҙҙә баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрҙең береһен дә ҡалдырмай уҡып барам. Улар уйландыра. Ҡайһы берҙәренә үҙ фекеремде белдереп, яуап яҙғы килә. Бына гәзитебеҙҙең быйылғы 12-се һанында "Алты урам һепереүсе фатирлы булды" тигән бер мәғлүмәт баҫылды. Онотолған яҡшы йоланы иҫкә төшөрөп, яйға һалыу бигерәк ҡыуандырҙы. Совет заманының ыңғай яҡтарын күреп, тергеҙергә кәрәк шул.**

Бер "Ералаш" фильмы иҫтә ҡалған. Уҡытыусы дәрескә әҙерләнеп килмәгән, шул сәбәпле һорауға яуап бирә алмаған уҡыусыға: "Тырышып уҡымаһаң, урам һепереүсе генә булырһың инде", - ти. Тәнәфестә был синыфтың бөтөн уҡыусылары баяғы синыфташтарын - Вованы уратып ала. Был хәлде икенсе дәресте үткәрергә килеп ингән уҡытыусы аптырап ҡуҙәтә һәм: "Аңламайым - ни сәбәпле һеҙ Воваға һоҡланаһығыҙ?" - тип һорай. Бер уҡыусы тороп баҫып: "Ул бит үҫкәс урам һепереүсе, түтәлдәргә һыу һибә торған шлангының хужаһы буласаҡ. Беҙҙең дә ул шлангты тотоп, һыу сәсрәткебеҙ килә. Бына әле сиратҡа яҙылдыҡ та инде",- тимәһенме! Был көләмәс, әлбиттә. Әммә совет осоронда һәр бер хеҙмәткә хөрмәт бар ине. Етмәһә, эшләп уҡыған бик күп студенттар ул хеҙмәттең ауырлығын белә ине (мин үҙем иртәнге почта таратыусы булдым). Бөтөн донъяға билдәле опера йырсыһы Анна Нетребко, мәҫәлән, үҙе уҡыған уҡыу йортоноң коридорын йыуған.

Һәр кеше юғары белемгә эйә була алмай. Тәбиғәт кешене төрлө һәләтле итеп яратҡан. Шуға ябай эшсегә хөрмәт менән ҡараһаҡ ине. Урам һепереүсе хеҙмәтен дә хөрмәт итергә өйрәнәйек. Юҡһа, урам тулы сүп-сар ҡайҙан килә? Ана шул кешелеклелек булмау, башҡаларҙы хөрмәт итә белмәү һөҙөмтәһе был.

Әйткәндәй, бер телевизион тапшырыуҙа, Альберт Эйнштейн беренсе бомбаның шартлауын күргәс: "Миңә генә мин ғалим һөнәрен һайланым икән, урам һепереүсе булһам, күпкә яҡшыраҡ булыр ине", - тип укенгән, тинеләр. Әйтер һүҙем шул: бер сиктән икенсе сиккә һикермәй йәшәһәк ине. Юғиһә, Украинала коммунизмды бөтөрҙөләр ҙә, фашизм баш ҡалҡытты. Һәләте булмаһа ла, амбицияһы ҙур кешеләрҙән кешелек донъяһы күпме зыян күргәнен тарих үҙе генә белә. Йәнә бер юморист әйткәнсә: "Заводтар тик тора. Эшләргә берәү ҙә юҡ. Барыһы ла - менеджер"... Һығымтаһын һәр кем үҙенсә яһар.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда фермерҙар кооперацияһын үҫтереү программаһы буйынса эш бара. Республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илдар Тимерғәлин һүҙҙәренсә, кооперация хужалыҡ итеүҙең кесе формаларына дәүләт ярҙамын һөҙөмтәлерәк итәсәк, ә фермерҙарға әҙҙемерәк үҫешергә мөмкинлек бирәсәк. Кооперация фермер хужалыҡтары продукцияһына магазин кәштәләренә эләгергә ярҙам итәсәк.

✓Майҙың тәүге ун көнлөгөндә яуған ҡойма ямғырҙар арҡаһында Башҡортостанда ташҡындың икенсе тулҡыны башланды. Май баштарында һыу кимәле кәмеүгә табан барған республика һыу һаҡлағыстарында йәнә артыу билдәләнгән. Мәҫәлән, һуңғы көндәрҙә яуым-төшөм һәм грунт һыуҙарының күтәрелеүе һөҙөмтәһендә Павловка һыу һаҡлағысында һыу секундына 1700 кубометр тиҙлек менән тулған.

✓Өфөләге Салауат Юлаев майҙанында Халыҡ-ара матбуғат үҙәге тәҙөү башланды, унда ШОС һәм БРИКС саммиттарына аккредитацияланған 1000 журналист эшләйәсәк. Матбуғат үҙәге 8,5 мең квадрат метр майҙанды биләйәсәк. Үҙәкте тәҙәү өсөн еңел йыйыла торған тент конструкциялары һайланған. Ул киң мәғлүмәт саралары павильондарына һәм брифинг залдарына бүленә. Ҡоролмаларҙы 30 июлгә тиклем һүтеү планлаштырыла.

✓Швед легионеры Никлас Сведберг яңы миҙгелдән "Салауат Юлаев" хоккей клубы өсөн сығыш яһаясаҡ. 25 йәшлек голкипер бер йыллыҡ килешеүгә ҡул ҡуйған. Сведбергтың "Бостон Брюинс" составында Милли хоккей лигаһында сығыш яһау тәжрибәһе бар. Ул унда лиганың иң яҡшы голкиперы тип танылған. Шулай уҡ Сведберг - Швеция чемпионы.

✓Өфөлә йәшәүсе Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Сәғит Ишбирҙин Башҡортостан исеменән Мәскәүҙә Еңеүҙең 70 йыллығына арналған байрам сараларында ҡатнашты. 89 йәшлек ветеран 1943 йылда фронтҡа алынған, артиллерия полкында радист булып хеҙмәт иткән, Курск һуғышында, Польшаны һәм Белоруссияны азат итеүҙә ҡатнашҡан. II дәрәжә Ватан һуғышы һәм III дәрәжә Дан орденлары кавалеры.

✔ *Нимә сәбәпсе һуң тотош йәмғиәтебеҙ менән битарафҡа әйләнеүҙә? Үҙ өстәбөҙгә яуаплылыҡ алыуҙан ҡасыумы? "Битарафлыҡ - йән фалижы, ул - ваҡытынан алда үлеү", тигән бөйөк А.П. Чехов. Әллә шулай юҡҡа сығамы кешелек тигәне?..*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Бәләкәй саҡтарында малайҙарымдың: "Әсәй, һинең яратҡан байрамың ниндәй?" - тигән һорауҙарына: "Еңеү көнө", - тиһәм, улар мине алдаша тип уйлап, яуабымды күңелдәре кителеберәк ҡабул итә ине. Сөнки балалар Яңы йылдан да шәп байрам булырға мөмкинлегенә ышана ла алмай. Яңы йыл да оҡшай, әлбиттә, әммә ул - күберәк ғаилә, күңел асыу байрамы, ә Еңеү көнө - дөйөм халыҡ тантанаһы, һағыш ҡатыш шатлыҡ байрамы, ул барса илде берләштергән, һәр ғаиләгә ҡағылған көн тип аңлатырға тырышҡан булам. Тик малайҙарҙың: "Беҙ ҙә, ҙурайғас, Еңеү көнөн ярата башлаясаҡбыҙмы?" - тигән бер ҡатлы һорауҙарына ҡапыл ғына нимә тип әйтергә лә белмәй инем. Сөнки элегерәк беҙгә, ветерандар һаны кәмегән һайын, был байрамдың бәҫе кәмер, ул онотола барыр, йәш быуын тарафынан өстәмә ял көнө тип кенә ҡабул ителә башлар кеүек тойола ине...**

# ГЕРОЙҘАР ТЫУЫП ТОРҺОН,

## тик улар һуғыш геройҙары булмаһын



*Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы халҡы - Үлемһеҙ полк сафтарында. (Иштимер Йосопов фотоһы).*

Ә тормошта киреһенсә килеп сыҡты: йылдан-йыл Еңеү көндәре ил күләмендә кинерәк ҡолас менән, тантаналыраҡ, йылыраҡ, ихласыраҡ итеп билдәләнә башланы. Тик беҙҙең атайҙарҙың был бәхетле көндәргә күрә алмауы, иҫән ветерандарға күрһәтелгән оло хөрмәттән мәхрүм булыуы ғына йөрәкте әрнетә ине. Улар заманында фронтовиктар ҙа күберәк, ил дә ярлыраҡ булды, 9 май байрамдары күпкә ҡайтышыраҡ үтте бит. "Ярай әле һинең атайың Еңеүҙең 50 йыллығын күргән. Бына беҙҙекеләр бөтөнләй Еңеү тураһында ла белмәй, яу ялањында ятып ҡалған бит", - тип әйтеүселәр янында иһә мин бәхетлерәк инем.

Һәм бына ниндәй мөғжизә: быйыл Бөйөк Ватан һуғышының бөтә һалдаттары ла - һуғышта ҡалғандары ла, ҡайтып вафат булғандары ла - терелә менән бергә байрам майҙанына килде, фотоһүрәттәрҙә булһа ла, еңеүселәр сафында атланы. Мең рәхмәт "Үлемһеҙ полк"ты уйлап сығарған кешеләргә! Күпме яралы күңелдәрҙе бөтәйтте, һағышлы йөҙҙәрҙе яҡтыртты был сара. Бына шулай һәр кем үҙенең ғаилә геройын иҫкә алырға мөмкинлек булғанда, ысынлап та, бер кем дә, бер нәмә лә онотолмаясаҡ.

2012 йылда Томск ҡалаһында башланған акция йылдан-йыл киңәйә барып, быйылғы юбилей йылында 12 миллиондан ашыу кешене туплаған. Мин дә атайым, 1942 йылда йөйендә 18 йәшендә фронтҡа алынып, Германияға тиклем яу юлдары үткән, ике тапҡыр ауыр яраланған һәм егерме йыл элек ошо уңалмаған яраларынан вафат булған Мөхитдин Мусиндың фотоһүрәтен тотоп, йөрәләгән кеше араһында Аҫҡар ауылының үҙәк майҙанынан ҙур ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ тойғоһо менән үттем. Гүйә, уның рухы миңә рәхмәт әйткән кеүек булды.

Иң мөһиме, "Үлемһеҙ полк", Рәсәй Президенты В. Путин әйткәнсә, кабинеттарҙан, административ структураларҙан түгел, ә йөрәктәрҙән сығыуын раҫлап, олоһон да, кесеһен дә, пенсионерын да, студентын да, түрәһен дә, ябай эшсеһен дә, бай эшҡыуарҙы ла, аҙ тәьмин ителгәнен дә дөйөм бер сафҡа баҫтырҙы. Ғаиләһендә фронтҡа ҡатнашҡан ата-олатаһы булмағандар ҙа, алыҫ туғаньнын йә күршеһенең портретын тотоп, мөһим саранан ҡалышҡыһы килмәне. Байтаҡ халыҡ район ауылдарынан махсус рәүештә килгәйне. Элек шулай күмәкләп демонстрацияға сыға торғайныҡ. Тик уларға беҙҙе күберәк мәжбүр итеп ҡыуалар ине. Ә был юлы һәр кем йөрәк ҡушыуы буйынса, үҙенең дә Еңеүсенең балаһы йә ейәне булыуы менән ғорурланыуын белдерергә килде. Ысын мәғәнәһендә берләштерер көнө ул Еңеү байрамы. Ә беҙгә дәүләт ниндәйҙер Берҙәмлек көндәре булдырып, көсләп ҡушып ҡараны. Берҙәмлек көнөн уйлап табыу кәрәкмәй, бына ул - Еңеү көнө, "Үлемһеҙ полк"! Һәр ғаиләнең шәхси иҫтәлеге беҙҙе дөйөм бер Тере Хәтер булып ойоштороҙ.

Кесе улым да быйыл класташтары менән тәүге тапҡыр парадта ҡатнашты. Өйгә ҡайтҡас та, һәр ваҡыттағыса, компьютерға йомолманы, телевизорҙы асып, башынан аҙағынаса Ҡыҙыл майҙандағы парадты, "Үлемһеҙ полк"ты ҡараны. Бер нәмә өндәшмәһә лә, мин уның күңеленән был байрамдың мөһимлеген тәрәндән аңлай башлауын тойҙом. Моғайын, бер ваҡыт ул да, олатаһының фотоһүрәтен тотоп, ғорурлыҡ менән "Үлемһеҙ полк" сафында атлар. Аҙаҡ уның балалары... Бөйөк Еңеүҙең 100 йыллығы ла, артабанғылары ла бөгөнгөләй тығыҙ сафтарҙа үтер... Хатта бер генә тере ветеран ҡалмаһа ла... Тик минең быуындың ғаилә геройы булып һаман шул атайым ҡалһын ине. Башҡа геройҙар булһа-булһын, тик улар һуғыштыҡы булмаһын...

**Рәхимә МУСИНА.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ҠАЙҘАН КИЛӘ БЕҘГӘ ВАЙЫМҺЫҘЛЫҠ?



**Интернет селтәрендә бер видеояҙмаға юлыҡтым. Ике йәш егет Америка Ҡушма Штаттарында һәм Рәсәйҙә "Rakamakafo" проекты сиктәрендә теге йәки был ваҡиғаға ҡарата халыҡ реакцияһын тикшереү өсөн социаль эксперимент үткәргән.**

Беренсе егет Санкт-Петербург ҡалаһының төрлө урындарында "ҡапыл хәле насарайып, сирләп китә". Эксперимент һөҙөмтәһе тураһында ул егет былай ти: "Өс көн дауамында барған ауырыуға һабышыуҙар ваҡытында миңә 27 тапҡыр берәр сәғәтләп ярҙам күтөп ятырға тура килде. Эргәмдән йөҙәрләгән кеше үтте. Уларҙың ни бары ун проценты тирәһе генә: "Һеҙгә ярҙам кәрәкмәйме?" - тип һораны..."

Ә АҠШ-тың Майями ҡалаһында һынау үткәргән егет былай тип яҙа: "Мин дә был экспериментты өс көн дауамында төрлө ерҙәрҙә үткәрҙем. Миңә "ярҙам көтөп" бер минуттан да артыҡ ятырға тура килмәне. "Хәлем насарайғанын" күреп, осраған береһе ярҙам итергә ашыҡты. Тик шуныһы әсендерә: ни өсөн Рәсәй халҡы бына ошондай ваҡиғаларға шаһит булыуҙан ҡурҡа, ситкә ҡаса, битарафлыҡ күрһәтә икән?.."

Был видеояҙма күптәрҙе уйланырға мәжбүр иткәндер, тип уйлайым. Вайымһыҙлыҡ күрһәтеп, тиҙерәк ҡасыу ягын ҡараған халыҡ араһында беҙ үҙебеҙҙе лә таныйбыҙ бит.

Студент саҡта мин дә бер ваҡиға шаһиты булдым. Трамвайға китеп барам. Халыҡ бик күп тә түгел. Ҡапыл арттараҡ ултырған бер апай иҙәнгә ҡолап төштө. Йөрәгем жыу итеп ҡалды: нимә булды икән? Нинә эргәһендәгеләр ярҙамға ташланмай? Һораулы ҡарашымды йығылып ятҡан ҡатын эргәһендәгеләргә төбәйем. Берәү ҙә ярҙамға ташланмаҫ, түҙмәнем: "Что с ней случилось? Помогите ей, пожалуйста!" - тип трамвайҙың был осонан ҡысҡырған булам. Билет һатып йөрөгән кондуктор ҡүтәрелеп тә ҡараманы, тыныс ҡына эшен дауам итте. Кемдер: "Пьяная, наверное", - тигән булды. Түҙмәнем, трамвай салоны буйлап йүгереп тигеләй үтеп, йөҙҙәре ағарынған апайҙы торғоҙҙом да, сираттағы туҡталышта төшөп ҡалдыҡ. Әмәлен күрә, поликлиника ла эргәлә генә булып сыҡты. Апайҙы әйҙүкләп шунда индереп, коридорҙа күренгән табипҡа өндәштем. Әлдә табиптарҙың Гиппократҡа биргән анты бар: береһе килеп, апайҙың ҡан баҫымын үлсәне, шул арала икенсеһе укол ҡаҙай һалды, апайҙың йөҙөнә алһыулыҡ йүгерҙе. "Күҙ алдарым ҡараңғыланып, ауҙым да киттемсе, ҡан баҫымы түбән шул", - тигән булды ул мәшәҡәт һалғаны өсөн ғәфү үтенгәндәй. Хәле яҡшырып киткән апайҙан рәхмәт һүҙҙәре ишетеп, ҡанатланып дәресҡә йүгерҙем...

Хәҙер уйлайым: бөгөн килеп, ошо ваҡиға ҡабатланһа, нимә эшләр инем икән? Ярҙамға йүгерер инемме, әллә битараф ҡараш ташлап ҡына ары китер инемме? Йәшәй-йәшәй битарафҡа әйләнә башлағанды танымай булмай шул...

Нимә сәбәпсе һуң тотош йәмғиәтебеҙ менән битарафҡа әйләнеүҙә? Ҡурҡыумы? Үҙ өстәбеҙгә яуаплылыҡ алыуҙан ҡасыумы? "Битарафлыҡ - йән фалижы, ул - ваҡытынан алда үлеү", тигән бөйөк А.П. Чехов. Әллә шулай юҡҡа сығамы кешелек тигәне?..

**Айгөл АРЫҪЛАНБӘКОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын байрам иткән көндәрҙә Өфөнөң Еңеү паркында ШОС һәм БРИКС саммиттары символикаһын йөрөтөүсе флагты ҡала хакимиәтенә тапшырыу тантанаһы булып үтте. Уға тиклем Өфө альпинистары саммиттар символикаһын йөрөтөүсе ике флаг менән 5642 метр бейеклектәге Эльбрус түбәһенә күтәрелеп, береһен унда ҡалап төшкәндән һуң, икенсеһен Рәсәйҙең Хәрби дан ҡалалары буйлап 2,5 километр араны автоуҙышта үтеп, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһына алып ҡайтты.

✔Быйыл республикала балалар һауыҡтырыу кампанияһы осоронда 2802 һауыҡтырыу учреждениеһы, шул иҫәптән 95 ҡала ситендәге лагерҙар, 33 шифахана һәм 1475 көндөҙгө ял үҙәктәре, 1079 хеҙмәт һәм ял лагерҙары эшләйәсәк. 120 палаткалы лагерҙа биш меңгә яҡын бала ял итәсәк. Республикала йәйге каникулдар тамамланғансы 383 мең бала сәләмәтләнен ныҡыта аласаҡ. 3500-ҙән ашыу бала тәбәктән ситтә ял итәсәк. Өс мең самаһы уҡыусы - Ҡара диңгеҙ буйындағы "Орленок" лагерына, 550-гә яҡыны "Артек" халыҡ-ара балалар үҙәгенә юлланасаҡ.

✔Йыл һайын Екатеринбургта "Мисс Азия-Урал" интернациональ гүзәллек конкурсы ойоштороа. Быйылғы мизгелдә Башҡортостан, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Татарстан, Тыва, Ҡырғыҙстан, Саха (Яҡут), Бүрәт республикалары вәкилдәре ҡатнаша. Әлеге мәлдә Башҡортостан һылыуы Венера Байрамғолова интернет аша тауыш биреүҙә беренсе урында бара. Тауыш биреү һөҙөмтәләре "Тамашасылар һөйөүе" номинацияһында бүләкләгәндә иҫәпкә алына. "Мисс Азия-Урал" титулын алыу өсөн ҡыҙҙарға Екатеринбургта үтәсәк бәйгелә үҙ һәләттәрен күрһәтергә кәрәк.

✔Өфөнөң "Мираҫ" галереяһында Мәскәү рәссамы Милә Ғатауллинаның "Мәтрүшкәле сәй" тип аталған шәхси күргәҙмәһе эшләй башланы. Рәссам Өфөлә тыуып үҫкән, 2-се балалар художество мәктәбендә белем алған. Һуңынан Суриков исемендәге Мәскәү дәүләт художестволы сәнғәт академияһы ҡарамағындағы Томский исемендәге лицейҙа уҡый. 1998 йылда Мәскәү дәүләт художестволы сәнғәт академияһын тамамлай. Шул ваҡыттан алып Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә 100-ҙән ашыу күргәҙмәлә ҡатнаша.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Юҡҡа ғына улар донъяға тыныслыҡ теләмәйҙер бит инде. Тыныслыҡтың ҡәҙерен белергә өйрәнһәк ине, парадтарҙа күрһәтелгән һуғыш ҡоралдары бары тик ошондай сараларҙа ғына сығарылһын ине майҙандарға...*



ТУҠТА, МӘЛ!

## ӨФӨЛӘ - БАЙРАМ!











*Мораҙым Мөхәмәтов фотолары.*

... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҺАЛҠЫН КӨН ДӘ...

## байрам сараларына ҡамасау була алманы

**Әсе һалҡын ел, күк йөҙөн баҫып алып яуған һыуыҡ ямғыр ҙа Өфөнөң төп майҙанына йыйылыусыларҙы ҡурҡыта алманы. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған парадты ҡарарға һәм һуғышта ҡатнашҡан олатай-өләсәйҙәренең фотоһы ҡуйылған транспораттар менән "Үлемһеҙ полк" сафтарында үтергә тип, ҡаланың төрлө мөйөштәренән меңәрләгән кеше ағылды. Тантаналы марш менән үтәсәк һалдаттар, курсанттар, кадеттар, төрлө көс структуралары, ойошма хеҙмәткәрҙәре, мәктәп уҡыусылары тигеҙ сафтар булып теҙелеп, ҡуҙғалырға бойороҡ көтә. Бөйөк Ватан һуғышын үткән фронт һәм тыл ветерандары автобустарҙан төшөп, ҡала Советы янындағы трибуна тирәләй урынлаша. Барыһы ла парадҡа әҙер.**

Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған парадҡа 300-ләп һуғыш һәм тыл ветераны саҡырылды. Бер көн алда уларға тантаналы рәүештә байрам миҙалдары тапшырылды, 9 майҙа иһә, улар республиканың төп парадын ҡарарға килде. Ветерандарҙың яҙмышы төрлө-төрлө, шулай булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы ете тиҫтә йыл элек тамамланған ҙур фажиғә берләштерә.

Әбйәлил районынан 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында һуғышҡан Ғәйфулла Ғәбитовтың бар теләге ошо ғәрәсәтте үтеп, еңеп, тыуған яҡтарына ҡайтыу, туғандарын күреү була. "Эй, Аллам, беҙгә бит орден-миҙалдары ла кәрәкмәй, тере ҡайтарып, тыуған яғымды ғына күрергә насип ит", тип һорай торғайным Хоҙайҙан", - тип хәтерләй ул йылдарҙы ветеран. 2-се һәм 3-сө Дан, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары кавалеры, батырлығы өсөн тағы ла бихисап миҙалдар менән менән наградланған яугирға тыуған яғына ҡайтырға насип була. "Аллаһы Тәғәлә ошо тамуҡтан тереләй генә ҡайтарып ҡалманы, балаларымды, ейән-ейәнсәрҙәремде, бүлә-бүләсәләремде күрергә насип итте", - ти ул күҙ йәштәре аша.

"Беҙҙең бала сағыбыҙ, йәшлегебеҙҙең иҫтәлеге ул был һуғыш. 70 йыл һуғышһыҙ ғүмер - ниндәй ҙур бәхет, тик хәҙерге быуын онотмаһын, ҡәҙерен белһен ошо бәхеттең. Кешелеккә быңдай һуғыштарҙы ҡабаттан күрергә яҙмаһын", - ти Архангел районынан һуғыш ветераны Таһир Айытбаев. 1944 йылда ун ете йәшендә үҙ теләге менән һуғышҡа киткән егет көнсығыш сиккә әләгә һәм япондарға ҡаршы һуғышта ҡатнаша, һуғыш бөткәс тә әле хәрби хеҙмәтен дауам итеп, бары тик 1951 йылда ғына тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта.

"Һуғыш бөткән ваҡытта мин Мәсәғүттә педучилищела уҡып йөрөй инем. Ул ваҡытта радио, телефон мәсьәләһе бик ҡыҫынҡы ине. Һуғыш бөткәнен училище директоры Шамил Мортаза улы ишетеп, халыҡҡа иғлан итте. Бар халыҡ, студенттар митингҡа йыйылдыҡ. Шамил Мортаза улы матур итеп доклад һөйләне. Оҙайлы һуғыш тамамланыуына халыҡ бик шат ине. Ул трибунанан төшөп тә өлгөрмәне, уға бер конверт килтереп тотторҙолар. Уны асып уҡыны ла ағайыбыҙ, йығылып китте. Баҡтиһәң, был улының "похоронка"һы булған икән. Ана шулай тетрәндергес бер мәл булып минең хәтеремдә уйылып ҡалды ул һуғыш тамамланған көн", - тип хәтерләй тыл ветераны, Шишмә районынан Риза Вәлиев.

Ветерандар менән аралашҡан арала парад башланыуға команда бирелде. Хәрби көстәр полковнигы, парад менән командалыҡ итеүсе Салауат Яҡупов Башҡортостандың хәрби комиссары полковник Анатолий Балтинскийға парадҡа әҙер булыуҙары тураһында белдерҙе. Парадты Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының барабансылары асып ебәрҙе. Шулай уҡ парад коробкалары араһында һуңғы йылдарҙа ҡоралды бәрелештәрҙә ҡатнашҡан яугирҙар ҙа бар ине.

Хәрби парад тамамланғас, майҙанға һуғышта ҡатнашҡан ата-әсәйҙәренең, олатай-өләсәйҙәренең фотолары эленгән транспаранттар тотҡан ҡала халҡы "Үлемһеҙ полк"ҡа теҙелде. Һуңғы йылдарҙа грандиоз сараға әйләнгән "Үлемһеҙ полк" быйыл Өфө урамдарына 20 мең кешене алып сыҡты. "Был ябай фотолар ғына түгел. Был фотоларҙа беҙҙең именлегебеҙ өсөн фронтҡа юлланған кешеләрҙең көслө, һынмаҫ рухы сағыла. Кемдәрелер яу ҡырҙарынан ҡайта алмай, ғүмерҙәрен Ватаны өсөн фиҙа иткән, кемдәрелер тыуған яҡтарына ҡайтып, емерелгән хужалыҡты төҙөкләндереүгә көс һалған. Эйе, был ғорурлыҡ, беҙ уларҙың батырлыҡтарын хәтерләргә, улар менән ғорурланырға тейешбеҙ", - ти 11-се синыф уҡыусыһы Айнур Ситдиҡов. "Беҙ һуғыш ветерандары, унда һәләк булыусы кешеләр хаҡында Еңеү көнөндә генә хәтерләргә түгел, ә көндәлек тормошобоҙҙа шул кешеләргә рәхмәтле булырға тейешбеҙ", тип һүҙгә ҡушыла янында торған егет.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө парады үҙенең масштабтары һәм мөмкинлектәре буйынса Рәсәйҙең баш ҡалаһында үткән парадтан күпкә ҡалыша, әлбиттә, әммә сараның дөйөм рухы күпкә ыңғайыраҡ, изгерәк, ихласыраҡ тойолдо. Һуңғы ваҡытта илдең төп парады "көс" агитацияһына әйләнә бара кеүек. Унда илдең ҡоралды көстәрен күҙҙән үткәреп, "Кәрәк булһа, беҙ бөгөн дә ата-бабаларабыҙҙың юлын ҡабатлай алабыҙ", тигән девиз аҫтында һуғышҡа әҙерлек күрһәтелгәндәй. Ысын һуғыштың эсендә булған һәм уның эҙемтәләрен яҡшы белгән ветерандар өсөн был ҡыуаныс була аламы икән? Юҡҡа ғына улар донъяға тыныслыҡ теләмәйҙер бит инде. Тыныслыҡтың ҡәҙерен белергә өйрәнһәк ине, парадтарҙа күрһәтелгән һуғыш ҡоралдары бары тик ошондай сараларҙа ғына сығарылһын ине майҙандарға...**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәте ултырышы үткәрҙе. Унда урмандарҙы үҙләштереү өлкәһендә өҫтөнлөклө инвестиция проекттарын ғәмәлгә ашырыу барышы, дәүләт унитар предприятиелары һәм хужалыҡ йәмғиәттәре әҙерләгән бизнес-пландарҙы раҫлау йомғаҡтары, шулай уҡ суд эштәрен ҡарағанда Башҡортостан мәнфәғәттәрен яҡлауҙы тәьмин итеү буйынса эш һөҙөмтәләре тикшерелде.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ҡытай Халыҡ Республикаһының транспорт министры Ян Чуаньтан менән осрашты. Осрашыу барышында һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда Ҡытай Халыҡ Республикаһы төбәктәре менән мөнәсәбәттәрҙең әүҙем үҫешеүе билдәләнде. Бер нисә килешеүгә ҡул ҡуйылған, инвестиция проекттары тормошҡа ашырыуға әҙерләнә. Рөстәм Хәмитов Ҡытайға тура һауа юлын булдырыу кәрәклеге хаҡында белдерҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президентының 2012 йылдың 7 майындағы указдарының үтәлеше буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Унда Башҡортостан Хөкүмәте ағзалары һәм Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты вәкилдәре ҡатнашты. "Әгәр һуңғы өс йылдағы эш йомғаҡтарын баһалағанда, указдарҙың төп положениелары үтәлгән, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды төбәк етәксеһе. - Әлбиттә, Хөкүмәттең әүҙем эшмәкәрлеген талап иткән айырым позициялар ҙа бар. Әммә Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостанда алып барылған эште ыңғай баһалай".

✓Өфөлә, Башҡорт опера һәм балет театры янында, диаметры 18 метрлыҡ ҙур фонтан асыла. Фонтандың уртаһына "Ете ҡыҙ" тип аталған бронзанан эшләнгән дүрт метрлыҡ скульптура композицияһы ҡуйыла. Яңы фонтан төҫлө һәм музыкаль итеп эшләнә. Фонтанды май аҙағында асыу ҡаралған.

✓17 майҙа Ҡаҙағстандың Аҡтау ҡалаһында һабантуй уҙғарыла. Байрамда ҡатнашыу өсөн Өфөнән ижади төркөм юлға сыҡты. Быйыл һабантуй Ҡаҙағстан халыҡтары ассамблеяһының 20 йыллығы һәм "Салауат" башҡорт мәҙәни үҙәгенең 25 йыллығы сиктәрендә билдәләнә. Байрамға йыйылыусылар алдында Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары: виртуоз ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов, бейеүсе Ильяс Ҡарабулатов, ҡурайсы Илнур Хәйруллин, йырсылар Сәйҙә Ильясова, Филүс Ҡалмурзин, Башҡорт драма театры актеры Хөрмәтулла Үтәшев сығыш яһаясаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТОЛ ҠАТЫНДАРҒА ТОРЛАҠ



**Өфөлә Рәсәй Президентының Башҡортостандағы ҡабул итеү бүлмәһендә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының тол ҡатындарына торлаҡ сертификаттары тапшырылды. Документтарға алты кеше эйә булды.**

Рәсәй Президентының "Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һәм ветерандарҙың тол ҡатындарын торлаҡ менән тәьмин итеү тураһында" Указы ғәмәлгә ашырыла башлағандан алып Башҡортостанда 870 кеше таныҡлыҡ алған. Ошо маҡсатта 1,5 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленгән. Сертификат буйынса түләү күләме - 1,2 миллион һум. Республикала торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж тағы 494 кеше иҫәпләнә. Уларға социаль ярҙам күрһәтеү өсөн 600 миллион һумдан ашыуыраҡ аҡса талап ителә.

Күптән көткән сертификаттарын алған тол ҡатындар республика етәкселегенә һәм Рәсәй Президентына рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе.

"Илдә тыныслыҡ булһын, киләсәк быуын ҡайғы күрмәһен, тип теләйем. Һуғыш бөткәндә миңә 14 йәш ине, әммә бала саҡта ниҙәр генә күрмәнем", - тип һөйләне Фәһимә Зарипова. Тантана күмәкләп сәй эсеү менән тамамланды.

# МӘКТӘПТӘ НИСЕК ТУҠЛАНАЛАР?



**Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк штабы республика мәктәптәрендә һәм дауаханаларында туҡланыуҙы ойоштороуҙы контролгә алды. "Башинформ" агентлығында үткән түңәрәк өҫтәлдә ошо өлкәләге мәсьәләләр тикшерелде.**

- 2014 йылда бюджеттан социаль туҡланыуға 4,5 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленде, - тип билдәләне Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының Үҙәк штабы ағзаһы, Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк штабы рәйестәше Эльвира Айытҡолова. - Йылдан-йыл дәүләт социаль өлкәгә күпләп аҡса йүнәлтә, ә халыҡтан һорау алыуҙан күренеүенсә, ошо хеҙмәттәр менән ҡәнәғәт булыусылар аҙ.

Эльвира Айытҡолова ауыр иҡтисади шарттарҙа бюджет сығымдарын оптималләштереү мәсьәләһе ҡиҫкен тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Ике йыл элек Рәсәйҙең бөтә дауалау учреждениелары өсөн яңы туҡланыу нормалары билдәләнгәйне. Пациенттарҙың рационына ҡоро аҡһым ҡатышмалары һәм витамин, минерал комплекстар өҫтәлде, кәбеҫтә, балыҡ һәм һөт порциялары кәметелеп, ярмалар биреү арттырылды. Күп дауаханаларҙағы сирләләр әйтеүенсә, ашханаларҙа туҡланыуға бәйле хәл һаман да ҡиҫкен ҡала.

- Туҡланыуҙы ойоштороуға был күләмдәге аҡса бүленә икән, ул сифатлы, тәмле һәм урындағы етештереүселәрҙән булырға тейеш, - тип билдәләне Эльвира Айытҡолова. - Шуға күрә төбәк штабы ошо мәсьәләне контролгә ала. Түңәрәк өҫтәл барышында һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф учреждениеларын туҡланыу өлөшендә аутсорсингҡа күсереү мәсьәләләре лә күтәрелде.

# СӘФӘРЕҢДЕ АЛДАН УЙЛА



**Өфө юлдарында көндән-көн автомобилдәр һаны арта. Әле уларҙың һаны 400 мең тирәһенә яҡынлаша. Барлыҡ ҙур мегаполистарҙа ла автомобилдәрҙең күбәйеүе проблема тыуҙыра, шуларҙың береһе - юл-ремонт эштәрен башҡарыуҙағы ауырлыҡтар. Ремонт осоронда индерелгән сикләүҙәр айырым участкаларҙа тығындар барлыҡҡа килтерә, хәрәкәтте тоҡарлай.**

Барлыҡ ошо факторҙарҙы иҫәпкә алып, ремонт эштәре төнөн, ял һәм байрам көндәрендә ойошторола. Әммә ҡайһы бер объекттарҙа, өфөләрҙең кискә мәлдә тыныслығы боҙолоуына зарланып мөрәжәғәт итеүҙәрен иҫәпкә алып, ремонт эштәре көндөҙ башҡарыла. Эште тиҙләтеү маҡсатынан төҙөүселәр бер нисә сменала эшләй.

Ҡала халҡына ремонт барған урындарҙы урап үтеүсе маршруттарҙы алдан һайларға тәҡдим ителә. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта Өфөлә Салауат Юлаев проспектында ремонт эштәре бара. Бынан тәүлегенә 28 мең автомобиль үтә, әммә ремонт ваҡытында баш ҡалаға Таш кисеү йәки Дим районынан Затон бистәһе аша инергә мөмкин. Шуға күрә, юлдарҙа ремонт эштәре тәүлектең ниндәй ваҡытында башҡарылыуына ҡарамаҫтан, ул тәү сиратта халыҡтың именлеген һәм уңайлығын күҙ уңында тота һәм шуға ла граждандар ҙа ваҡытлыса унайһыҙлыҡтарҙы аңлап, ҡайҙалыр барырын алдан планлаштырһын ине.

# ГАГАРИН ИҪТӘЛЕГЕНӘ



**Өфөлә тәүге космонавт Юрий Гагариндың иҫтәлеген мәңгеләштереү маҡсатында мемориаль таҡтаташ асыу тантанаһы булып үтте. Йыйылыусылар Гагарин урамы, 14/1-се йорт фасадындағы летчик-космонавт Юрий Гагариндың ҙур портретын тамаша ҡылды. Граффити авторҙары - Өфө рәссамдары Олег Кайбышев менән Артур Лукьянов.**

Сарала илебеҙҙең ракета-йыһан тармағы ветерандары, ҡала хакимиәте вәкилдәре, мәктәп уҡыусылары, Сипайлово бистәһендә йәшәүселәр йыйылды. Юрий Гагаринға мемориаль таҡтаташ асыуҙа легендар космонавтар - Рәсәйҙең Космонавтика федерацияһы президенты Владимир Коваленок, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройҙары авиация генерал-майоры Виктор Горбатко һәм авиация полковнигы Александр Иванченков ҡатнашты. Улар баш ҡалаға Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған байрам сараларына, "Өфөлә Гагарин көндәре - 2015" республика балалар һәм үҫмерҙәр фестиваленә, Юрий Гагарин кубогына республика олимпиадаһында еңеүселәрҙе бүләкләү өсөн килгән.

Тантана һуңында сарала ҡатнашыусылар мемориаль таҡтаташҡа сәскәләр һалды. Шуныһы иғтибарға лайыҡ:

ТУҠТА, МӘЛ!

# РЕСПУБЛИКАЛА - БАЙРАМ!



Бөрйән районында.





Күгәрсен районында.



Ишембай районы Маҡар ауылында.



Баймаҡ районы Темәс ауылында.



Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡалҡан биҙе

❖ 10 лимон һуты, 10 баш ваҡланған һарымһаҡ, 1 литр балды ҡушып, 7 көн төнәтергә. Көнөнә 1 тапҡыр 4-әр балғалаҡ эсергә.

❖ 0,5 литрлы банкаға 14 әстерхан сәтләүегенең ҡабығын һалырға, банка тулғансы араҡы ҡойорға, яҡшылап ябырға һәм 7 көн йылы урында төнәтергә. Иртән ас ҡарынға 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ 1 лимонды ҡабығы менән бергә ҡырғыстан үткәрергә, шәкәр ҡушырға һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡ ашарға.

❖ 5 стакан һыуға 1 стакан һоло һалып, кеҫәл кеүек масса барлыҡҡа килгәнсе ҡайнатырға. Һөҙөргә, 2 стакан һөт ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә. 2 ҡалаҡ бал өҫтәгәс, тағы ла 5 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

❖ Шалҡан орлоҡтарын һауыҡҡансы муйынға тағып йөрөргә.

❖ 1 стакан тартылған ҡарабойҙай ярмаһы, алдан ваҡланған 1 стакан әстерхан сәтләүеге, 1 стакан балды бергә ҡушып болғатырға. Аҙнаның бер көнөндә бер нәмә лә ашамайынса ошо ҡушылма менән туҡланырға. Һыу, сәй эсергә ярай. Дауаланыу курсы - 1,5 ай. 1 ай ял иткәндән һуң тағы бер курс ҡабатларға.

## Баш мейеһе тамырҙары

Муйын умыртҡаларында ҡан әйләнеше боҙолғанда, остеохондроз мәлендә йәки муйын умыртҡаһына тәьҫир итеүсе башҡа ауырыуҙар ваҡытында баш мейеһе тамырҙарын таҙартыу кәрәк.

❖ 1-әр стакан һуған һуты менән бал алырға, бергә ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 2-шәр балғалаҡ ашарға. Дауаланыу курсы - 3 ай. Был дауа организмды нығытыу сифатына ла эйә.

❖ 10 грамм дегәнәк тамырын термосҡа һалып, ҡайнар һыу ҡойоп, бер төн төнәтергә. Һәр иртә ашар алдынан 5 ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы 1,5-2 ай. Ике аҙна ял иткәндән һуң тағы бер тапҡыр ҡабатларға. Дауаны ултырып эшләүселәр профилактика рәүешендә ҡуллана ала.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Алты орден һәм башҡа күп миҙалдар кавалеры булған яугирҙы 1945 йылдың 9 апрелендә "Советтар Союзы Геройы" исеменә тәҡдим иткән булғандар икән. Ошо туралағы мәғлүмәтте туғаны Зәкиә Солтанморат ҡыҙы тапҡан.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЯҢҒЫҘ ҠАРҒА...

## ямғыр килтермәҫ

**Башҡорт халыҡ ижадында ҡарға игелек күрһәтеүсе, тере һыу табыусы булараҡ һүрәтләнгән сюжеттар ҙа осрай. "Урал батыр" эпосында Һомайҙың үтенесе буйынса ҡарға суҡышында тере һыу алып килә. Һомай был һыу менән Урал батыр ҡасандыр үлтергән батырҙарҙың үле тәнен йыуып, уларҙы терелтә лә, улы Яйыҡ менән бергә Урал батырға ярҙамға ебәрә.**

"Алтын ҡауырһын" әкиәтендә батырҙың аты һыу аҫтында йәшәүсе тылсымлы тай менән алышып, һәләк була. Шул саҡта батыр аттың үләкһәһен суҡырға тип килгән ҡарға балаһын тотоп ала ла, уның ғүмерен һаҡлап ҡалыу шарты менән инәһенән тере һәм үле һыу килтереүен һорай. Ҡарға тере һәм үле һыу алып килеп, атҡа һибеп, уны терелтә.

Ҡарғаның күктәге һәм ерҙәге мөғжизәле һыуҙар менән бәйле булыуы "Һоро ҡарға" әкиәтендә күрәбеҙ, унда ҡарға һөт күленең батшаһы итеп һүрәтләнә. Бер әкиәттә ҡарға диңгеҙ батшаһының өлкән ҡыҙы Алтынсәскә хеҙмәт итә. "Ҡарғатуй" байрамында ҡарғаларҙан ямғыр һорау ҙа юҡҡа түгелдер. Дим буйы башҡорттары был мәлдә йылғаға бутҡаның ҡалған өлөшөн ташлаған. Ҡарғаның һыу стихияһы менән бәйлелеге "Яңғыҙ ҡарға ҡарҡылдап, ямғыр килтермәҫ" тигән әйтемдә, "Ҡарға ямғыр ҙа, ҡар ҙа яуҙыра ала", "Әгәр ҙә ауыл эргәһендәге ҡарғаларҙы ҡыуып ебәрһәң, ямғыр тыма", "Ҡарға елгә ҡаршы ултырып ҡарҡылдаһа, ямғыр яуыр" тигән ышаныуҙарҙа ла күренә.

Ҡайһы бер материалдарҙа ҡарға матди байлыҡ символы ла. "Ала ҡарға хан" әкиәтен генә хәтергә төшөрәйек: унда ҡарға ҡарт һунарсының ауына эләгеп, ireклек өсөн уның теләктәрен үтәргә вәғәҙә бирә. Ул ҡатынының теләге буйынса, ҡарғаға өс тапҡыр мөрәжәғәт итә. Хан ҡарға беренсеһендә уға - ишәк, икенсеһендә - үҙенән-үҙе май һәм башҡа һөт ризыҡтары менән тулыланып торған көбөсәк (май туғыу өсөн ағас һауыт) бүләк итә. Әммә ҡайтышлай был бүләктәрҙе бурҙар урлап ҡаса. Шул мәлдә ҡарға һунарсыға киндер туҡмағы бирә, был туҡмаҡ бурҙарҙы туҡмай башлай һәм улар бүләктәрҙе кире ҡайтара. Ошо ваҡиғанан һуң һунарсы ҡатыны менән етеш тормошта көн күрә башлай.

Ышаныуҙар буйынса, ҡарға кешеләрҙе һәм мал-тыуарҙы насар ауырыуҙарҙан һаҡлай. Был ышаныуҙарҙың күренеше булып һарай һәм баҡсаларға ҡарғаның үләкһәһен элеп ҡуйыу тора. Был, уларҙың фекере буйынса, йорт ҡоштарын, баҡсаны һаҡлай.

Сәңгелдәккә беркетеп ҡуйылған ҡарға тырнаҡтары яуыз күҙҙәрҙән аралай. Йортҡа, һарайға ҡағып ҡуйылған ҡарға ҡанаты кешене һәм малды сихырҙан, күҙ тейеүҙән һаҡлай. Баш ауыртҡанда, тән һыҙлағанда был ерҙәрҙе ҡарғаның ҡанаты менән һыйпайҙар, кейемгә ҡарға ҡаурыйҙары тегеп ҡуйыу, кейемгә ҡарға һүрәтен сигеү ошо уҡ ышаныуҙар менән бәйле. Әлшәй, Туймазы, Белорет райондарында йәшәүсе өлкәндәр һөйләүенсә, ҡарғаның үте күҙгә аҡ төшкәндә дауа булараҡ ҡулланыла. "Урал батыр" эпосында Ҡатил батшаның байрағына төшөрөлгән ҡарға һүрәте яуыз иблистең хакимлығын һаҡлаған.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ГЕРОЙ ХАҠЫНДА МӘҒЛҮМӘТ ТАБЫЛДЫ!



*Гвардия өлкән сержанты Әхмәтсафа Юнысбаев, 1945 йыл.*

**Ошо көндәрҙә, Еңеүҙең 70 йыллығын байрам итеүгә икеөс кенә көн ҡалғас, Баймаҡ районы Шәмсүл ауылында (хәҙерге Сәйәғәфәр ауылы янында) тыуып үҫкән Юнысбаев Әхмәтсафа ағай мәрхүмдең балаларына тулҡынландырғыс хәбәр килеп етте. Алты орден һәм башҡа күп миҙалдар кавалеры булған яугирҙы 1945 йылдың 9 апрелендә "Советтар Союзы Геройы" исеменә тәҡдим иткән булғандар икән. Ошо туралағы мәғлүмәтте интернет селтәренән Баймаҡта йәшәгән туғаны Зәкиә Солтанморат ҡыҙы тапҡан.**

Әхмәтсафа ағай үҙе тере саҡта: "Командование миңә Советтар Союзы Геройы исеме биреүгә тәғәйенләүсе документ (представление) ебәргәйне. Тәки килеп етмәне бит миңә шул награда. Военкоматтан да эҙләтеп ҡараным. "Вы списках героев не числитесь", тигән генә яуап алдым...", - тип, ҡайһы саҡта һөйләп ҡуйғылай торғайны. Бала сағымда һуғыш эпизодтары хаҡында ҡабат-ҡабат һөйләтеп, уны йөҙәткәнем хәтеремдә. Бәлки, шуғалыр ҙа, был хәбәр мине битараф ҡалдырманы. Ул ғына ла түгел, был хаҡта ишеткән уның балалары менән бер рәттән, мин дә күҙ йәштәремде тыйып ҡала алманым. Тулҡынлана-тулҡынлана, ашығыс рәүештә ҡулыма ҡәләм алдым. Әсәйемдең бер туған ҡустыһы Әхмәтсафа ағайымды геройға тәғәйенләп тә, шул юғары исемде бирмәгәндәренә ифрат та борсола инем. Әммә был хаҡта иҫбатлаусы документтар булмағас, әлбиттә, ошоғаса уның һөйләгәндәре тик хәтирәләр генә булып ҡала килде. Ә бөгөн ағайымдың һуғышта күрһәткән батырлығын бәйән иткән бер-нисә һуғыш эпизодын уның командиры яҙған "Наградной лист" аша күрһәтергә мөмкинлегем булыуына сикһеҙ шатмын.

Сигенә-сигенә, үҙ өңөнә яҡынайған һайын беҙҙең ғәскәрҙәргә нығыраҡ айбарланып, бар көстәрен йыйып ҡаршылыҡ күрһәткән фашист илбаҫарҙарының иҫәпһеҙ-һанһыҙ контратакаларын кире ҡаға-ҡаға алға барған совет һалдаттарының, ысын Геройҙарҙың береһе хаҡында һүҙ. Полк командиры гвардия подполковнигы Репяхов тарафынан ҡыҙыу һуғыш мәлендә сағыштырмаса ҡыҫҡа ғына яҙылған был объектив материал ағайымдың иҫ киткес батырлыҡтары тураһында һөйләй. Ике кимәлдәге (полк һәм унан юғарыраҡ булған бригада) командирҙарҙың ҡултамғалары һәм хәрби частарҙың герблы мисәттәре менән нығытып ҡуйылған тексты гәзит уҡыусыларға тәҡдим итәм:



*Советтар Союзы Геройы исеменә командование яҙған представление.*

**Н А Г Р А Д Н О Й Л И С Т**

**Юнусбаев Ахметсафа Мухаметович, Гвардии сержант, Наводчик орудия 318 гв.**
иптап, 6-й Отд. Гв. Истреб. Противотанк. Артил. Рижской Бригады РГК.
**Представляется к званию ГЕРОЯ СОВЕТСКОГО СОЮЗА.**
Год рождения 1924г. Национальность - башкир. Парт. - Чл ВКП(б)...
В Красной армии с августа 1942 года.
**...Призван Баймакским РВК, Башкирская АССР...**

**1. КОНКРЕТНОЕ ИЗЛОЖЕНИЕ ЛИЧНОГО БОЕВОГО ПОДВИГА ИЛИ ЗАСЛУГ...**

За время пребывания в полку т. Юнусбаев показал свое мастерство, хладнокровие и бесстрашие в борьбе с немецкими танками и самоходными орудиями. Еще в битве за г. Орел, 3 августа 1943 года в районе Стальной конь, тов. Юнусбаев отражая контратаку танков противника, несмортя на то, что орудийный расчет был полностью выведен из строя и не взирая на ураганный артиллерийский, минометный огонь противника, на беспрерывную бомбежку с воздуха, он один вступил в единоборство с 12-ю танками противника и будучи раненым продолжал вести огонь. В этом неравном бою он уничтожил 3 немецких машин и вынес с поля боя тяжело раненого своего командира батареи. Танковая атака противника была отбита, наша пехота пошла вперед и достигла пригородов г. Орел.

В наступательных боях с 20-го по 26-е января 1945 года в районе дер. Зале, Латвийской ССР, тов. Юнусбаев сопровождая пехоту огнем и колесами, под сильным арт. мин. и пулеметным огнем противника своевременно и мастерски уничтожал огневые точки пр-ка, и тем самым давал возможность продвигаться нашей пехоте вперед. 26 января 1945 года в р-не д. Зале противник предпринял одна за одной шесть контратак силой до 500 чел. при поддержке семи самоходных установок. Тов. Юнусбаев в этих боях оставался у орудия и был легко ранен, но поле боя не оставил до тех пор, пока не отразил все контратаки противника. В этих боях он уничтожил два самоходных орудия, один танк, одну бронемашину, 4 пулеметных точки и до 50 солдат и офицеров пр-ка.

18-го марта 1945 года при отражении танковых контратак пр-ка в р-не д. Янайши, Латвийской ССР, расчет орудия где был наводчиком Юнусбаев был выведен из строя огнем артиллерии и пулеметов пр-ка, но тов. Юнусбаев несмотря на то, что пр-к вел сильный арт. мин. и пулеметный огонь, вступил в единоборство с 13-ю танками и самоходными орудиями противника.Тов. Юнусбаев поджег три вражеских машины, но был ранен в левую руку. Боеприпасы у его орудия сгорали от прямого попадания вражеского снаряда. Танки противника продолжали двигаться. Тов. Юнусбаев рискуя своей жизнью и истекая кровью, взял противотанковую гранату и пополз на встречу танкам противника. Подпустив вражескую машину на 10-15 метров, он превозмогая боль, выдернул зубами кольцо и бросил гранату. Самоходное орудие пр-ка запылало. Остальные танки и самоходные орудия пр-ка потеряв четыре машины повернули обратно.

Тов. Юнусбаев своим проявленным героизмом спас свое орудие и дал возможность нашей пехоте продвигаться вперед.

Командир 318 гв, ИПТАП
Гвардии подполковник Репяхов
9 апреля 1945г.

**2.ЗАКЛЮЧЕНИЕ ВЫШЕСТОЯЩИХ НАЧАЛЬНИКОВ.**

"Достоин присвоения звания "Герой Советского Союза".

Командир 6 отд. гв. ИПТА Риж. Бр. РГК
Гвардии полковник Крылов
10 апреля 1945г.

**3. ЗАКЛЮЧЕНИЕ ВОЕННОГО СОВЕТА АРМИИ.**

Достоин присвоения звания...

***✓ Орден һәм миҙалдары күп булған яугирҙарҙы Ҡыҙыл майҙанда үтәсәк тәүге Еңеү парадына йыя башлағас, ағайым да шунда ҡатнашырға тейешле булған. Әммә парадҡа репетиция өсөн Мәскәүгә китеп өлгөрмәгән ул.***



Танктарға ҡаршы һуғышыу өсөн тәғәйенләнгән артиллерия полкы составында, немецтарҙың контратакаларын кире ҡаға-ҡаға, бер-нисә мәртәбә яраланған, күп мәртәбәләр үлем менән күҙгә-күҙ осрашып, Бөйөк Еңеүҙе яҡынайтыуға тос өлөш индергән ошо ағайым хаҡында нисә тапҡыр уҡталып, бер ваҡытта ла матбуғат биттәрендә яҙғаным булмағайны. Ҡасандыр, мәктәпте тамамлап, институтҡа имтихандар биреп йөрөгән саҡта, Ишембай районынан Рафаил Халиков менән танышҡайным. Атаһы, Советтар Союзы Геройы Тимербулат Халиков хаҡында ғорурланып һөйләгәс, минең ағайыма ла шул исемде бирергә тейеш булғандар, әммә командир яҙған тәғәйенләү документтары ҡайҙалыр юғалған, тип Рафаилға аҡ көнсөллөк менән ҡарағайным. Эйе, геройҙар исемлегендә, ысынлап та, ағайым юҡ. Ағайым үҙенең геройҙар исемлегендә булырға тейеш булып та, унда үҙенең юҡлығы хаҡында белә ине. Тап ана шуның өсөн дә архивтан кәрәкле документтарҙы эҙләтеү маҡсаты менән хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт иткәйне ул. Әммә ул саҡта архив ҡағыҙҙарында соҡсонорға теләүселәр ҙә әллә ни булмағандыр инде...

Йәнен-тәнен аямай Ватаны өсөн һуғышҡан ябай һалдаттың сикһеҙ батырлығын раҫлаған бына ошо документ, һис шикһеҙ, артабан тейешенсә органдарға барып етергә тейеш булған да бит... Бик үкенесле, әммә беҙ үткәнде, тарихты кире бора алмайбыҙ. Тик бына ошо Юнысбаев Әхмәтсафа ағайым һымаҡ Ысын геройҙарыбыҙ хаҡында онотмаһаҡ ине. Ағайымдың үҙе тере саҡта һөйләгән хәтирәләре лә иҫкә төшә. Нисек итеп уны, ҡаты яраланған дәүкәүҙәле һалдатты, "Ҡалдыр ҙа кит мине һеңлекәш, көсөң етмәй бит..." тип үтенеүенә лә ҡарамай, һуғыш яланынан кескенә бер шәфҡәт туташы плащ-палаткаға һалып һөйрәп алып сыҡҡаны хаҡында, йәиһә, ҡамауҙа ҡалып, провизиялары бөтөп, һайыҫҡан, төлкө аулап тотоп ашағандары тураһында ла күп итеп һөйләргә була.

Янбаш һөйәгенә ҡаҙалған танк снаряды ярсығын ялан госпиталендә ала алмауҙары һәм шул дошман металын һуңғы көндәренә тиклем тәнендә йөрөтөүе хаҡында ла иҫкә алғылай ине ул ҡайсаҡ. Айырыуса болотло көндәрҙә нык һыҙлай ине уның тән йәрәхәте. Хәҙер Баймаҡ районы Йомаш ауылының зыяратында инде ана шул немец тимер ярсығы...

Немец окобында "рукопашный" һуғышты ла татып ҡарағанын иҫкә ала ине бәһлеүән кәүҙәле Әхмәтсафа ағайым. Латвия ерен фашистарҙан азат итеүҙә ҡатнашҡан меңәрләгән яуҙаш иптәштәрен юғалтыуы һәм шул уҡ ваҡытта ана шул илдә һуңғы осорҙарҙа унда-бында күренгеләй башлаған неонацистар хаҡында ишетеп бик тә көйә ине ул.

Орден һәм миҙалдары күп булған яугирҙарҙы Ҡыҙыл майҙанда үтәсәк тәүге Еңеү парадына алдан һайлап алып йыя башлағас, ағайым да шунда ҡатнашырға тейешле булған. Әммә парадҡа репетиция өсөн Мәскәүгә китеп өлгөрмәгән ул. Юлға сығырға бер-ике көн ҡалғас, яраланып, санчаҫка эләккән һәм һөҙөмтәлә парадҡа барырға яҙмаған батыр ағайыма.

Һуғыш тамамланғандан һуң тағы бер йылдай хеҙмәт итеп, Ҡыҙыл армия сафынан 1946 йылда демобилизациялана. Тыуып үҫкән ауылына ҡайтып, Хәмиҙә еңгә менән донъя ҡора. Ун өс бала табып, шуларҙың ун берен имен-һау үҫтерҙеләр. Еңгәм "Герой-әсә" исеменә лайыҡ булды. Балалары илебеҙҙең төрлө тарафтарында, төрлө тармаҡтарҙа эшләп, ғаиләләр төҙөп матур итеп йәшәп яталар. Хәҙерге көндә уларҙың 33 ейән һәм ейәнсәре, 45 бүлә һәм бүләсәре йәшәй. Ошо ике Геройҙың ифрат та инсафлы, тәртипле итеп тәрбиәләп үҫтергән балалары араһында һәр төрлө һөнәр эйәләре, медиктар, уҡытыусылар, фән кандидаты ла бар. Ейән һәм ейәнсәрҙәренә шатланып, һөйөнөп ултырыр ваҡытта ғына, алтмыш ете йәшендә (1991 й.) вафат булды ағайым.

Әхмәтсафа ағайымдың пинжәген "Ҡыҙыл Йондоҙ", "Ҡыҙыл Байраҡ", "III дәрәжә Дан Ордены", "I дәрәжә Бөйөк Ватан һуғышы" ордендары һәм башҡа күп миҙалдар биҙәй ине. Уларҙан тыш, Баймаҡ совхозында механизатор булып эшләгәндә лайыҡ булған Октябрь Революцияһы ордены уның тыныс шарттарҙа ла күрһәткән хеҙмәт батырлыҡтарына ишара...

Фашист илбаҫарҙарына ҡаршы аяуһыҙ көрәшкән ағайымдың Советтар Союзы Геройы исеменә тәғәйенләнеүе хаҡында белгертеп һәм ҡасандыр һуғыш яланында юғалып ҡалған ғәҙеллекте ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыуын үтенеп, балалары Рәсәй Президенты һәм Рәсәй хәрби көстәре Главнокомандующийы Владимир Путинға хат та яҙып ебәрҙе. Ул хатҡа ниндәйерәк яуап килерен бер Аллаһ ҡына белә. Беҙгә тик ғәҙеллектең еңеүенә өмөт итергә ҡала.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**БР Яҙыусылар союзы ағзаһы,**
**отставкалағы подполковник.**

*МАТУР ХӘТИРӘ*

# АТАЙҘАР ТӘРБИӘҺЕ...

## илһөйәрлек булды



**Илһөйәрлек, ватансылыҡ, яугирлыҡ тәрбиәһен беҙҙең быуын кешеләре утты-яуҙы үтеп ҡайтҡан Бөйөк Ватан һуғышы ветандары - атайҙарыбыҙҙан алдыҡ. Атайым Сәйфулла Ямалетдин улы эскәмйәгә сығып ултырһа, уның янына Хөснулла Шәйәхмәтов, Яхья Ишмөхәмәтов ағайҙар килә. Әңгәмәгә граждандар һуғышынан иҫән ҡайтҡан Хафиз бабай ҡушыла.**

Туғандар, таныштар килһә, атайым уларҙы түше тулы орден-миҙалдар тағылған хәрби кейемен кейеп, әсәйем Рауза Зиннәтулла ҡыҙы менән йәнәшә ултырып төшкән фото янына килтереп: "Командир пулементного расчета системы "Максим" гвардии старший сержант, кавалер ордена Славы III степени, дважды "За отвагу", - тип, наградалары тураһында үтә лә ҙур ғорурлыҡ менән бәйән итә. Һуғышҡа тиклем 7 класс белемле атайымдың хәтере шәп ине. Һуғышҡа Сапунгарала инә, ә еңеүҙе Кенигсберг ҡәлғәһендә ҡаршылай. Командирҙар курсында уҡырға тәҡдим итһәләр ҙә, бармай, әммә аҙаҡтан үкенгеләп тә ҡуя ине. Яратҡан йыры "Өс танкист" булды. Йомшаҡ тәбиғәтле, ярҙамсыл, изге күңелле атайым беҙҙе юҡты-барҙы күрмәҫкә өйрәтте, үтә белдекле булыуҙан тыйып үҫтерҙе.

Атай-әсәйҙең тәүҙә бер-бер артлы 4 ҡыҙы тыуа: Рәйлә, Фәүзиә, Нәйрә, Нәжибә. Атайым һуңғараҡ тыуған ике улына ла бик ҡыуанды, малайҙарға өй һалышып, кәләш алып биреп өлгөрмәнем, тип тә үкенде үлер алдынан.

Аң-белемгә зирәк атайыма ла, әсәйемә лә уҡытыусы булыу бәхете эләкмәй, шуғалыр ҙа улар беҙҙе, ҡыҙҙарын, уҡытыусы итеп күргеләре килде. Уҡытыусы эше үҙенде тотошлай балаларға бағышлауҙы талап итә. Бушамай киткән саҡтарымда әсәйем: "Ир үлер ҙә, дан ҡалыр", - тип, уҡытыусылыҡ хеҙмәтебеҙҙе ир-егетлек кимәленә күтәреп, бәҫен арттырып ебәрер ине. Сит-ят ергә сығып йөрөгәне булмаһа ла, әсәйемдә лә илһөйәрлек тойғоһо бик көслө ине. Һөргөнгә ебәрелеп, шунда тороп ҡалған ағаһы Тәлғәт бабай Воркутанан отпускыға ҡайтһа, әсәйемдән йырлауын үтенеп, үҙе тәгәрәп илай торған булған. Шуғалыр ҙа ер-һыу, тыуған төйәк төшөнсәләренә оло мәғәнә һала, ихтирам һаҡлай ине. Болдорона сыға ла: "Эй, Арҡырымды, Торһайымды ҡарап торам әле. Бер ерем һынманы, ауыртманы, бер ҡасан да абынманым, һөрөнмәнем. Торһайҙа еләк ваҡ, Арҡырыны үтеп, Өскүл яланына төшөп, еләк алып ҡайта инем. Эре еләкте Белорет баҙарында мәрйәләр сират тороп ала ине, ҡалай шәп булғанмын", - тип, шөкөр итә. 75 йәшенә тиклем бесән сапты, әхирәттәре менән намаҙға ла баҫтылар, ураҙа ла тотто.

"Бесәнлектәрҙе сабығыҙ, әрәм итмәгеҙ. Ошо ер-һыу өсөн Кирам бабайҙарым, олатайҙарым күпме ҡан түккән", - ти ине. Аҙаҡтан, бесән сабырға хәле етмәгәс тә бара, ҡайын төбөндә намаҙын уҡый ине. "Бесәнгә килгәс, һаулыҡ һорашығыҙ, бесәнен эшләп бөткәс, икенсе йылда ла иҫән-һау һиңә килергә яҙһын, тип, хушлашып ҡайтығыҙ", - ти ине. Шунан йырлап ебәрә:

*Эй, һайрай ҙа был һандуғас,*
*Һаҙ һайламай бит ул, тал һайлай.*
*Был түрәлек менән был шөһрәт*
*Ил һайламай бит ул, ир һайлай,* - тигән юлдары ғына хәтерҙә ҡалған. "Хәҙер донъя көтәм тигән кешегә бесәнлек иркен, элек беҙҙең заманда кеше ситкә китмәне, ниндәй ауыр саҡта ла үҙ йәнен үҙе алманы, - тип аптырай. - Хәҙер кешегә әллә ни етмәй, ахырзаман етһә, ир - ҡол, һыйыр бол булыр", - тип көйөп ала ине.

Әсәйем менән атайымдың теләктәре тормошҡа ашты, һәр кемебеҙ үҙ урынын, үҙ һөнәрен тапты, үҙ районыбыҙҙа, тыуған төйәгебеҙҙә ҡартайып киләбеҙ, балаларыбыҙ, түгелмәй-сәселмәй, үҙҙәре бала үҫтерә. Көн һайын доғалар уҡып, әрүахтарыбыҙ риза булыуын теләйем. Ҡәҙерлене ҡәҙерлеһе ҡәҙерһеҙгә ҡалмаһын.

**Нәйрә ИШМӨХӘМӘТОВА.**
**Учалы районы Озерный ауылы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Был район башҡорттарының физик тибы үҙенсәлектәре уларҙы Саян-Алтай таулығының төрки телле ҡәбиләләре менән яҡынлыҡтары булыуын күрһәтә һәм был, моғайын, Алтай халҡының ҡалмыҡтар менән ҡатнашлығы булыуы менән аңлатылалыр.

Алыҫ төньяҡ-көнсығыш районы башҡорттарына бирелгән характеристиканы дөйөм алғанда уға ингән барлыҡ башҡорт ырыуҙары өсөн дә, һалйоғоттарҙы индермәйенсә, ҡулланырға мөмкин. Һалйоғоттар үҙ районындағы башҡа башҡорттарҙан ҙур буйлы, уртаса түңәрәк, сағыштырмаса оҙонса йөҙлө, тар танаулы һ.б. булыуҙары менән айырыла. Әгәр Д. П. Никольский менән минең һалйоғоттарҙы тикшереүҙәремде Н. Ю. Зограф тикшергән күрше мишәрҙәрҙең физик тибы мәғлүмәттәре менән сағыштырып ҡарағанда, мишәрҙәр менән ҡатнаш никахтар һалйоғот башҡорттарының урта тибының ошо райондың башҡа типтағы башҡорттарынан ни өсөн айырылып тороуын еңел аңлата. Бынан тыш, ошо районда көньяҡ барын-табындарының артыуын һәм уларҙың да йөҙө оҙонса булыуын билдәләргә кәрәк. Һалйоғоттар шулай уҡ башҡа башҡорттарҙан лингвистик йәһәттән дә айырыла.

Көнсығыш өлкәнең икенсе (б) районы Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында ята һәм уға Ағиҙелдең һул яғында йәшәүсе үҫәргәндәр, түңгәүерҙәр, бөрйәндәр, ҡарағай-ҡыпсаҡтар инә. Үҙенең физик тибы буйынса был район башҡорттары төньяҡ-көнсығыштыҡыларҙан артыҡ айырылмай. Улар шулай уҡ нык пигментацияланғандар (75,6 процент), буйҙары менән, аяҡ оҙонлоғо һәм кәүҙә оҙонлоғо шундай уҡ нисбәттә булғанда ла (скелии күрһәткесе 87,5) төньяҡ-көнсығыш башҡорттарынан бер ни тиклем бейегерәк (166,4 см). Улар түңәрәк башлы (баштың уртаса күрһәткесе 82,6), әммә төньяҡ-көнсығыш башҡорттары кеүек үк түгел, йөҙ формаһы (йөҙҙөң уртаса күрһәткесе 77,3) беренсе район башҡорттарыныҡы кеүек үк, әммә саҡ ҡына бәләкәйерәк (бит киңлеге диаметрының уртаса күрһәткесе 144,2 мм), танауҙары саҡ ҡына киңерәк (75,6). Был район башҡорттарын ҡылыҡһырлағанда мин П. С. Назаровтың тикшеренеүҙәренә нигеҙләнәм.





Ошо район башҡорттарының физик тибына үрҙә бирелгән дөйөм характеристика менән айырым ырыуҙар араһында һиҙелерлек айырмалар бар. Йәғни көньяҡ район төньяҡ-көнсығыш район менән сағыштырғанда күп төрлө. Был көньяҡ башҡорттары тибы **(һүрәттәр)** күрше ҡаҙаҡтарҙың Урта жузы менән күп уртаҡ һыҙаттарға эйә.





***✓ Беҙ бергә йәшәй башлағас, бер-беребеҙҙең холоҡ-ҡылыҡтарына өйрәнеү мәлен дә шул тиклем еңел кисерҙек. Бында бер ниндәй ҙә сер юҡ, бары тик икенсе яртыңды нисек бар, шулай ҡабул итергә генә кәрәк.***



# БАЛАНЫ ИХЛАС

## дөрөҫ тәрбиә

**Уҡытыусы һөнәрен һайлаған кеше тәүлектең һәр ваҡытында ла эштә була. Был бигерәк тә гел халыҡ араһында булған, уларға бөтөн яңылыҡты еткереп торған, олоһона ла, кесеһенә лә ихлас кәңәштәр биргән, бер сара ла уларҙан тыш үтмәгән ауыл уҡытыусыһына хас. "Айыҡ ауыл - 2014" республика конкурсында еңгән Федоровка районы Яңы Яуыш ауылында йәшәүсе Тәскирә менән Ишморат МАЛИКОВтар ғаиләһе лә шундайҙарҙан. Ишморат Фәйзулла улы Яңы Яуыш дөйөм белем биреү мәктәбе директоры, Тәскирә Надир ҡыҙы Федоровка районының иң яҡшы мөғәллимәләренең береһе, БР Мәғариф отличнигы, ошо уҡ мәктәптә балаларға башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем бирә. Алдынғы ҡарашлы уҡытыусылар, өлгөлө ғаилә ағзалары менән һөйләшеү ғаилә тәрбиәһе, ауыл уҡытыусыһы эшенең үҙенсәлектәре һәм, әлбиттә, айыҡлыҡ кеүек күркәм ғәҙәттәр тураһында барҙы.**

**▸ Маликовтар ғаиләһе барлыҡҡа килгән көнгә тиклемге ваҡиғаларға байҡау яһап алайыҡ: бер-берегеҙҙе тәү башлап ҡайҙа күрҙегеҙ?**

**Тәскирә Надир ҡыҙы:** Мин үҙем Бөрйән районы Ҡотан ауылынан, Белорет педагогия училищеһын тамамлап, эшләй башлағас, БДУ-ның башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенә ситтән тороп уҡырға ингәйнем. Студент саҡта таныштыҡ, Ишморат та география факультетының ситтән тороп уҡыу бүлегендә белем ала ине ул саҡта.

**Ишморат Фәйзулла улы:** Тәскирәнең курсташ егеттәре менән фатирҙа бергә тора инем. Бер саҡ тәнәфес ваҡытында бүлмәләш егеттәр эргәһенә барғайным. Шунда Тәскирәне күреп, бер ҡараштан ғашиҡ булдым. Яйлап ҡына егеттәрҙән уның тураһында һораштырам. Башҡаларҙан төҫө-башы, холҡо менән дә айырылып торған кеүек, бигерәк тә иплелеге күңелгә ятты. Башта уҡып бөтәйек, тип, байтаҡ ҡына дуҫлашып йөрөнөк. Бөрйәндең юлдары ла байтаҡ һынаны тойғоларҙы, әммә бер ҡасан да, башҡа бармайым, тип уйлағаным булманы. Ул яҡтың йор һүҙле халҡы ла оҡшаны. Бер йәй, ямғыр яуып тороуға ҡарамаҫтан, мотоцикл менән Бөрйәнгә сығып киттем. Барып етергә күп тә ҡалманы, тик мотоцикл батты ла ҡуйҙы. Төндө урманда үткәреп, иртәгеһенә "Урал" машинаһына мотоциклымды тейәп, Тәскирәнең ауылына барып төштөм дә, Ағиҙел ярында мотоциклды йыуырға уйлап торам. Ауыл халҡы элек колхозға сенаж эшләргә ярҙам итә ине, бер төркөм кешеләр йылға аша аҫылмалы күперҙән эшкә китеп бара, шунда берәүһе: "Иң тәүҙә үҙеңде йыу!" - тип ҡысҡыра. Уҡытыусыларына килгән дала егетенә былай берәү ҙә ҡырын ҡарағаны булманы. Шулай йөрөй торғас, үҙем диплом алдым да, тағы бер йыл уҡыуы ҡалыуға ҡарамаҫтан, Тәскирәне килен итеп, үҙебеҙҙең яҡҡа алып ҡайттым.

**Тәскирә Надир ҡыҙы:** Һүҙ ҙә юҡ, урманды ташлап, ялан, дала яғына йәшәргә китеүе ауыр булды. Тыуған ауылымдың һәр ташын, һәр ҡыуағын һағынып бер булам әле лә. Әммә тыуған ерҙән төшкән ер яҡын, тиҙәр, тормош иптәшең яҡшы икән, бөтөн ерҙә лә күңел тыныслығы табасаҡһың. Уның ипле, тыныс холоҡло булыуын тәүҙән үк баһалағайным, матур һөйләшә белеүе, иғтибарлы булыуы ла оҡшаны, ҡатын-ҡыҙ өсөн былары ла мөһим. Ул ышаныслы тормош иптәше, Рәсил улыбыҙ менән Нәркәс ҡыҙыбыҙ өсөн һәйбәт атай. Беҙ йәшебеҙ етеп, хатта бер аҙ һуңыраҡ та өйләнештек, тип уйлайым, сөнки Ишморатҡа - 31, миңә 26 йәш ине инде.

**▸ Һеҙ сағыштырмаса һуң кейәүгә сыҡтым, һуң өйләндем, тиһегеҙ, ә хәҙерге йәштәр ғаилә ҡororға бөтөнләй ашҡынып бармай. Был күренешкә ҡарашығыҙ нисек?**

**Тәскирә Надир ҡыҙы:** Улар араһында бик иртә кейәүгә сығып, иртә өйләнгәндәре лә бар бит әле. Тойғоларын һынамайынса, ҡабаланып өйләнешәләр ҙә, тиҙ генә айырылышып та ҡуялар, бына ошоноһо бигерәк ҡурҡыныс. Мин ғаилә ҡороу өсөн һуңыраҡ өлгөрөп етеүемә һис үкенмәйем, әгәр ҙә ҡабаланған булһам, тормош иптәшемде дөрөҫ һайламаған да булыр инем, кем белә...

**Ишморат Фәйзулла улы:** Бөгөн йәмғиәттә шундай күренеш тә барлыҡҡа килде бит: күп кенә олатай-өләсәйҙәр ейән-ейәнсәрҙәрен үҙҙәре ҡарай, ә улдары-ҡыҙҙары йә шәхси тормошон яйға һала был ваҡытта, йә ситкә эшкә китә. Үҙ балағыҙҙы үҙегеҙ тәрбиәләгеҙ, ти торғайны элек ололар. Был һүҙҙәрҙең нигеҙендә үҙеңә лә сәләмәтлек, шулай уҡ ғаиләңә лә ныҡлыҡ теләү ята бит. Ниндәй генә замандар булмаһын, ғаилә институты ныҡ булырға тейеш, шунда ғына милләтебеҙгә яҡшы балалар тәрбиәләй аласаҡбыҙ. Ошоно аңлаһа, йәштәрҙең ғаиләне иртә йәки һуң ҡороуында айырма юҡтыр, моғайын. Хәҙер яңғыҙ ҡартайған ир-егеттәр күп, ныҡ һайланып йөрөп, улар шундай кимәлгә етә - өйләнмәй ҙә ҡуя. 45-50 йәшлек донъя көтөрлөк бына-мын тигән ир-егеттәрҙән, нишләп өйләнмәйһең, тип һораһаң, атарлыҡ аныҡ сәбәбе лә юҡ уның. Ҡыҙҙар иһә, 30 йәште үткән егеттең йүне бармы ни, тип уйлап, кейәүгә сыҡмай.

Хәҙер йәштәр аҡыллы, күп уҡыйҙар, мәғлүмәт тә тулып ята. Ғаилә тормошондағы әллә ниндәй психологик күрсәткәр тураһында ауыҙ тултырып һөйләйбеҙ. Уйлайым да, беҙ бергә йәшәй башлағас, бер-беребеҙҙең холоҡ-ҡылыҡтарына өйрәнеү мәлен дә шул тиклем еңел кисерҙек. Бында бер ниндәй ҙә сер юҡ, бары тик икенсе яртыңды нисек бар, шулай ҡабул итергә генә кәрәк. Уны төҙәтәм, үҙгәртәм, тип уйлайһың икән, был инде эгоизмдың билдәһе. Шулай уҡ уға артыҡ талап ҡуйырға ла кәрәкмәй. Эш эшләһәк, гел бергә эшләнек. Мин кәртә-ҡураға, баҡсаға сығып, нимәлер эшләйем икән, Тәскирә лә эргәмдә булыша. Ул өйҙә өлгөрмәйерәк китә икән, мин ярҙам итәм. Бер-беребеҙгә дәғүә белдерешеп, әрләшеп ултырырға ваҡытыбыҙ бөтөнләй юҡ.

**▸ Башҡорт халҡында килен - ҡәйнә, кейәү ҡайны бусағаһынан, тиҙәр, бигерәк тә кейәүҙәргә ҡәйнә тарафынан айырыуса ҡәҙер-хөрмәт күрһәтелә. Атай-әсәй тәрбиәһенән тыш, ҡайны-ҡәйнәләрегеҙҙән ниндәй һабаҡтар алдығыҙ?**

**Ишморат Фәйзулла улы:** Ҡәйнәмдең 9 ҡыҙы, 1 улы бар, мин өйләнгәндә ҡайным мәрхүм ине инде. Был ғаиләгә мин етенсе бажа булып барҙым. Ҡәйнәм, ысынлап та, кейәүҙәренә бер ҡасан да насар һүҙ әйткәне юҡ. Былай үҙем төшкә, йондоҙнамәләргә әллә ни ышанып бармайым, шулай ҙа өйләнер алдынан төш күрәм: ҡәйнәм ағас табаҡты тултырғансы он һалып алған да, аласыҡта нимәлер бешереп йөрөй. Эстән генә уйлап ҡуйҙым: ҡәйнәм һәйбәт кеше булырға тейеш. Ауылдың иң хөрмәтле инәйҙәренән һанала, төпкөлдә йәшәйбеҙ, тип тормаған, бар балаһын да уҡыта алған. Ҡәйнә хөрмәтен татыған бәхетле кеше мин, уға ҡунаҡҡа гел ашҡынып барам.

**Тәскирә Надир ҡыҙы:** Мин дә тормошомдан ҡәнәғәтмен, ата-әсәйемдән яҡшы тәрбиә алдым, килен булып төшкәс, иремдең ата-әсәһе үҙ балаһылай ҡабул итте. Бына шуның өсөн дә балалар тәрбиәләү менән бергә, уҡытыу, йәмәғәт эшен дә тигеҙ алып бара алдыҡ. Элегерәк ауыл советы уҡытыусыларға йорт бирә ине, ҡәйнәмдәр менән ярты йыл бергә йәшәнек тә, башҡа сыҡтыҡ, үҙебеҙ йорт һала башланыҡ. Хатта балалар менән декрет ялында ла оҙаҡ ултырманым, эшкә сыҡтым, балаларҙы ҡәйнәм ҡараштты. Ҡәйнәмде тик йылы һүҙҙәр менән генә хәтергә алам, башҡорт ҡатын-ҡыҙы ниндәй булырға тейеш, был сифаттар бөтәһе лә унда бар ине. Былай эшләгәнеңде яратмайым, тимәне, нимәлер оҡшамай, тип тә йөҙ йыртманы. Әйтер һүҙен кинәйәләп, берәй ғибрәтле хәл аша белдерер ине. Әсәйемдең һабаҡтарына өҫтәп, унан күп нәмәгә өйрәндем мин. Ваҡыты етеп, ҡәйнә булғас, уның кеүек аҡыллы булырға яҙһын.



**✓ *Яҙмаларға ҡарағанда, уларға ҡайһы берҙә әрләү ҙә эләккән. "Һинең әрләүең генә бар" йәки "Яратып ҡына йөрөй инем, әрләй ҙә башланы" тигәндән һуң үҙеңдә үҙгәртәһең инде. Балаға бер аҙ ҡатыраҡ та булырға кәрәк.***

# ЯРАТЫРҒА КӘРӘК – ошонан башлана

**▸ Улығыҙ менән ҡыҙығыҙ тәрбиәһендә нимәгә күберәк иғтибар бүлергә тырышаһығыҙ?**

**Ишморат Фәйзулла улы:** Балаларҙы, тәрбиәләп алайым әле, тип, махсус тәрбиәләп булмай, улар барыбер ҙә һинең холоҡ-фиғелеңде, ҡылыҡтарыңды ҡабатлаясаҡ. Тәрбиә нигеҙендә ошо ябай ғына хәҡиҡәт ята. Улыбыҙ Рәсил күберәк минең эргәлә, ҡыҙыбыҙ Нәркәс - әсәһе янында. Шул рәүешле уларҙы төрлө эшкә лә өйрәтәбеҙ, холоҡтарын да камиллаштырабыҙ. Бушты-бушҡа ауҙарып, маҡсатһыҙ урам ҡыҙырып йөрөү беҙҙең балаларға хас ҡылыҡ түгел. Ауылда йорт тирәһендә эш тә күп, мин тышҡа сыҡҡанды күрә икән, улым да минең менән сыға. Әле ул Ишембай нефть колледжында уҡый. Йәш саҡтан ваҡытыңды ҡәҙер итә бел, тип өйрәтәм уны, спорт секцияларында, йыр ансамблендә шөғөлләнә. Әйткәндәй, балаларҙың икеһен дә күрше ауылға - Бала Сыырманға музыка мәктәбенә йөрөтөп уҡыттыҡ, музыкаль белем баланы ныҡ үҫтерә. Ваҡыты етмәй киткәнен күрһәк, берәй шөғөлөндө ташлап тор, тип әйткәнебеҙ ҙә бар улыбыҙға. "Бер башлағас, эш ташлау ир-егет холҡо түгел", ти, алдына ҡуйған маҡсатына етеү өсөн үҙен йәлләмәй. Улымда ихтыяр көсө, ғәҙеллек кеүек сифаттар тәрбиәләүгә баҫым яһаһам, ҡыҙым бөтөнләй икенсе мөнәсәбәт талап итә. Нәркәсте, матурым, сәскәм, аҡыллым, зирәгем, тип, наҙлы һүҙҙәр менән атап йөрөтәбеҙ. "Ҡыҙлы кеше - наҙлы кеше" тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Залда яҙышып ултырһаҡ, батмуҫка сәй, тәм-том ҡуйып, беҙҙе һыйларға сыға ул ҡайһы берҙә. Беҙгә лә оҡшай уның был хәстәре, маҡтап, күңелен күтәреп ебәрәбеҙ.

**Тәскирә Надир ҡыҙы:** Ҡыҙ бала матурлыҡты ла күрә, тоя белергә тейеш. Атаһы менән ағаһы беҙгә сәскәләрҙе йыш бүләк итә, Нәркәс үҙе лә бәләкәй саҡтан төрлө үлән, сәскәләрҙән гөлләмә эшләп, миңә бүләк итергә ғәҙәтләнгән. Үҫкәс, сәскә һатыусы йә табип булырға хыяллана, ике эштә лә бер юлы эшләп буламы, ти. Әсәйем өйҙә кейеп йөрөгән кейеме менән бер ҡасан да урамға сыҡмай. Күлдәктәрҙе лә үҙе текте, мин дә тегенергә әсәйемдән өйрәндем. Ҡыҙым да матур кейенә белһен, тием, зауыҡ тыумыштан бирелә, тиһәләр ҙә, уны ла тәрбиәләргә була. Ҡайһы бер ғаиләләрҙәге кеүек, балаларыбыҙ бәләкәй әле, тип, уларҙы йәлләп, кеше ҡушып эшләтеү юҡ беҙҙә. Бөтөн нәмәне дүртәүләп эшләйбеҙ. Бәләкәйерәк саҡтарында ла картуф сәскәндә лә, алғанда ла эргәбеҙҙә йөрөй торғайнылар, эшләйем тип торған баланы тыйырға кәрәкмәй.

Тәрбиә ысулдарына килгәндә, нимәнелер яңылышыраҡ эшләһәң, улар үҙҙәре үк һине төҙәтеп ҡуя. Балаларҙың бәләкәй саҡта һөйләгән һүҙҙәрен махсус дәфтәргә теркәп бара торғайныҡ. Яҙмаларға ҡарағанда, уларға ҡайһы берҙә әрләү ҙә эләккән. "Һинең әрләүең генә бар" йәки "Яратып ҡына йөрөй инем, әрләй ҙә башланы" тигәндән һуң үҙеңдә үҙгәртәһең инде. Балаға бер аҙ ҡатыраҡ та булырға кәрәк, шулай уҡ беребеҙ әйткәндә, икенсебеҙ ҡушылмай, балаларҙы яҡлашмай ҙа.

Шунан тағы ла бер мөһим нәмә тураһында онотторға ярамай. Бала атай менән әсәйҙең үҙен яратыуын тойорға тейеш, шул саҡта ғына уның һинән серҙәре лә, йәшерен эштәре лә булмай. Берәй нәмә эшләгәндә Нәркәс үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын да бирә, эш ыңғайында һөйләшеүе лә еңелерәк кеүек. Башҡорт халҡында яратыуыңды белдереп, артыҡ хис-тойғоға бирелеп китеү юҡ бит инде ул. Беҙҙең балалар, байрамдар, тыуған көндәр менән ҡотлағанда берберенә, беҙгә матур һүҙҙәр әйтеүҙән, яратыуын белдереүҙән, туғандар, дуҫтар килеп инһә, уларҙы ҡосаҡлап алыуҙан тартынмай. Улар үҙ ғаиләһен үҙҙәре үҫкән ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәргә ҡарап ҡорасаҡ, тимәк, был яуаплылыҡ та ата-әсә иңендә. Шөкөр, аталары эсмәй ҙә, тәмәке лә тартмай, улыбыҙ киләсәктә уға оҡшаһын. Күреп йөрөйбөҙ бит, бөтөн проблемаларҙың нигеҙендә эскелек ята. Бер ваҡыт ғаиләләр бәләкәй балаларының да тыуған көндәрен эскелек табыны менән үткәрә башлағайны. Быны эсеү өсөн сәбәп табыу тип кенә аңларға була. Хәҙер был ғәҙәт тә юҡҡа сығып бара.

**▸ Яңы Яуыш ауылы "Айыҡ ауыл" республика бәйгеһе еңеүсеһе лә. Уҡытыусы булараҡ, был конкурс барышында һеҙгә лә күп көс түгергә тура килгәндер. Яңы яуыштарҙың йәшәйешенә был сара ниндәй үҙгәрештәр индерҙе?**

**Тәскирә Надир ҡыҙы:** Бындай саралар, иң тәүҙә, халыҡты күтәрә. Ниндәйҙер бер уртаҡ сара, уртаҡ уй-теләк кешене берләштерә лә. Битарафлыҡ бик алама күренеш, кеше өйөнән сыҡһын, эргә-тирәһен таҙартһын, матурлаһын, тигән ниәт менән тотонғайныҡ. Элек колхоз-совхоздар булғанда халыҡты артынан эйәртерҙәй, һис юғында, эш ҡушып эшләтерҙәй етәкселәр бар ине. Хәҙер ундайҙар юҡ, бәләкәй ойошмалар етәкселәре үҙ ойошмаһы өсөн яуап бирһә лә, ауыл өсөн яуап бирмәй. Шуға ла ауыл халҡы менән һөйләштек, етмәһә, еңә ҡалһаҡ, уның премияһы ла була, уны мәсет төҙөтөүгә тотонорбоҙ, тигәйнек, халыҡ күтәреп алды.

"Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашҡас, беҙҙә хәҙер берәү ҙә эсмәй, тип әйтә алмайбыҙ, ғүмер буйы эсеүселәр менән көрәшеүҙе маҡсат итеп тә ҡуйманыҡ. Быға өлгәшеүе мөмкин дә түгел. Шулай ҙа ауылда спиртлы эсемлектәр һатыуҙы туҡтатып булмаҫмы, тигән уй ҙа бар ине. Ҡаҙағстандан килгән ағыулы араҡыны эсеп, байтаҡ кеше ҡырылды, хатта ирле-ҡатынлы парлашып "киткән" осраҡтар булды. Ошо ваҡиғаларҙан һуң халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барҙыҡ. Шунан "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашайыҡ, тигән ҡарар тыуҙы. Һөҙөмтәләр әле лә бар, әммә улар киләсәктә тағы ла күберәк буласаҡ. Эскелектән тыйыусы баннерҙар ҡуйҙыҡ, был яҙыуҙарҙы уҡып, уның эргәһенән үтеп йөрөйҙәр, эскәненең дә, самогон һатҡанының да намыҫына тейә бит инде барыбер. Иң мөһиме, балалар, эсергә ярамай, тигәнде һеңдереп үҫергә тейеш. Дөрөҫтә күпме генә әйтһәң дә, был етмәй. Балаларҙы яман ғәҙәттән аралау өсөн икенсе юл кәрәклеген аңлап та "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнаштыҡ. Был иң тәүҙә улар өсөн кәрәк.

**Ишморат Фәйзулла улы:** Ауылда йәшәгәс, күреп йөрөйбөҙ, уҡыусыларға "Эсмәгеҙ" тип кенә әйтеүҙең бер файҙаһы ла юҡ. Ә был конкурс сиктәрендә үткәрелгән сараларҙа балалар үҙҙәре ҡатнаша. Мәҫәлән, былтыр 1 Сентябрь байрамында улар: "Беҙ сәләмәт тормош яҡлы!" тип ант бирҙе. Әсәй-атайҙар, байрамда ҡатнашҡан етәкселәр ҙә ошо уҡ антты бирҙе. Аҙаҡтан балаға берәйһе һыра тәҡдим иткәндә: "Юҡ, мин ант бирҙем бит, оят була", - тип булһа ла тыйылып ҡаласағына ышанысыбыҙ бар. Һуңғараҡ айыҡлыҡ йәшәү рәүешенә әүерелеп китер. Бер тапҡыр эш буйынса икенсе мәктәптә булырға тура килгәйне. Малайҙарҙың бәҙрәфе лә, ҡыҙҙарҙыҡы ла тәмәке төпсөктәре менән туптулы. Беҙҙең уҡыусылар араһында тәмәке тартҡан кеше юҡ, эсеп йөрөгәндәрен дә күргәнебеҙ юҡ, шөкөр. Тулы булмаған мәктәп, уҡыусылар бәләкәй, шуға беҙҙә тәртип, тип әйтер инең, 9-сы класс балаһы сабый түгел. Баланың аңын яҡшы нәмәләр менән тултырып була бит бына!

Был конкурста ҡатнашыу ауыл халҡының аңын да үҙгәртте. Ағинәйҙәр ҡоро ойоштороп ебәрҙек, улар профилактик әңгәмәләр үткәрә. Полиция, инспекция хеҙмәткәре менән барыуҙың тәьҫире юҡ, ә өлкән кеше әйткәндән ояла кеше. "Әҙерәк кенә хилафлығы булған кеше лә урап үтә беҙҙе", тип әйтеп тора үҙҙәре лә. Төҙөлөш эштәре әүҙемләште, яңы йорттар төҙөлөп ята бөгөнгө көндә. Элек өмәләргә уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар сыға ине, хәҙер бөтөн ауыл йыйыла.

**▸ Ауыл уҡытыусыһының элек-электән абруйы ла ҙурыраҡ, эше лә күберәк инде ул. Күптәр, ауылда йәшәүе күңелһеҙ, ти, ә һеҙ төрлө ансамблдәр төҙөп, ауылдың мәҙәни тормошон йәнләндереп ебәргәнһегеҙ. Йәмәғәт эштәре менән булышыу - ул күңел талабымы? Әллә йәш быуынды тәрбиәләүҙә бер өҙөклөк тә булырға тейеш түгел, тигән ҡараштан сығып эш итәһегеҙме?**

**Ишморат Фәйзулла улы:** Үҙеңдең тормошоңдо үҙең йәмләп йәшәйһең инде ул. Минең тәүге һөнәрем - мәҙәниәт хеҙмәткәре. Йырсыларҙың Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге республика конкурсы тәүге йыл ойошторолғанда өсөнсө урын яулағайным, "Ирәндек моңдары"нда дипломант булдым, мөмкинлек булғанда, башҡа бәйгеләрҙә лә ҡатнашып торам. Мәктәптә уҡытыусы-тәрбиәселәрҙән ҡатын-ҡыҙҙар ансамбле төҙөгәйнек тәүҙә. Был "Айгүзәл" ансамбле 2006 йылда халыҡ ансамбле исеменә лайыҡ булды. "Ашҡаҙар таңдары" республика конкурсында лауреат булдылар.

**Тәскирә Надир ҡыҙы:** Мин балалар ансамблен етәкләйем, "Ынйыҡай" тип атала ул. Үҙебеҙ йәшәгән ауыл, райондағы халыҡ фольклорын йыйып, йыр-таҡмаҡтарҙы сәхнәгә сығарабыҙ. 2014 йылда ансамбль өс тапҡыр республика кимәлендә лауреат булды: "Башҡортостан ынйылары"нда - икенсе, "Народные забавы" бәйгеһендә - беренсе, "Ашҡаҙар таңдары"нда икенсе урын яуланыҡ. Бер-беребеҙгә ярҙам итеп эшләйбеҙ, мин сценарийҙар яҙһам, Ишморат балаларҙың сәхнә теле, сәхнәлә үҙен тотошо йәһәтенән шөғөлләнә. Уҡыусылар менән халыҡ ижадын өйрәнеүҙең файҙалы яҡтары күп ул, тыуған төбәккә генә түгел, тыуған илгә һөйөү ошонан башлана бит. Конкурстарҙа ҡатнашырға тырышабыҙ, сөнки был баланы үҫтерә. "Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә", ти халыҡ та. Ауылда ғына ятмайыҡ әле, тип, олимпиада булһынмы, тикшеренеү эштәре буйынса конкурс булһынмы, балаларҙы йөрөтәбеҙ. Шуға беҙҙең ғаилә - ғаилә лә, эш тә.

**Ишморат Фәйзулла улы:** Ҡайһы берҙә арып китеп, етте, башҡа йөрөмәйем, тиһең дә, әҙерәк ваҡыт үткәс, тегендә был бәйге үтә, шуға ошо уҡыусыны әҙерләһәк нисек булыр, тип һүҙ башлап, бер-беребеҙгә ҡарап көлөп ебәрәбеҙ. Хатта ҡайһы берҙә берәй саранан ҡайтышлай уҡ планлаштырып ҡайтаһың әле. Уҡытыусы ижади ҡарашлы булмаһа, уҡыусыларға ҡыҙыҡ түгел. Уҡытыусы үҙе берәй идея менән янмаһа, уҡыусыла ут тоҡандыра алмаясаҡ. Берәй ҡайҙа сығыш яһарға барһаҡ, "Ынйыҡай" ансамблен райондың йыйылма командаһы тип уйлайҙар. "Юҡ, беҙ бөтәһе 38 бала уҡыған мәктәптән килдек", тиһәң, бөтәһе лә аптырай. Артистар һымаҡ сығыш яһайҙар, барыһының да күҙҙәре осҡонланып тора. Патриотик тәрбиә тураһында күп һөйләргә була, әммә тыуған ерегеҙҙе яратығыҙ, ата-әсәйегеҙҙе ихтирам итегеҙ, тип кенә ватансылыҡ тойғоһо уятып булмай. Шуға ла был юлды һайлап, яңылышмағанбыҙҙыр, тип уйлайым. Уҡытыусылар, балалар ансамблдәренең сығышын күреп йөрөйҙәр, әле бына яңыраҡ ауылдың ағинәйҙәре килде, беҙҙе лә өйрәтегеҙ, тип. Уларҙы йыйып, шәжәрә байрамы үткәргәйнек, хәҙер үҙҙәре лә дәртләнеп китте.

**Тәскирә Надир ҡыҙы:** Ауылыбыҙҙың халҡы яҡшы, донъялары төҙөк, матур итеп йәшәргә тырышалар. Йорттарына һыу үткәреп, ҡаласа шарттар эшләп бөттөләр хәҙер. Күпләп мал аҫрайҙар, техника алалар, фермер хужалыҡтары ла бар. Мәҙәни тормош та гөрләп торһа, тағы ла күңеллерәк була бит. Беҙ быны бер ауырлығын да күрмәйбеҙ, кирәһенсә, башҡаса төрлө йәшәй ҙә белмәйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Мәктәп уҡытыусыһы эйә булған власть тураһында ҙур түрәләр хыяллана ғына", тигән бер аҡыллы кеше. Был дөрөҫ, әммә ул власть уҡытыусы дипломына ҡушып бирелмәй, абруй изге ниәттәр, изге эштәр менән яулана. Ишморат Фәйзулла улы һәм Тәскирә Надир ҡыҙы менән һөйләшеүебеҙ быны раҫланы ла инде. Ауыл халҡын матур, айыҡ тормошҡа, төрлө мәҙәни сараларға әйҙәп йәшәгән Маликовтар үҙҙәре артынан башҡаларҙы эйәртә ала, иң мөһиме, үҙҙәре матур өлгө күрһәтә икән, тимәк, улар ҙа бына шул түрәләр хыялланған "власҡа" эйә, тигән һүҙ...**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Унының шул арала ҡайҙандыр бысаҡ сығарҙы ла Асҡарға ташланды. Һунарға күп йөрөгән Асҡар хәнйәр менән үҙе лә оҫта эш итә. Ләкин үҙенә йүнәлтелгән осло ҡоралға ҡаршы торғаны юҡ.***




Бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә туҡһан туғыҙынсы йылдың декабрь аҙағы. Бөтә ғәм бер мәсьәләне сисә алмай бәхәс ҡора: утыҙ беренсе декабрь төнөндә егерме беренсе быуатты ҡаршылайбыҙмы, әллә егерменсе быуаттың һуңғы йылына аяҡ баҫабыҙмы? Һәр яңы йылды ҙур өмөттәр менән ҡаршы алырға күнеккән халыҡ яңы ғасырҙан оло яңырыу көтә. Әлбиттә, бәхетле киләсәген түҙемһеҙләнеп ашыҡтыра.

Көндәренең иҫәбен юғалтҡан Асҡар ҡарт башының һыҙлап ауыртыуына сыҙай алмай, кире күҙҙәрен йомдо.

- Әбе-е-й, - тауышы тамағының төбөндә үк йотолдо, бөтөнләй сыҡманы.

Теле аңҡауына йәбешкән, кипкән ауыҙы уттай яна. Бөтә тәне һыҙлай, эсе бороп ауырта. Тамуҡ яҙаларына тиң ғазаптарға сыҙар әмәле ҡалмағас, көсхәлгә урынынан торҙо. Әбейе икенсе бүлмәләлер, ахыры, эргәһендә күренмәй. Тәнтерәкләп аш-һыу бүлмәһенә сыҡты ла, кранды асып, ауыҙын һалҡын һыу ағымы аҫтына ҡуйҙы. Ҡомһоҙланып эсте. Ултырып бер килке хәл алғас, тағы һыуға ынтылды. Бер мәлгә генә тән ғазаптары баҫылғандай тойолдо. Тик ул күпкә барманы. Кәбиров Асҡар Талип улына сиренең дауаһы - йөҙ грамм кәрәк ине кеше рәтенә ҡайтыр өсөн.

- Әбе-е-й, - тауышы был юлы көрөрәк яңғыраны. Тик ауазы яуапһыҙ ҡалды. - Яталыр инде йоҡо һимертеп, йыбытҡы бисә. Икмәк шүрлегенә менеп төшһәм, бик тиҙ йоҡондан айнырһың.

Асҡар ҡарт, мөсһөҙ көүҙәһен саҡ һөйрәп, йоҡо бүлмәһенә туйтаңланы. Әбейе Мөслимә Ғатаулла ҡыҙы ҡаҡашып бөткән, төҫө ҡасҡан юрғанға уранып, түшәгендә ята ине.

- Тор! Тор, тием, - ҡартының бөтә асыуын һалып төртөүенә лә ҡымшанманы әбей. - Атаҡ, ни ҡыланыуың был, би-сәкәй?

Нимәлер һиҙенгән ҡарт, сәйерһенеп, юрғанды асты. Уға быяланланған төҫһөҙ күҙҙәр текәлде. Ҡарт ипле хәрәкәттәр менән, ыҡсым ғына итеп, юрғанды кире урынына ҡайтарып япты.

Әбейенең үле көүҙәһе эргәһендә ҡымшанмайынса оҙаҡ ултырҙы Асҡар ҡарт. Уйланырлыҡ та, кисерештәргә бирелерлек тә хәлдә түгел ине ул. Бер нөктәгә текләп тик ултырҙы. Уҡыныр ине - доға белмәй, ҡайғырыр ине - араҡы бөтә булған хис-тойғоларын йыуып, күңелен таш бәғергә ҡалдырған. Тәне хәрәкәттә булһа ла, йәне юҡ уның. Хәмер хаҡына шайтанға һатҡан.

Алтмыш ете йәшен ҡыуалай Асҡар ҡарт. Һуғыш осоро балаһы. Ғазраил менән көн дә айҡашып, уны еңгән быуын кешеһе. Күптәр, бик күптәр бала көйө ҡалды, йотлоҡто күтәрә алманылар. Ә ул үҙе лә бирешмәне, аслыҡтан ике туғанын, әсәһен, эргәһендә йәнһеҙ ятҡан һөйөклө Мөслимәһен дә йолоп алды. Үҙенең һәм яҡындарының йәне өсөн айбарланып көрәште малай. Һәм еңде ул саҡта!

Бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә ҡырҡ икенсе йылдың ҡышы ғаиләләре өсөн уғата ауыр булды. Күк үләнгә тамам хәлһеҙләнеп аяҡ баҫтылар. Туғыҙ йәшен тултырған Асҡар, яҙғы ташҡын һыуы тартыла башлағас та, өй башында ятҡан атаһынан ҡалған мурҙаны алып, Дим йылғаһы буйына төштө. Айырылып, элекке үҙәненән аҡҡан ҙур булмаған йылға ҡулсаһын ағас, таш, ҡәҫ менән кәртәләне лә, уртаһынан ауыҙ ҡалдырып, шунда мурҙаһын һалды. Ярты көн булышты, манма һыу булды, өшөп күгәренде. Мурҙаһын һалғас, сабырһыҙланып, уны әллә нисә тапҡыр алып ҡарарға уҡталды: "Туҡта, балыҡ инмәгәндер әле", - тип үҙен саҡ тыйып ултырҙы. Арыуыҡ ваҡыт үткәс, ниһәйәт, тәүәккәлләне. Биш-алты сабаҡ бар ине. Был минутта Асҡарҙан да бәхетле кеше булмағандыр донъяла. Бер балыҡты әллә сәйнәне, әллә тереләй йотоп ебәрҙе - нисәмә көн төйөр төшмәгән ҡорһағы сәнскеләп ауыртып ҡуйҙы. Шулай ҙа ризыҡланған малай тәне буйлап йүгергән ғәжәйеп йылылыҡтан бер килке ләззәтләнеп ултырҙы.

Икенсе, өсөнсө сығарғанда табыш мулыраҡ булды. Ҡараңғы төшкәс кенә ҡанатланып ҡайтып инде.

- Ҡурҡып бөттөм, ҡайҙа йөрөйһөң, улым? - әсәһе хафаланып ҡаршы алды.

- Балыҡ тоттом! - Асҡар әсәһенең алдына ҙур шештәргә теҙелгән өс бәйләм балыҡ һалды.

- Бөркөтөм минең, - элек, "ҡолонсағым", тип яратҡан әсәһе улына "бөркөтөм" тине, күҙҙәре йәшләнеп.

Табыш һиҙгән януарҙай, ҡустыһы менән ҡарындашы балыҡҡа яҡынланы, берәрен эләктереп, сей килеш ауыҙҙарына алды.

- Сабыр итегеҙ, балаҡайҙар, хәҙер утта ҡыҙҙырып бирәм, - тип әсәләре уларҙың ҡулындағы балыҡҡа ынтылғайны, илаш-тартыш ҡупты. Асҡар аслыҡтан йонсоған туғандарының тамаҡ даулашҡанын ҡарап торор хәлдә түгел ине. Йәне әсеүенә түҙә алмай, күҙҙәрен һөртә-һөртә, тышҡа сыҡты. Шул мәлдә үҙенә бәләкәстәрҙе башҡа асыҡтырмаҫҡа һүҙ бирҙе.

Балыҡҡа көн һайын йөрөнө. Ризыҡҡа йоғонған өйҙәге ике баланың йөҙҙәрендә йылмайыу саткылары күренә башланы. Хәҙер урындарында тик кенә ятмай улар, уйын да ҡоралар, шаярып маташалар.

Бер көнө Асҡар балыҡтан баш-күҙе күгәреп ҡайтты. Ҡыйналған булһа ла табышһыҙ түгел ине. Уға үҙе ҡорған мурҙа һалыу урыны өсөн һуғышырға тура килде. Мурҙаһын һалған урынға етәрәк, яр башында кемдеңдер ҡуҡайып ултырғанын күрҙе. Уның мурҙаһын ҡарайҙар - йөрәге дарҫлап тибә башланы. Яҡынлай биргәс, арғы ос Әсҡәтте таныны. Йәшкә лә, кәүҙәгә лә ҙурыраҡ ул.

- Минең балығымды урлайһың, - тине Асҡар ҡаушауын белгертмәҫкә тырышып.

- Йылғаның балығы һинеке генә түгел, убшый ул, - тип ергә сарт төкөрҙө тегенеһе.

Мурҙа ҡапҡаһын мин ҡорҙом, мурҙа ла минеке.

- Булһа ни, - Әсҡәт яр башында ултыра бирҙе. Эргәһендә шешкә теҙелгән балыҡ бәйләме ята ине.

Асҡар һүҙ көрәштереүҙең файҙаһыҙ булыуын аңлап, мурҙаны ҡарарға төшөп китте. "Минеке. Ороноп ҡына ҡараһын!" - тине эстән. Беләктәрен төрөп, һыуға эйелгәйне генә, арттан килтереп тибеүгә сүмәксеп барып һыуға тәгәрәне. Йөҙ түбән төшһә, икенсе ынтылыуҙа дошманы уны һыуҙа тонсоҡторасаҡ. Йәшен тиҙлеге менән башынан үткән ошо уй Асҡарҙы осоп барған килеш бөтә таһыллығын һалып, һауала әйләнергә мәжбүр итте. Ул һыуға арҡаһы менән барып төштө һәм, өҫтөнә ырғыған Әсҡәттән янтайып, уға үҙе атланып ултырҙы ла йән асыуы менән дошманының башын һыуға тыҡты. Асҡар, бар тереклек кеүек үк, был ерҙәге үҙенә тейеш тәғәм өлөшө өсөн көрәште. Инде хәле бөткән Әсҡәттең башын һыуҙан күтәрҙе лә:

- Мурҙа кемдеке? Балыҡ кемдеке? - тип ҡырағай тауыш менән ажарланып ҡысҡырҙы. Бөтә тәне ҡалтырана ине.

- Һинеке, Асҡар! Һинеке! - Ярайһы һыу йотҡан, муйынына сытырман йәбешкән Асҡарҙан ҡотолоу әмәленең тик еңелеүен таныу ғына икәнен аңлаған Әсҡәт ялбарыулы яуапланы. Ҡоршауҙан ысҡынғас, артына әйләнеп тә ҡарамай, ауыл яғына йүгерҙе.

Ун алты йәшендә Асҡарға, яҡты донъяла үҙ урынын даулап, бынан да хәтәрерәк алышҡа сығырға тура килде. Дошмандары көслөрәк кенә түгел, күберәк тә, мәкерлерәк тә ине.

Мобилизация буйынса ФЗО-ла уҡый башлаған сағы. Яңы кейем биргәйнеләр. Һуғыштан һуң халыҡ әҙме-күпме икмәккә туйынып, өҫ-баш бөтәйтеүҙе хәстәрләй башлаған мәл. Асҡар курсант формаһына ныҡ ҡыуанды. "Өҫтөмдәгеһе ҡустыма булыр, әсәй мул урындарын тегеп, йәтешләп бирер уға", - тип уйланы. Шулай кейемдәрен барлап торғанда янына өс егет килеп баҫты - ФЗО-ла "шишка" тотҡан ҡала шпаналары.

- Кримплен! Дан форма. Миңә булыр. Бына һиңә - алмашҡа, - тип "шестерка" урынында йөрөгәне, осоҡланып, эргәһенә килде лә, Асҡарға ойпаланған салбар менән форманың өҫтөн ташланы. - Ботинкаларың - Паханға! Яловыйҙар. Суҫҡа тиреһенән! - тип эйелеп ботинкаһын эләктереп тә алды. Пахан тигәне финка бысаҡ менән уйнап, арыраҡ баҫып тора. Эргәһендә дәү көүҙәле амбал - һаҡсыһы. Һынын килтереп йөрөйҙәр инде ҡарап тороуға.

Асҡарҙың яңы әйберҙәрен ошолайтып кемгәлер тоттороп ебәрергә иҫәбе юҡ ине. Уның мөлкәтенә ынтылалар, уны ғына түгел, туғандарын да талайҙар! Ахыры нисек барып бөтөрөн уйлап торманы, эйелгән томшоҡҡа йән асыуы менән типте. Сәүек сыйнаған тауыш сығарып, "шестерка" хужаһының аяғы аҫтына тәгәрәне. Хәлдең былай барып сығыуына бер мәлгә генә баҙап ҡалған Пахан, боролоп, һаҡсыһына ымланы. Унының шул арала ҡайҙандыр бысаҡ сығарҙы ла Асҡарға ташланды. Һунарға күп йөрөгән Асҡар хәнйәр менән үҙе лә оҫта эш итә. Ләкин үҙенә йүнәлтелгән осло ҡоралға ҡаршы торғаны юҡ. Был юлы ла таһыллығы, тиҙ ҡарар ҡабул итә белеүе, тәүәккәллеге ҡотҡарҙы. "Шестерка" ташлаған салбарҙы эләктереп алды ла амбалдың алға һонолған ҡулын уның балаҡтары менән уратып ҡарманы, үҙе эйелеп ҡултыҡ аҫтынан дошманының артына сыҡты һәм ҡайырылған ҡулды йәнасыҡҡа өҫкә күтәрҙе. Амбалдың ҡулын быуынынан ҡайырып сығарҙы. Айыу үкерҙеме ни, казарманы яралы йыртҡыс тауышы яңғыратты.

Асҡар Пахандың уға ырғыуын арҡаһы менән тойҙо. Тик ниҙер ҡылырға әмәле ҡалмағайны. Башын ғына бороп өлгөрҙө һәм аяғы аҫтына ауған дошманын күрҙе. Ошоно ғына көткәндәй, иҙәндә аунап ятҡан өс шпанаға төрлө яҡтан курсанттар ташланды, имен ерҙәрен ҡалдырмай, асырғанып типкеләнеләр, иҙеп ташланылар. Асҡарға ташланған Паханды ла улар йыға һуҡҡайны. Йәберләүселәренән үс алдылар шулай әмәле сыҡҡанда.

Шпаналар ФЗО-ла башҡа күренмәнеләр. Асҡарҙың баҙары күккә сөйөлөп күтәрелде.

Табышы өсөн Асҡар ике ботло "бүреләр" менән генә түгел, урманда йөрөгән дүрт аяҡлылары менән дә айҡашты бер мәл. Илек аулау уның ҡышҡы төп кәсебе булды. Һуғыш осоронда был кейеккә һунарҙың ябай, әммә ләкин сыҙамлылыҡ, таһыллыҡ талап иткән ысулы малайҙар араһында киң таралғайны. Ҡыр кәзәһенең эҙенә төшөп, уны көрттә бер туҡтатмай, хәлдән тайып йығылғансы ҡыуалайҙар һәм салып алалар ине.

Көндәрҙең береһендә иртәнән ҡара кискә тиклем баҫтырып тотҡан табышын, махсус эшләп алған санаға һалып, ауыл яғына өҫтөрәгән мәлдә Асҡар алыҫта бүреләр олоуын ишетте. Йыртҡыстарҙың үҙенең эҙенә төшөүен аңланы. Табышын да биргеһе, үҙенең дә бүреләр тешенә эләккеһе килмәй ине. Шуға бик йылдам ҡыланды. Илекте тотошлай ағас башына мендерергә хәленән килмәгәс, уның алғы һәм артҡы боттарын - һум итле өлөштәрен - һанлап айырып алды. Йәш ике ҡайынды берәмләп эйелдерҙе, уларға итте бауланы ла, иплән кенә кире ебәрҙе. Үҙе ҙур ағасҡа үрмәләп менеп китте.

Бүреләр оҙаҡ көттөрмәне. Эҙенән юллап, Асҡар ултырған ағас төбөнә килеп тә баҫтылар. Күҙ асып йомғанса, илектең ерҙә ятып ҡалған ҡабырға-муйынын өҙгөләп ашап бөттөләр. Һөйәктәре лә ҡалманы. Шунан ағасты уратып ултырҙылар ҙа, ара-тирә олоп, ҡорбандың хәлһеҙләнеп ҡолап төшөүен көтә башланылар.

Асҡар үҙәгенә үтеп өшөнө, аяҡ-ҡулы иҫ юғалтты, ағасланып ҡатты. Ботаҡта тотоноп ултырырға ла хәле ҡалманы уның. Ниндәйҙер мәлгә иҫен юғалтҡандай булды, бына-бына бүреләр алдына ҡолап төшөр кеүек тойҙо үҙен.

Бәхетенә күрә, малайҙың ултырған ағасы сана юлынан алыҫ булмай сыҡты. Тимер юл станцияһына ашлыҡ ташыусы ылаусылар, алыҫ түгел бүреләр олоуын ишетеп, йыртҡыстар ауыл малын көҫәп килгәндер тип, тауышҡа боролалар һәм мылтыҡтарҙан атып, өйөрҙө ҡыуалап ебәрәләр. Ағас башынан Асҡарҙы көскә төшөрөп алалар.

Балыҡ тотоуҙы Асҡар йыл әйләнәһенә ташламаны. Ҡышҡыһын мурҙаны мәке уйып һалды. Ер һурыҡҡас - йыуаға, йәй башында - балтырған-ҡуҙғалаҡҡа йөрөнө, унан ары һарына ҡаҙҙы, башҡа ҡыр ниғмәттәрен өйгә ташыны, йомран, бүтән ваҡ ҡыр кейектәрен ауланы. Ашъяулыҡтарында ризыҡ артыҡ мул булмаһа ла, астан интекмәнеләр. Һыйырҙары ла аҡтан өҙмәне.

**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БӘЙГЕ ТОТТОЛАР...

## тапҡырлыҡта

**Ошо көндәрҙә Өфөнөң Ҡала мәҙәниәт һарайында Башҡорт асыҡ КВН лигаһының III миҙгел финал уйындары үтте. Уны тамаша ҡылыусылар көр күңел, йырыҡ ауыҙ менән таралышты.**

"Миҙгелдең өсөнсө яҙы" темаһына арналған финал уйындары үҙ эсенә дүрт конкурсты берләштерҙе. Ярыштың беренсе өлөшөндә квнсылар "Муйын миҙалға әҙер" темаһына шаяртты. Башҡорт асыҡ КВН лигаһы уйындары үткәрелә башлағандан бирле беренселеккә бер аҙым етмәй тороп ҡала килгән "Еңмештәр" КВН-командаһы (Сибай ҡалаһы) "Финал - һин ал, тип ишетелә башланы", тип шаяртып, муйындары миҙалдар күтәреүен баштан уҡ белдереп ҡуйҙы. "Райком"дар (Учалы районы) иһә, уйын башында уҡ бик етди һәм актуаль мәсьәләләрҙе көлкөгә һалып "ҡаптырҙы". Был "пионерҙарҙың" өләсәләре русса аңламағанлыҡтан, БСТ каналын ҡарамай булып сыҡты. Башҡортса КВН үткәрелә башлағандан алып төрлө командаларҙа уйнап, күптән тамашасыларҙың яратҡан квнсыһына әүерелгән Фидан Ҡолмөхәмәтов - "Кәкре Сүкеш", бөтәһенә лә бәхетле булыуҙың төп серен асты. Баҡтиһәң, бәхетле булыу өсөн майҙа бешкән картуф һәм һыуыҡ һөт кенә кәрәк икән. Шулай ҙа тамашасылар был минуттарҙа бары тик ҡаймаҡ булып ағылыр йор көләмәс кенә талап итә ине. Ҡыҫҡа, тос, ҡыйыш атып тура сәпкә тейгән шаяртыуҙар конкурстың "Разминка" өлөшөндә яңғыраны. "Фотофиниш" - фотоһүрәттәргә ҡарап ҡыҙыҡлы комментарий биргәндә һәр команда үҙенең нимәгә һәләтле булыуын күрһәтеп ҡалырға тырышты.



*Рәшиҙә Туйсина менән "Еңмештәр" КВН-командаһы.*
*Мансур Ҡаҙаҡаев фотоһы.*

Һәр эштә, һәр өлкәлә кешеләрҙе үҙенең артынан эйәрткән, ниндәйҙер бейеклектәргә әйҙәгән лидер булырға тейеш. Башҡорт асыҡ КВН лигаһы уйындарында ҡатнашҡан йәш талант-тар бөтәһе лә лидер, тип әйтерлек булһа ла, капитандар алдынғылыҡта көс һынашҡанда КВН-командаларының уңыш нигеҙе тап ошондай "етәкселәр"ҙән тороуы асыҡ сағылды. "Минең рекордтарым" темаһына һәр капитан үҙе аңлағанса интерпретация бирҙе, әйтергә кәрәк, баймаҡтарҙы береһе лә уҙҙыра алманы. Сибай ҡалаһының "Еңмештәр" КВН-командаһы капитаны Шамил Солтанов тамашасыны көлдөрөү нигеҙендә тәү сиратта көләмәстән бигерәк аудиторияны ауыҙына ҡаратып ала белеү, башҡортса көлдөрәһең икән - был телдә оҫта һөйләшеү, телмәр байлығы, актерлыҡ оҫталығы талап ителеүен тағы бер тапҡыр иҫбат итте. Бөтә зал тороп ҡул сабып оҙатты уны. Ярыштың иң ҡыҙыҡлы һәм көтөп алған конкурсы "Йондоҙ менән өйгә эш"тә был юлы йәштәр менән Альмир Мөхәмәтйәнов, Илсур Тайсин, Хәбир Сөләймәнов, Лилиә Ишемйәрова, Рәшиҙә Туйсина сығыш яһаны.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Башҡорт асыҡ КВН лигаһы III миҙгел финал уйындары бер тында, шаярып, көләп үтеп тә китте. Ярыш һуңында жюри ағзаһы, йырсы Рөстәм Ғиззәтуллиндың әйткән һүҙҙәре иҫтә ҡалды: "Бөгөн был залда минең йәштәштәрем, сәхнә йондоҙҙары, билдәле шәхестәр булмауы ҡыҙғаныс", - тине ул.**
**Ә еңеүселәр ошолар:**
**I урын - "Еңмештәр" КВН-командаһы (Сибай ҡалаһы);**
**II урын - "Кәкре Сүкеш" КВН-командаһы (Өфө ҡалаһы);**
**III урын - "Централ" КВН-командаһы (Өфө ҡалаһы) яуланы.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...

# ЯҠШЫ КЕШЕНӘН...

## яҡты эҙ ҡала

**Һәр бер һүрәт - үҙе бер китап кеүек. Уны үҙеңсә күрәһең, үҙеңсә уҡыйһың, үҙеңсә аңлайһың. Һүрәт сер ҙә, йомаҡ та. Фәнил Шәймөхәмәтовтың "Ғүмер ағасы" картинаһын мин дә үҙемсә һүтеп, унда йәшерелгән йомаҡты үҙемсә сисеп ҡарарға батырсылыҡ итәм. Тормошобоҙҙағы һәр хәл-ваҡиғаның үҙ тәрбиәүи мәғәнәһе бар. Һүрәттәре менән зиһенебеҙҙе асҡан рәссамдарҙы ныҡ хөрмәтләйем. Уларҙың эштәре аша беҙҙе тәрбиәләгән бөйөк Раббыбыҙға оло маҡтауҙар булһын!**



Донъя - ҡуласа, тиҙәр. Донъя ошо ҡуласаларҙан тора. Йәшәгән Еребеҙ ҙә түңәрәк ҡуласа, Ҡояшыбыҙ ҙа, Айыбыҙ ҙа. Һүрәттәге ҡояш эсендә күрһәтелгән, бер-береһен алыштырып килгән ҡышы, яҙы, йәйе, көҙө иһә Ваҡыт ҡуласаһы. Һәр береһе туҡтауһыҙ әйләнештә булһа ла, улар үҙенә генә тәғәйен рәүештә хәрәкәт итә. Кешенең ерҙә йәшәүен дә Ғүмер ҡуласаһы тип атарға була. Тик йыһан есемдәренең ғүмер әйләнеше менән сағыштырһаң, кеше ғүмеренең әйләнеше керпек ҡаҡҡан кеүек кенә. Күрмәй ҙә ҡалаһың, һүрәттәге ҡояшта сәғәт уҡтарын хәтерләтеп кенә торған ғүмер ағасың ҡыуарып та өлгөргән. Бала сағың - яҙың, йәшлегең - йәйең, олпатланыу осороң - көҙөң - барыһы ла үтеп китеп, ҡартлығыңа - ҡышыңа килеп тә кергәнһең. Донъя шулай ҡоролған, бер кем дә мәңге йәшәр өсөн килмәгән ергә.

Үлем түшәгендә ятҡан Нух бәйғәмбәрҙән (ғ.ғ.с), был фани донъя тураһында нимә әйтә алаһың, тип һорағандар. "Донъя, - тигән ул, ике яғында ла ишек уйылған бер өй кеүек. Ишектәрҙең береһенән килеп тә индем, икенсеһенән сығып та киттем". Һүрәттең өҫкө ике мөйөшөндә күрһәтелгән уйымдар ошо ике ишекте хәтерләтә кеүек. Бер баҡһаң, уларҙы тәҙрәләргә лә оҡшатып, күҙәтеү урыны тип тә аңларға мөмкин. "Дөрөҫөн әйткәндә, ерҙә лә, күктә лә Аллаһтан бер нәмә лә йәшеренеп ҡала алмай", - тиелә Ҡөрьәндә. Уң яҡтағыһы яҡшы ғәмәлдәрҙе күҙәтеп яҙып барһа, һул яҡтағыһы насар ғәмәлдәрҙе теркәп барыуҙы аңлаталыр, бәлки? Ә ни өсөн улар үтә күренмәле түгел? Сөнки тәҙрәләр артында нимә барлығы беҙгә мәғлүм түгел, унда ҡараңғы, ул йәшерелгән. Тағы ла ул уйымдарҙың ике күҙҙе хәтерләтеп тороуы Ислам дине белгестәренең: "Тормошта булып торған бөтә хәл-әхүәлдәрҙе Аллаһ күҙәтеп кенә тора", - тиеүен аңлата һымаҡ.

Дин өйрәтә: фани донъяла кеше ҡунаҡ ҡына. Бына кеше тыуып, был донъяға - ҡунаҡханаға килеп керҙе, ти. Шундай гүзәл тәбиғәтле, йәнлектәргә тулы йәшел урмандары, уңдырышлы ерҙәре, сәскәләргә күмелгән ҡырҙары, сылтырап аҡҡан шишмәләре, тулы саф һыулы, балыҡтарға бай йылғалары, күлдәре һәм башҡа мөғжизәләргә бай булған еребеҙгә килеп урынлашты, ти. Тормош ҡорҙо, балалар үҫтерҙе, ҡартайҙы, ти. Ҡунаҡхананы ҡалдырып китергә ваҡыт етте, ти. Ә хәҙер ошондай һорау тыуа: һинән ошо ергә ни ҡалды? Урмандар ҡырҡылды, балыҡтар тонсоғоп, йылғалары, күлдәре ҡороп бөтә яҙҙы, йәнлектәр ҡырылды, уңдырышлы ерҙәр сүп-сар менән тулды, саф һауалар ағыуланды. Гүзәл ҡунаҡхана бысранды. "Бөтөн ғаләм, ғаләмдәге бөтә нәмә - һаҡлап тотоу өсөн Аллаһтан бирелгән аманат", - тигән ғалимдар. Ҡунаҡ булғас, тыйнаҡ булайыҡ. Тәүбәбеҙгә килеп, беҙҙе уратып алған бар нәмәгә бик һаҡсыл ҡараштa булып, хәлебеҙҙән килгәнсә тормошобоҙҙо Аллаһ ризалығына лайыҡ булырлыҡ итеп ҡорайыҡ.

Яҡшы кешенән яҡшы эҙ ҡала. Әҙәбе һоҡланырлыҡ, ғәмәлдәре игелекле, тормошона, тыуған иленә, еренә, кешеләргә, бар донъяға һәм ошо донъяға яралтып бар иткән Аллаһҡа күңелендә һөйөү йөрөткән һәм уны һаҡлап, яҡлап, нәҫеленә аңлатып тапшыра белгән кеше халыҡ хәтерендә йәшәүен дауам итер. Сөнки уның ғүмер ағасының - һөйөү ағасының - орлоҡтары иманлы, яҡшы күңелдәргә һалынып, яңы үҫентеләр булып шытып, күбәйеп, ҡояштай ҙурайып, бар донъяға таралаcаҡ һәм ул кешенең исемен мәңгеләштерәсәк.

Бер хикәйәт иҫкә төшә. Сәстәренә сал ингән ғалим, хикмәт эйәһе, намаҙлыҡта ултырған хәлдә ҡулдарын күтәреп, доға менән Аллаһы Тәғәләнән һорай: "Раббым, Аллаһ! Мин инде бик ҡартмын, үлем сәғәте лә алыҫ түгелдер. Һин миңә бүләк итеп биргән ғилемде кемгә ҡалдырайым? Йыйған китаптарым тулы хазина, ҡәҙерен белерлек кем бар?" Шул уҡ төндә ул бик мәғәнәле төш күрә. Уға унда өс малайҙы табырға ҡушыла, улар белем хазинаһы алырлыҡ, тип белдерелә. "Балаҡайҙарым! - ти хикмәт эйәһе, уларҙы яҡшылап һынағандан һуң. - Шатланып һәм бик теләп китаптарымды һеҙгә тапшырам. Алығыҙ, уҡығыҙ, бер көн килеп һеҙ ҙә хөрмәткә лайыҡ, илгә файҙалы ғалим булып китерһегеҙ". Бәлки, кеше бар белемен быуындан-быуынға тапшырып ҡалдырырға тейешлеге тураһындалыр был һүрәт? Ғүмер ағасы - ул белем ағасылыр? Мәңге ҡаҡшамай торған, яңынан-яңы үҫентеләр биреп ҙурая, тулылана ғына барған үҙе бер хазина - белем хазинаһы ағасылыр?

**Гөлйемеш БИКЙӘНОВА.**

✓ *"Илебеҙҙә зыяраттары ғына ҡалған бындай өнһөҙ ауылдар бик күп. Бер туҡтауһыҙ мәктәптәр, мәҙәниәт усаҡтары, дауаханалар ябылһа, тағы ла артыр инде бындай үлек ауылдар" , - тигән ауыр уйҙар менән юлыбыҙҙы дауам иттек.*



ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР КӘЙЕФ ЙОҒОШЛО

■ Вандербильт университеты мәғлүмәттәре буйынса, активлаштырылған күмер бөйөрҙәре сирле ауырыуҙарҙы йөрәк-ҡан тамырҙары проблемаларынан ҡотҡара. Бөйөр сирҙәре атеросклерозға һәм йөрәк ауырыуҙарына килтереүе күптән билдәле булһа ла, әлегә тиклем уны дауалауҙың аныҡ ҡына ысулы юҡ ине. Активлаштырылған күмер, гәҙәттә, организмды ағыулы матдәләрҙән таҙартыу өсөн ҡулланыла. Нефрологтар фекеренсә, ул бөйөрҙәре сирлеләрҙең һаулығына ыңғай тәьҫир итәсәк. Ғалимдар һынауҙар барышында сирлеләрҙең артериаль баҫымы, холестерин күрһәткесе яҡшырған һәм ҡан тамырҙары шеше ҡайтыуы күҙәтелгән.

■ Органик сүп-сарҙы өйҙә оҙаҡ һаҡлау сәләмәтлек өсөн зарарлы, тип иҫкәртә Берлиндың Инфекциялы сирҙәр һәм пневмология клиникаһы табиптары. Сүп-сар тарҡалған саҡта барлыҡҡа килгән бәшмәктәр тәьҫире һөҙөмтәһендә тире һәм тын юлы сирҙәре барлыҡҡа килеүе ихтимал. Хатта сүп биҙрәһенең ҡапҡасын асҡан мәлдә лә бәшмәк спораһы осоп, үпкәгә зыян килтереүе мөмкин. Бәшмәктәр аллергия, астма һәм лихорадка сирҙәренең сәбәпсеһе була ала. Шуға ла аш-һыу бүлмәһендәге сүп-сар һауытын көн һайын түгеп, йыуып тороу яҡшыраҡ.

■ Хна - тәбиғи продукт тип уйлағандар бер аҙ яңылыша. Эйе, хна порошогы составындағы ҡайһы бер матдәләр баш тиреһен туҡландырып, сәстәрҙе нығыта, уларҙы үҫтерә. Шуның өсөн дә борон-борондан көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙары хнаны йыш ҡулланған. Әммә косметик буяу урынына хна ҡулланған кешеләрҙә миелобластлы лейкоз сире йышыраҡ күҙәтелә, тип иҫкәртә Leukaemia and Lymphoma журналы. Хна ярҙамында татуировкалар төшөрөү Ғәрәп Әмираттарында киң таралған. Статистика буйынса, бындағы ҡатын-ҡыҙҙар башҡа илдәр менән сағыштырғанда, миелобластлы лейкоз менән 62 тапҡыр йышыраҡ ауырый икән. Белгестәр әйтеүенсә, быны төп сәбәбе булып хнаны иҙеү өсөн ҡулланылған бензол һанала. Курорттарҙа ҡулланылған ҡара хна составындағы парафенилендиамин тигән органик матдәның да файҙаһына ҡарағанда, зыяны күберәк.

■ Австралия психологы Герхард Шорт белдереүенсә, эшкә кәйефһеҙ килгән хеҙмәткәр 20 минут эсендә ҡалғандарҙың да кәйефен төшөрә. Баҡтиһәң, бындай кешенән килгән биотулҡындар башҡаларға тәьҫир итергә һәләтле икән. Белгестәр әйтеүенсә, кемдең кәйефе йыш үҙгәреп тора, улар йөрәк-ҡан тамырҙары һәм ашҡаҙан сирҙәре менән дә йышыраҡ яфалана.

■ Көнсығыш һәм Урта диңгеҙ халыҡтары аш-һыу әҙерләгәндә яратып ҡулланған зәғфәрән (шафран) тәмләткесе оло кешеләрҙең күҙҙәрен һуҡырайыуҙан һаҡларға ярҙам итә. Австралия һәм Италия ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр ваҡытында оло йәштәге кешеләр өс йыл дауамында зәғферән ҡулланған һәм уларҙың күреү һәләте бермә-бер яҡшырған. Был тәмләткесте ҡулланыуҙан туҡтау менән күреү һәләте лә насарая башлаған. Ғалимдар билдәләүенсә, зәғферән оло йәштә һуҡырайыуҙан ҡотҡарып ҡына ҡалмай, ә тәбиғи ҡояштан һаҡлаусы күҙлек ролен дә үтәй һәм күҙҙәрҙе сағыу ҡояш нурынан зарарланыуҙан һаҡлай.

ХӘТЕРКИТАП

**Бөгөн күп ауылдарҙа һуғыш һәм тыл ветерандарын хөрмәтләп иҫкә алалар, уларға арналған обелисктар яңыртыла, яңылары асыла. Ә бына бөткән ауылдарҙан һуғышҡа киткән һалдаттар, тыл ветерандары, һуғыш йылдары балаларын кем иҫкә ала икән? Был ауылдарҙа ла ҡасандыр тормош гөрләп торған бит. Әммә әле ул урындарҙа моңһоу тынлыҡ. Сәскәләр һалырға яугирҙарҙың исеме яҙылған таҡтаташтар ҙа, һәйкәлдәр ҙә юҡ. Ә ундай бөткән ауылдар илебеҙҙә бихисап бит. Әсәйемдең тыуған ауылы Кәшәле лә шундай ауылдар иҫәбендә.**

ЕҢЕҮГӘ 70 ЙЫЛ



# БӨТКӘН АУЫЛДАРҘЫҢ ДА...

## иҫкә алыр ветерандары бар бит

Әҙәм балаһын тыуғандан алып баҡыйлыҡҡа күскәнгә тиклем кендек ҡаны тамған, тәпәй баҫҡан тыуған ере, ата-әсәһе, туғандары, бергә уйнаған иптәштәре, ундағы көнитмеше - барыһы ла татлы иҫтәлектәр булып, ғүмере буйына оҙатып баралар. Әсәйем дә Фатима инәйем килһә: "Эх, үлмәҫ элек шул Кәшәлене бер барып күрһәң ине", - тип, бала саҡтарын, олатайым менән өләсәйемде, яҡын туғандарын, бергә саңғы кейеп, тоҡ йөкмәп орлоҡ ташыған иптәштәрен, әтлек, һарына йыйған урмандарын, бесән сапҡан туғайҙарын, Нөгөштә һыу ингәндәрен йыш иҫенә төшөрөп ултыра. Уларҙың һөйләшкәндәрен тыңлаһаң, Кәшәле - донъяла иң матур, иң гүзәл ер. Күге зәп-зәңгәр. Үләндәре бәрхәт, һарынаһы, балтырғаны, ҡымыҙлығы иң һутлыһы, шишмәләренең һыуы иң татлыһы. Хатта ҡоштары ла унда матурыраҡ һайрай икән. Әсәйем менән инәйемдең үҙ-ара сөкөрҙәшеп һөйләшкәндәрен тыңлаған һайын, Кәшәле миңә мөғжизәле, серле әкиәт донъяһы һымаҡ тойола. Тормош иптәшем, ҡустым менән кәңәшләштек тә бер саҡ, әсәйем менән инәйемә тыуған ерҙәрен күрһәтеп килтерергә булдыҡ. Кәшәлегә алып барыуыбыҙ тураһында әйтеүебеҙ булды, улар юлға ихлас йыйына ла башланы. Ҡәҙерлегә генә кейгән күлдәктәрен, яулыҡтарын, туфлиҙәрен һалып алдылар. Хатта туфлиҙәрын ялтыратырға кремдарын, щеткаларын да онотманылар. Туғандарым:

- Унда Рәшит ағай менән Нажия апайҙан башҡа бер кем дә юҡ бит, кем алдында шул тиклем биҙәнеп-төҙәнеп йөрөргә йыйынаһығыҙ? - тип көләшләр.

- Тыуған ауылыбыҙға ҡайтабыҙ бит, - тинеләр, шат йылмайышып әсәйем менән инәйем. Уларҙы атка ултыртып, үҙебеҙ йәйәүләп, Кәшәле ауылына барырға сыҡтыҡ. Юл буйына иҫтәлектәр, хәтирәләр тыңлап, тәбиғәттең хозурлығына һоҡланып, атайымдың тыуған ауылы Ямашты үтеп, Түбәнге ауылға килеп еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ.

Ауыл, тигәс тә, хәҙерге көндә юҡ инде ул ауыл, күптән юҡҡа сыҡҡан, нигеҙ таштары ғына ҡалған. Тынлыҡ. Ауылдарҙың яҙмышы ла кеше яҙмышына оҡшаған шул, оҙон ғүмерле, ҡыҫҡа ғүмерлеләре була. Хатта ҡасандыр гөрләп, тормош ҡайнап торған ауылдар ҙа юҡҡа сыға икән. Түбәнге ауылдың буйынан-буйына андыҙ, алһыу төҫтәге ҡырағай мальва үҫкәйне. Ә Динислам бабайҙың өйөнөң нигеҙ буйында өс урында өйкөм-өйкөм булып ҡыҙыл төҫтәге ниндәйҙер ят сәскәләр үҫеп ултыра ине. Мин ундай сәскәләрҙе бер ҡасан да бер кемдең дә баҡсаһында ла, урманда ла күргәнем булманы. Шул ят сәскәләргә ҡарап шаҡ ҡатҡанмын. Әсәйем менән инәйем һәр өй урынында тукталып:

- Ошо урында Динислам бабайҙың өйө, эргәһендә улдарының өйө ине. Бының Фәйзулла бабайҙыҡы, - тип, нигеҙ таштарын һыйпап, хужаларын иҫкә төшөрөп йөрөнө. - Ошонда мәсет була торғайны, - тип, мәсет урынын күрһәтеп, Әйүп мулланың фажиғәле яҙмышын бәйән иттеләр.

Граждандар һуғышы осоронда аҡтары ла, ҡыҙылдары ла халыҡтың үҙәгенә ыу булып ултырған. Ике яҡ та халыҡты берҙәй талаған, берҙәй ҡырған. Ул ваҡытта тағы ла ҡуйы ҡара урмандарыбыҙ ҡаҫҡындар, угрылар, юлбаҫарҙар өсөн дә төйәк булған. Улары ла, аңғармаҫтан килеп сығып, халыҡтың аҡтыҡҡы ризыҡтарын талап, тартып алып киткәндәр. Был юлы ла аҡтары сығып китеүгә, арттарынан баҫмаҡлап ауылға ҡыҙылдары килеп кергән. Тауҙың башынан тороп Хәйрулла олатайҙы атып үлтерәләр. Фатима, Хәҙисә исемле ҡыҙҙары, улы Ғәйнулла етем ҡалалар. Һәр ауылда дин әһелдәрен юҡ итеп йөрөйҙәр ул яуыздар. Әйүп мулланы эҙләп, утлыҡсанан табып алалар. Ул, ни булһа ла ҡанлашып үләйем, тип уйлағандыр инде, бер һалдатты төртөп ебәрә. Шул арала тегеләр уны атып та йығалар. Әйүп мулла һәләк була, ул йән биргән арала һауаға "зыңғыр" итеп бер тауыш осоп китә. Һалдаттар:

- Ана, муллағыҙҙың йәне туп-тура ожмахҡа осто, - тип көлөп торғандар. Кем булғандыр ул Әйүп мулла. Һорашып, шәхесен асыҡларға бер кем дә юҡ шул. Ҡыҙылдар юҡ итергә тырышҡас, һәр хәлдә, затлы кеше булғандыр, тип уйларға ҡала.

Зыяратына ҡарағанда, был ауыл ҙур ғына булған. Аслыҡ та, ил эсендә барған мәғәнәһеҙ ҡан ҡойош та ҡырған ауыл халҡын. Ауылды үтеп, аҙ генә бара биргәс, ҡурайҙар үҫеп ултырған ергә барып сыҡтыҡ. Ҡустым бер ҡурайҙы ҡырҡып алып, һыҙғыртып ҡараны. "Эй, моңло ҡурайҙар! Ауылығыҙҙа йәшәгән ынһәйәр, күнелсәк, матур кешеләрегеҙҙе оҙәләп һағынаһығыҙҙыр, халҡығыҙҙың фажиғәле һәләкәте тураһында уйлап, моң түгәһегеҙҙер, зар илайһығыҙҙыр. Илебеҙҙә һаҡларға нисә яугирығыҙ китте, нисәүһе тыуған еренә әйләнеп ҡайта алды? Етемһегеҙ шул, моңло ҡурайҙар. Илебеҙҙә зыяраттары ғына ҡалған бындай өнһөҙ ауылдар бик күп бит. Бер туҡтауһыҙ мәктәптәр, мәҙәниәт усаҡтары, дауаханалар ябылһа, тағы ла артыр инде бындай үлек ауылдар" , - тигән ауыр уйҙар менән тағы ла икенсе бөткән ауылға юлыбыҙҙы дауам иттек.

Кәшәлегә етәрәк, урмандар ҡуйы, ағастар бейегерәк, һомғолораҡ та һымаҡ тойолдо. Ғәбдин олатайымдың тәбиғәт балалары булған ата-бабаларыбыҙҙан быуындан-быуынға күсеп, мираҫ булып ҡалған йәҙйәшәр солоҡ ҡарағайҙары, беҙҙе сәләмләгән кеүек, күкрәк киреп, ҡолас йәйеп ҡаршы алды. Был яҡтың моңло, селтер шишмәләре, хуш еҫле сәскәле туғайҙары, болондары, күп тарихи ваҡиғаларҙың шаһиты тау-ҡаялары мине әсир итте лә ҡуйҙы.

Ҡояш байыуға яҡынлашып килгәндә, Кәшәлегә барып еттек. Ата-бабаларыбыҙҙың зыяратын барып күрҙек, әсәйем менән инәйем әруахтарға бағышлап, аят уҡыны. Беҙ зыяраттан әйләнеп килеүгә, Рәшит ағай менән Нажия апай мул итеп табын әҙерләп ҡуйғайны. Кешеләрҙе ашатҡан да, эсергән дә, йылындырған да мейес булғанғамы икән, ҡайҙа барһам да, ҡиммәтле мебелдәр ҙә, йыһаздар ҙа күҙгә салынмай, иң беренсе, иҙән уртаһында ултырған мейес иғтибарымды үҙенә йәлеп итә. Был юлы ла өйгә килеп инеү менән үҙенсәлекле генә итеп сығарылған мейесҡә күҙем төштө.

- Был мейес - әсәйемдән ҡалған иҫтәлек инде, тик таштан ғына сығарылған, - тип аңлатты Рәшит ағай.

Бер-береһен һағынышҡан ауылдаштарҙың һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне, хәтирәләр артынан хәтирәләр теҙелде. Һуғыш йылдары, һарыналы, балтырғанлы, әтлекле, яланаяҡ, сабаталы бала саҡ... Кемдәр һуғышҡа киткән, кемдәре әйләнеп ҡайта алған, кемдәре сит яҡтарҙы һуңғы төйәге иткән - барыһы ла иҫкә алынды.

Кәшәленән бөтәһе ун биш кеше ил һаҡларға яуға киткән. Тәүҙә олораҡ йәштәгеләр: Күсәпов Зәки, Зөбәиров Сабир, Күсәпов Кәбир, Ишбаев Әбделвәли, Ишбаев Исмәғил, Ишбаев Ғайса, Күсәпов Әбдерафиҡ, Яманаев Ғәләүетдин, Чернышев Алаксандр, Буряканов Мәхийән, Мөфтәхитдинов Мәүлеткол һуғышҡа алына. Уларҙан һуң Нәҙершин Мөхәмәтғәли, Күсәпов Шаһивәли бабайҙарға ла сират етә. Бер аҙна үтеүгә, ике дуҫ, Нәҙершин Әбделхаҡ, Әбделғәниев Бейбулат бабайҙар яуға китә.

Күсәпов Кәбир бабай, ҡаты яра алғандан һуң, ауылына ҡайта, әсәһе Ғәйниямал өләсәй, кәзә һөтө эсереп, улын аяҡҡа баҫтыра. Һауыҡҡас, Кәбир бабай янынан һуғышҡа алына, шул китеүҙән кире тыуған яғына әйләнеп ҡайта алмай. Үҙе һуғышта саҡта бер бөртөк кенә ҡыҙ балаһы ла үлеп ҡала. Иренең ҡара ҡағыҙын алғас, ҡатыны тыуған ауылына ҡайтып китә. Ишбаев Исмәғил бабай Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт итә. Бала саҡта ололарҙың Исмәғил бабайҙың бер ҡаты алышта батырҙарса һәләк булыуы, аяғы атының өҙәңгеһенән ысҡынмайынса, әллә ни хәтлем һөйрәлеп барыуы тураһында һөйләшкәндәрен тыңлап, кескәй генә йөрәгем нык тетрәнгәйне. Зөбәиров Сабир Шәкир улы 1942 йылдың 6 июнендә һәләк була, кәбере Орлов өлкәһенең Новосильский районы Шажково ауылында. Күсәпов Зәки 1941 йылдың 7 июлендә һуғышҡа китә һәм 1942 йылдың 8 авгусында хәбәрһеҙ юғала. Ишбаев Ғайса 1942 йылдың 7 ғинуарында хәбәрһеҙ юғала. Күсәпов Шаһивәли 1942 йылдың 24 февралендә һуғышҡа китә, 1942 йылдың август айында һәләк була. Нәҙершин

✓ ***Ошо күренеш бер ваҡытта ла онотолмай гел күҙ алдымда тора. Кәшәле ауылының нигеҙен ғүмеренең һуңына тиклем һаҡлап йәшәүсе Рәшит ағай ҙа юҡ инде. Ауыл үҙе лә тарихы менән аҡ томандар артында тороп ҡалды...***

Мөхәмәтғәли бабай уны ерләп китеүе тураһында һөйләй. Бәләкәй генә Кәшәле ауылынан 15 кеше һуғышҡа алынып, шуларҙың бишеһе генә әйләнеп ҡайта: Күсәпов Әбдерафиҡ, Яманаев Ғәләүетдин, Бураканов Мәхийән, Мөфтәхитдинов Мәүлетҡол, Нәҙершин Мөхәмәтғәли.

Ил һаҡларға яуға китеп, тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта алмаған һалдаттарҙың береһе, әсәйемдең бер туған ағаһы Нәҙершин Әбделхаҡ бабайым, 1923 йылда Кәшәле ауылында Ғәбдин һәм Аҫылбикә Нәҙершиндарҙың ғаиләһендә донъяға килә. Бәләкәй генә көйө ул атаһы менән бергә Нөгөш буйлап һал ағыҙа, солоҡ яба, айыуға һунарға йөрөй. Кәшәләлә һуңлап ҡына, 1937 йылда ғына, мәктәп асыла. Төрлө йәштәге 30 баланы беренсе синыфҡа йыйып уҡыта башлайҙар. Әбделхаҡ бабай бик отҡор, етди, мәктәп тормошонда әүҙем ҡатнашҡан уҡыусыларҙың береһе була. 1940 йылда уның ойоштороу һәләтен күреп, колхоздың комсомол ойошмаһы секретары итеп һайлайҙар, бригадир эшен йөкмәтәләр. Һуғыш осоронда ҡатын-ҡыҙҙар күп итеп бәрәңгене йыуып, ваҡ ҡына итеп турап, ҡаҙанда ҡайнатып алғандар, бешмәҫ элек һоҫоп алып, мейестә киптергәндәр. Яуға китер алдынан Әбделхаҡ бабайым шул бәрәңгеләрҙе фронтҡа оҙатып йөрөгән.

Бала менән әсәне күҙгә күренмәгән ниндәйҙер эске тойом ептәре бәйләп тора бит ул. Әбделхаҡ бабайымдың яраланғанын да һиҙә өләсәйемдең йөрәге. "Бөгөн Әбделхағымды төшөмдә күрҙем. Бүрәнә һөйрәп килә ине: "Уй Аллам, аяғым," - тип, йығылып китте. Аяғы яраланды инде баламдың", - тип үрһәләнә ул. Күп тә үтмәй, бабайымдың аяғы яраланып, госпиталдә ятыуы тураһында хат алалар. Улының үлгәнен дә белә өләсәйем. Фатима инәйем менән Миңлеғол бабайым, Әбделхаҡ бабайымдың үлем хәбәрен өләсәйемә күрһәтмәй, шым-шым ғына илайҙар икән. "Ниңә өндәшмәйһегеҙ? Нимәгә илағанығыҙҙы беләм бит. Әбделхағым харап булды инде", - тигәс, ҡара ҡағыҙҙы бирергә мәжбүр булалар.

Мостафин Әхмәтшәриф бабай һуғыштан ҡайтҡас, Әбделхаҡ бабайымды госпиталдә осратыуы тураһында һөйләй. Бабайым - өҫкә ҡатта, Әхмәтшәриф бабай аҫҡы ҡатта дауаланған була. Әхмәтшәриф бабай ҡултыҡ таяғына таянған оҙон буйлы, ҡуңыр йөҙлө, дуғаланып торған ҡыйғас ҡашлы һылыу кешене абайлап ҡала. Ул был һалдатты, кемгәлер оҡшатып, сырамытҡандай була.

- Егет, һин ҡайҙан? - тип һорай.

- Башкириянан, - була яуап.

- Башкириянан икәненде беләм дә ул, ҡайһы ауылданһың?

- Йомағужа районы Кәшәле ауылы, - тип яуап бирә бабайым.

- Ғәбдин ағайымдың улы, үҙемдең ҡустымһың дабаһа һин, - тип ҡосаҡлап ала Әхмәтшәриф бабай. Әбделхаҡ бабайым оҙаҡламай фронтҡа китеүе тураһында әйтә.

- Ҡайҙа шул тиклем ҡабаланаһың, шәбәйеп тә бөтмәгәнһең бит, - ти Әхмәтшәриф бабай.

- Фронтҡа китергә тип, ҡултамғамды ҡуйҙым инде. Иптәштәрем һәйбәт, утҡа инһәң - уттан, һыуға инһәң - һыуҙан тартып алырҙар, -ти.

Бала саҡта Йәнғәлина Мәрйәм инәйҙең бабайым тураһында һөйләгән хәтирәһе иҫтән сыҡмай. Әбделхаҡ бабайым менән Мәрйәм инәй уйынға китеп баралар икән. "Мәрйәм, анауында ике яҡты йондоҙҙо күрәһеңме, шуларҙың береһе- һин, икенсеһе - мин", - ти икән бабайым. Үҙенең һөйөү тойғоларын "яратам" тип һүҙ менән дә еткермәгән ул, иң нескә, иң саф, иң илаһи мөхәббәт хистәрен йондоҙҙарҙың бейеклеге, бөйөклөгө менән аңлатҡан. Ниндәй әҙәпле, ниндәй юғары мәҙәниәтле булған ул оло быуын кешеләре! Ошо ҡәһәрле һуғыш булмаһа, бер-береһенә ғашиҡ әллә күпме Әбделхаҡтар, Мәрйәмдәр тыуыр ине. Шул замандың кешеләрен генә түгел, тыуыр быуындарҙы ла һәләк иткән шул был һуғыш. Мәрйәм инәй ҙә үҙенең яртыһын таба алмағандыр инде, ғүмере күпселек яңғыҙлыҡта үтте, шулай булыуға ҡарамаҫтан, өс ҡыҙына матур тәрбиә биреп үҫтерҙе.

Иртән тороуға ап-аҡ ҡуйы һөт һымаҡ томан төшкәйне ауыл өҫтөнә. Беҙ ҡайтырға йыйындыҡ. "Ҡайтмағыҙ, һарыҡ һуям, тағы ла бер-ике көн тороғоҙ инде", - тип үтенде Рәшит ағай. Беҙгә эш урындарыбыҙға барып өлгөрөргә кәрәк ине шул. Ҡала алманыҡ. Рәшит ағай, ҡатыны, ейәне оҙатырға сыҡтылар. Әсәйем, инәйем ҡосаҡлашып һаубуллаштылар.

"Йә Хоҙай! Был әсәйем менән инәйемдең тыуған яҡтарына һуңғы килеүе бит. Улар башҡа бер ваҡытта ла тыуған ауылдарына килә алмаясаҡ, Масаҡ, Тура уй, Ерекле тауҙарын күрә алмаясаҡ, шишмәләренән ятып һыу эсә алмаясаҡ бит,"- тигән уйҙар йүгереп үтте башымдан. Тамағыма төйөр килеп тығылды, күҙ йәштәремде күрһәтмәҫ өсөн артыма боролоп ултырҙым. Рәшит ағай, ҡатыны, ейәне ҡул болғап, аҡ томандар артында тороп ҡалды. Ошо күренеш бер ваҡытта ла онотолмай, йөрәгемде һыҙлатып, гел күҙ алдымда тора. Кәшәле ауылының нигеҙен ғүмеренең һуңына тиклем һаҡлап йәшәүсе Рәшит ағай ҙа юҡ инде. Ауыл үҙе лә тарихы менән аҡ томандар артында тороп ҡалды...

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Уңышлы булыуҙың бөйөк сере

### 1-се бизнес-модель

Миңә был модель ныҡ оҡшай, сөнки ул ҙур аҙымдар менән аҡса эшләү мөмкинлеге бирә. Һеҙ 100 мең долларлыҡ өйҙө ни бары 10 мең долларға ала алаһығыҙ. Ҡиммәтле ҡағыҙҙар портфеле барлыҡҡа килгәс, күсемһеҙ милек уларҙы эшләргә мәжбүр итә. Был аҡсаларҙы һеҙ тағы ла күберәк күсемһеҙ милек алыуға тотона алаһығыҙ, ә инде милекте һатып алғас, уны артабан аҡса һауыу өсөн файҙалана башлаясаҡһығыҙ. Был осраҡта финанстарығыҙ ике ысул менән эшләй: беренсе осраҡта - милектең баҙар хаҡы артыуы иҫәбенә һеҙҙең килемегеҙ арта; икенсе ысул - милкегеҙҙе ҡуртымға биреүҙән даими алған килем.

Күсемһеҙ милек менән эшләүҙең бер нисә варианты бар. Шуларҙың береһе - ремонт талап иткән милекте осһоҙ хаҡҡа һатып алып, уны ремонтлап, тиҙ килем алыу маҡсатынан һатып ебәреү. Икенсе ысул - күсемһеҙ милек объекттарын һатып алыу, уларға ремонт үткәреү һәм ҡуртымға тапшырыу. Был эште белеп башҡарғанда, һеҙ ҡулаҡса ағымын булдыраһығыҙ һәм капитал туплайһығыҙ. Өсөнсө вариант - төҙөлөш эштәре алып барыу: ер участкаһы һатып алаһығыҙ ҙа, унда өй, офис йәки сауҙа биналары төҙөйһөгөҙ.

Был модель буйынса бизнес менән шөғөлләнеү өсөн билдәле белем кимәле лә кәрәк. Беренсенән, һеҙ байлығығыҙҙы ҡапыл ғына арттыра алаһығыҙ. Әммә мин һеҙгә башланғыс капитал кимәлендә урталыҡты һаҡларға кәңәш итәм. Күптәр "финанс иғәнәләренән башҡа нисек итеп күсемһеҙ милеккә эйә булыу" ысулдарын киң пропагандалай. Был мөмкиндер ҙә, әммә уны аҡыллы юл тип уйламайым: уңышлы булыу юлын бурысҡа алып тороу мөмкин түгел.

Бынан тыш, рычаг принцибы буйынса аҡса эшләүҙең мәғәнәһе булһа ла, бында саманан сығыу кәрәкмәй, сөнки һеҙҙең яңылышырға хоҡуғығыҙ юҡ. Ниндәйҙер уйланылмаған ремонт эштәре, тәбиғәт бәлә-ҡазаһы йәки оҙайлы ваҡыт ҡуртымға алыусы булмаһа, һеҙҙең байлыҡҡа юлығыҙ артҡа китәсәк йәки бөтөнләй милкегеҙҙе юғалтасаҡһығыҙ.

Тағы бер мотлаҡ шарт - белем. Зинһар, был бизнесҡа белгән кешенән өйрәнмәй тороп тотонмағыҙ. Тиҙ генә һатып ебәреү йәки ҡуртымға биреү маҡсатынан күсемһеҙ милек һатып алаһығыҙ икән, алыш-биреш урынын, унын тарихын, шул ваҡыттағы торлаҡ баҙары торошон һәм киләсәккә күҙаллау бик мөһим. Әгәр аҡсағыҙҙы уңайлы булмаған районда объект һатып алыуға тотонаһығыҙ икән, тиҙҙән милкегеҙҙең хаҡы төшә барыуын күрерһегеҙ. Һеҙгә ҡулаҡса ағымының нисек барлыҡҡа килеүен аңларға һәм милкегеҙҙең аҡса ағымы менән тәьмин итергә һәләтле икәнен белеү зарур. Ә инде "нулдән" башлап төҙөлөш алып барыу етди финанс сығымдары һәм белем талап итә.

Шуға күрә, был бизнес-модель ҡулында күпмелер капиталы булыусыларға тап килер, тип уйлайым. Әгәр был һеҙҙең хаҡта түгел икән, был мөмкинлек эргәһенән үтеп кенә китһәгеҙ ҙә була.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ




## Беҙ балсыҡтан яратылғанбыҙмы?

- Бөгөн һеҙҙең хәлегеҙ бик ҡатмарлы. Һеҙгә кешенең күҙ асып йомған арала бар булыуын иҫбатларға тура киләсәк. Барлыҡҡа килтереүсе, балсыҡ алып, бутап, иҙеп, һын яһаған һәм уға йән өргән икән - теге Әҙәмгә әйләнгән. Был логика фәнгә ҡаршы сыға, - тип һүҙен дауам итте дуҫым. - Фән, кеше - үҙенән алда булған биологик үҫеш емеше, кеше хайуандар донъяһынан үҙенең ғаилә мөнәсәбәттәре, аҡылы менән генә айырылып тора, кеше маймылдан килеп сыҡҡан, тип иҫбатлай. Барлыҡ хайуандарҙың анатомик төҙөлөшө уртаҡ булыуы ла замана фәненең замана теорияһын раҫлай.

Ҙур фәнни бәхәскә әҙерләнеп, мин һүҙ башланым:

- Беренсенән, һине дөрөҫләргә рөхсәт ит. Алла кешене күҙ асып йомған арала, балсыҡты иҙеп, һын яһап, йән өрөп яратмаған. Ҡөрьән Әҙәмдең барлыҡҡа килтерелеүе хаҡында һөйләй, һәм ул һин әйткәндәргә тап килмәй. Унда кешенең яратылыуы баҫҡыслап, осорлап, илаһи бер ваҡыт эсендә дауам иткән, тип яҙыла. Ҡөрьән кешене туранан-тура балсыҡтан яратылған, тимәй, ә кеше балсыҡтан сыҡҡандарҙың нәҫеленән, ти: "Беҙ кешене ҡыҙыл балсыҡ эссенцияһынан яраттыҡ". Раббы фәрештәләргә: "Мин кешене балсыҡтан яратам, тамамлағас, уға Үҙемдән йән өрәсәкмен, шул саҡ һеҙ уға сәждә ҡылырһығыҙ", - тигән. Был иһә бар итеү, ҡиәфәт биреү, һуңынан терелтеү этаптары булыуына ишаралай. "Һуңынан" тигән һүҙ, бәлки, миллионлаған йылдар менән иҫәпләнәлер: "Раббыңдағы бер көн һеҙ һанаған 100 йылға тиң".

Башта балсыҡ, унан һыу тамсыһынан нәҫел башлана. Был кешенең яратылыуының башы, быға тиклем кеше күҙгә күренерлек әйбер булмаған, унан һуң һын яһала, форма-ҡиәфәт индерелә, шунан йән өрөлә һәм, ниһайәт, Әҙәм пәйҙә була. Был хәлдә кеше - үҫештең һуңғы баҫҡысы.

Химик составы буйынса тереклектең бөтөнөһө лә балсыҡ. Үлгәндән һуң улар барыһы ла балсыҡҡа әйләнә. Был - бәхәсһеҙ факт. Был уртаҡлыҡ бөтә төрҙәрҙе лә Барлыҡҡа килтереүсенең бер булыуына ишаралай. Әммә анатомик уртаҡлыҡтан сығып ҡына бөтөн тереклек бер башланғыстан, йәки бер күҙәнәктән бар булған, тиергә ярамай. Әйтәйек, ҡул арбаһы, трамвай, автобус, поездың уртаҡлығы - оҡшаш геометрик һәм конструктив формаларға нигеҙләнгән булыуында. Әммә был уларҙың бер төрҙән сығыуын белдермәй. Улар барыһы ла - кеше аҡылы емештәре.

Дарвиндың иң беренсе асышы тереклектең бөтә төрҙәре уртаҡ анатомик төҙөлөшкә эйә булыуы тураһында. Умыртҡалы хайуандарҙың һөлдәләре бер уртаҡ схемаға тура килә. Мәҫәлән, жирафтың муйынында ете умыртҡа һөйәге бар. Ҡыҫҡа тойолһа ла, терпенең муйынында ла ете һөйәк. Кеше ҡулында биш бармаҡ, маймылда ла, ҡуянда ла, баҡала ла улар бишәү. Йөклөлөк ваҡыты китта, маймылда, кешелә - туғыҙ ай, ә имеҙеү ваҡыты - ике йыл. Ат, ишәк, ҡуян, күгәрсен, кеше йөрәктәре дүрт кесе ҡарынсанан тора, тамырҙарының таралып китеү планы ла бер.

Ошондай ғәжәйеп күп оҡшашлыҡтарҙы күргәс, Дарвин, әлбиттә, ерҙәге һәр йән эйәһе - бер ғаилә вәкиле, тип уйлаған. Әлеге ғаилә ваҡыт үтеү менән тармаҡланған, төрҙәргә бүленгән, шарттарға яраҡлашҡан. Океанда йәшәүсе кит - ҡалын май "тун", айыу - тире тун, эҫе ҡояш аҫтында йәшәүсе халыҡтар ҡара тире "кейгән". Таш ҡатламдарҙа үткәрелгән ҡаҙыныуҙар үҫеш баҫҡыстарының сылбыр кеүек бер-бер артлы теҙелеп китеүен асыҡлай. Бер төр йән эйәләре барлыҡҡа килә, икенселәре юҡҡа сыға.

Тереклектең уртаҡ анатомик теорияһына ошо асышын өҫтәп, уны үҫеш процесы тип атап, Дарвин, әлбиттә, дөрөҫ эшләгән. Тик үҫеш процесын аңлатҡанда, шулай уҡ үҫеш этаптарын ентекләп аңлатып ҡарағанда, ул яңылышҡан. Дарвинса, үҫеш процесы йәшәү өсөн көрәш менән тамамланыуҙан ғибәрәт. Йәғни зәғифтәр үлә, көслөләр йәшәүҙе дауам итә, шул рәүешле, төр буларак, көслөләр, сыҙамлыраҡтар иҫән ҡала һәм үҫә. Әгәр шулай икән, матур, ләкин зәғифтәрҙең иҫән ҡалыуын нисек аңлатырға? Кәкүктә - ҡанат, тауис ҡошта - ғәжәйеп ҡойроҡ, тағы тәбиғәттә төрлө-төрлө сыбар күбәләктәр булыуын нисек аңлата алабыҙ? Быларҙың барыһында ла оҫта, зауыҡлы Рәссам, бөйөк, даһи Оҫта ҡулы һиҙелә.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 18 МАЙ
## ДҮШӘМБЕ
## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу.
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Цветок папоротника". 9-я и 10-я серии (12+).
22.50, 02.50 "Две жизни маршала Худякова" (12+).
23.50 "Илья Старинов. Личный враг Гитлера" (12+).
00.55 "Я ему верю". Сериал (16+).
01.55 "Закон и порядок-20". Сериал (16+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры (0+).**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (0+).**
**18.30 "Черные волки". Сериал (16+).**
**19.30 Новости спорта.**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Народы Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Дознание" с Ильдаром Исангуловым (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**23.00 "Мэрайа Мунди и шкатулка Мидаса". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 19 МАЙ
## ШИШӘМБЕ
## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Цветок папоротника". 11-я и 12-я серии (12+).
22.50, 02.55 "Сочи. Курорт с олимпийским размахом".
23.50 "Эрмитаж. Сокровища нации".
01.00 "Я ему верю". Сериал (16+).
02.00 "Закон и порядок-20". Сериал (16+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Башҡорттар" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.30 "Черные волки". Сериал (16+).**
**19.30 Новости. Тема дня.**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Имоджен". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 20 МАЙ
## ШАРШАМБЫ
## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Цветок папоротника". 13-я и 14-я серии (12+).
22.50 "Специальный корреспондент" (16+).
00.30 "Варшавский договор. Рассекреченные страницы" (12+).
01.35 "Я ему верю". Сериал (16+).
02.35 "Закон и порядок-20". Сериал (16+).
03.30 "Крутые повороты судьбы. Сергей Захаров" (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шатлыҡ йыры" (0+).**
**15.15 "Шәп арба" (0+).**
**15.45 "Победные рассказы" (6+).**
**16.00 "Тәмле" (12+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.15 "История признания" (6+).**
**18.30 "Черные волки". Сериал (16+).**
**19.30 Телецентр.**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Где-то". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 21 МАЙ
## КЕСАҘНА
## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Цветок папоротника". 15-я и 16-я, заключительная, серии (12+).
22.50 "Вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "Таврида. Легенда о золотой колыбели" (12+).
01.35 "Я ему верю" (16+).
02.35 "Закон и порядок-20" (16+).
03.30 "Под маской шутника. Никита Богословский".
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "Книга сказок" (0+).**
**16.00 "Автограф" (6+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.30 "Черные волки". Сериал (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**23.30 "Папаши без вредных привычек". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 22 МАЙ
## ЙОМА
## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души" (12+).
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (16+).
16.00 "Загадка судьбы" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести - ПФО".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина". Главный юмористический фестиваль года (12+).
22.55 "Жених". Мелодрама (16+).
00.50 "Только любовь". Мелодрама (16+).
02.45 "Горячая десятка" (12+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Книга сказок" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Байтус" (0+).**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.30 "Черные волки". Сериал (16+).**
**19.30 Новости. Тема дня.**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**23.00 "Прогулка по солнечному свету". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 23 МАЙ
## ШӘМБЕ
## РОССИЯ 1

04.55 "Дело № 306" (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Укротители звука" (12+).
12.20, 14.30 "Черная метка". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
16.15 "Субботний вечер".
18.05 "Во имя любви". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Останьтесь навсегда". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.40 "В ожидании весны". Худ. фильм (12+).
02.45 "Хроники измены" (16+).
04.50 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.50 "Пропавший рысенок" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости.**
**12.45 "Наука 102" (12+).**
**13.15 "Весело живем" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Баик-2015" (12+).**
**17.00 "Золотой фонд башкирского ТВ" (0+).**
**18.00 Башкирская открытая лига КВН. Финал-2015 (0+).**
**19.30 "Башҡорттар" (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Башҡорт йыры" (12+).**
**21.00 "Бизнес-сфера" (12+).**
**22.00 "Легенды спорта" (6+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Карты, деньги, два ствола" (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Слуга двух господ" (12+).**

## 24 МАЙ
## ЙӘКШӘМБЕ
## РОССИЯ 1

05.40 "Тайна записной книжки". Детектив (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10, 02.45 "Россия. Гений места" (12+).
12.25 "Секта". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Секта". Продолжение сериала (16+).
16.00 "Один в один" (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.35 "Петрович". Мелодрама (12+).
03.45 "Планета собак".
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Импи-суперстар!" (6+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Бауырһаҡ" (0+).**
**11.00 "Ал да гуль" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Алые паруса" (12+).**
**18.00 "Автограф"(6+).**
**18.30 "Историческая среда" (6+).**
**19.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.45 "История признания" (6+).**
**21.00 "Любимое дело" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Баик-2015" (6+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.45 "Нежданная любовь" (16+).**
**02.15 "Наливные яблоки" (12+).**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

# "БЕРҘӘМЛЕК" КИЛӘ...

**3 июндән 9-на тиклем Башҡортостанда "Берҙәмлек" халыҡ-ара милли мәҙәниәт фестивале үтәсәк.**

Быйыл фестиваль ШОС саммиты һәм БРИКС-ҡа ингән дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтары осрашыуының саралар планына индерелгән. Байрам - 2015 йылда Рәсәйҙә ойошторолған алты халыҡ-ара фестивалдәрҙең береһе. Һуңғы ваҡытта ул "Рәсәй мәҙәниәте" федераль маҡсатлы программаһы сиктәрендә уҙғарыла.

Фестивалдә Һиндостандан, Бразилиянан, Ҡытайҙан, Көньяҡ Африка Республикаһынан, шулай уҡ Ҡырғыҙстандан, Үзбәкстандан, Ҡаҙағстандан һәм Тажикстандан 200 кеше ҡатнаша. Башҡортостан исеменән фестиваль уҙасаҡ ҡала һәм райондарҙың ижади коллективтары сығыш яһай. Сағыу концерт программаһынан тыш, биҙәү-ҡулланма сәнғәте йәрминкәһе һәм күргәҙмәһе ойоштороласы. Унда халыҡ оҫталарының, шул иҫәптән яҡындағы сит илдәрҙән килгәндәрҙең эштәре тәҡдим ителә.

"Берҙәмлек" фестиваленең программаһы бик бай. 4 июндә фестивалде тантаналы асыу була, 5-дә ҡатнашыусылар Октябрьскийҙағы республика Ҡурай байрамын тамаша ҡыласаҡ. 6-7 июндә Дәүләкән һәм Туймазы райондарында һабантуй уҙа. Сара 8 июндә гала-концерт менән тамамлана.

Фестивалде ойоштороусылар - Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы, Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто, Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Октябрьский, шулай уҡ Дәүләкән, Бәләбәй һәм Туймазы районддары хакимиәттәре. Ике тиҫтә йылдан ашыу ваҡытта фестиваль Башҡортостандың визит карточкаһына әүерелде. Ошо йылдар эсендә унда 50-нән ашыу ил вәкилдәре, 300-гә яҡын делегация ҡатнашты.

# ҠУРАЙСЫЛАР БӘЙГЕ ТОТА



**4-5 июндә Октябрьскийҙа Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналған республика Ҡурай байрамы үтә. Сара "Берҙәмлек" халыҡ-ара фестивале сиктәрендә уҙғарыла.**

Ҡурай байрамы Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш төбәгендә башҡорт музыка ҡоралын пропагандалау һәм популярлаштырыу, халыҡ инструменттарында уйнау традицияларын һаҡлау һәм уны артабан үҫтереү маҡсатында үткәрелә. Байрам көндәрендә солистар һәм ҡурайсылар ансамблдәре конкурстары ойоштороласы. Республика халыҡ ижады үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, бәйгеселәр үҙҙәре башҡарған көйҙең тарихын мотлаҡ белергә тейеш.

Сығыштарға танылған ҡурайсылар, сәнғәт оҫталары, ғалим-фольклорсылар, халыҡ ижады белгестәре, үткән конкурстарҙа Гран-при яулаусылар баһа бирәсәк. Конкурс йомғаҡтары буйынса Гран-при яулаусылар (солистар араһында), лауреаттар, дипломанттар, шулай уҡ махсус призҙарға лайыҡ булыусылар билдәләнәсәк. Байрам барышында ҡатнашыусылар һәм ансамбль етәкселәре өсөн ижади лаборатория үткәреү ҡаралған.

Бәйгелә ҡатнашыу өсөн ғаризаларҙы 25 майға тиклем 450103, Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Биишева урамы, 17/2 адресы буйынса Республика халыҡ ижады үҙәгенә ебәрергә кәрәк. Телефон/факс: (347) 289-65-50. Электрон почта: gukrcnt@mail.ru.

# САЛАУАТ ТЕАТРЫ - ТӨРКИӘЛӘ

**Салауат башҡорт дәүләт драма театры VIII "Мең һулыш - бер тауыш" Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивалендә ҡатнашты.**

Фестиваль Төркиәнең тарихи һәм мәҙәни үҙәгендә - Конья ҡалаһында уҙҙы. Ун көн буйына фестивалдә ҡатнашыусылар һәм ҡала халҡы Анкара, Бурса, Севаш, Конья, Төньяҡ Кипр, шулай уҡ Рәсәй, Косово Республикаһы, Әзербайжан, Төркмәнстан һәм Ҡаҙағстан театрҙары спектаклдәрен ҡарай алды. Башҡортостан театрынан тыш, Рәсәйҙән Дағстан Республикаһының ноғай дәүләт драма театры, "Читиген" хакас драма һәм этник музыка театры ҡатнашты.

Зөһрә Бураҡаеваның "Ҡорҡут атаның һуңғы йыры" спектакле ҙур уңыш менән үтте. Уны театрҙың баш режиссеры Зиннур Сөләймәнов ҡуйған.

- Спектаклдән һуң труппаға Конья ҡалаһы театрынан иҫтәлекле бүләктәр һәм сувенирҙар, шулай уҡ ТӨРКСОЙ-ҙың махсус миҙалы тапшырылды. Салауат театрының директор вазифаһын башҡарыусы Илдар Маннапов үҙ сиратында башҡорт балы һәм Башҡортостандың дәүләт символдары төшөрөлгән сувенирҙар бүләк итте. Конья провинцияһы мэры халыҡ-ара фестивалдә ҡатнашыусылар хөрмәтенә тантаналы ҡабул итеү ойошторҙо. Унда артабан хеҙмәттәшлек итеү теләге менән Башҡортостан Республикаһы исеменән бүләктәр тапшырылды, - тип хәбәр итте Зиннур Сөләймәнов.

✓ *Бай байлығын итә: ай һайын ҡатын ала, ауыл һайын йорт һала.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ӘҘӘБИӘТ - РУХИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ!




**Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА төҙөнө.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Май (Рәжәб - Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (29) дүшәмбе | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 19 (1) шишәмбе | 3:36 | 5:06 | 13:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |
| 20 (2) шаршамбы | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 21 (3) кесе йома | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 19:52 | 21:22 | 22:52 |
| 22 (4) йома | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 19:54 | 21:24 | 22:54 |
| 23 (5) шәмбе | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 19:56 | 21:26 | 22:56 |
| 24 (6) йәкшәмбе | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

**19-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Хәбирйән. Шайморатов. Ашар. Лимузин. Һалҡын. Егетеңде. Әмәл. Әһлиулла. Етмешенә. Рәнйетеү. Тәнәфес. Күркәле. Реле. Сәйетов. Әхмәтов. Ваза. Ҙурлама. Шакирйән. Әлибаев. Ләлә.Таш. Ужефт. Марш. Арба. Урайы. Ағай. Яҡшылыҡҡа. Аҡтыҡ. Мина.

**Вертикаль буйынса:** Дәрт. Ғөбәйҙуллин. Нарком. Ләм. Алиһә. Әрләшә. Етер. Шанлы. Авиация. Инҡар. Рыялыҡ. Әхмәҙуллин. Әлшәй. Ылымыҡ. Ирәбе. Роатан. Висла. Ырым. Елеү. Яуға. Варяг. Кусимов. Алда. Арал. Йыһаз. Епшек. Алабута. Әхтәри. Киске. Еләге. Вице. Виза.

*БАҠСА*



# БАҠСАСЫ ХӘЙЛӘЛӘРЕ

● Кәбеҫтә күбәләге һәм кебләнән ҡотолоу өсөн кәбеҫтә төптәре араһына укроп, кориандр, сельдерей, бәрхәт сәскәһе, Бәйғәмбәр тырнағы сәсәләр, әрем үләнен йолҡоп һалалар.

● Картуф сәскән ваҡытта һәр ояға күмер ҡушып һалыу - ашлама ла, ҡаты ҡорттан да һаҡлай.

● Һарымһаҡ уңдырышлы булһын, тәме яҡшырһын өсөн июнь айының тәүге яртыһында башта 10 литр һыуға 2 ҡалаҡ тоҙ һалып иҙеп һибәләр, ә аҙаҡтан таҙа һыу.

● Кишер насар үҫһә, 10 литр һыуға 1 ҡалаҡ тоҙ һалынған иретмә һибергә.

● Ҡыярға һыу күп кәрәк, бигерәк тә сәскә атҡан һәм уңыш биргән осорҙа даими рәүештә күп итеп һыу һибеп торорға кәрәк. Әммә ҡыяр сәскә ата башлаған ваҡытта һыуҙы һирәк һибеп, аҙаҡ яңынан йышайтҡанда, ҡыяр үҫемлектәре тиҙерәк сығыр. Көндәр эҫе торғанда ҡыярға һыуҙы күп һибергә һәм йыш ҡына һирпеп торорға кәңәш ителә. 30 градус һәм унан да юғарыраҡ эҫелә ҡыяр һеркәһе үлә, шуға күрә, теплицаға һыу һалынған һауыттар ҡуйып сығыу мотлаҡ. Һауа торошо үтә түбән булһа, йә көндөҙгө һәм төндәге температура араһында айырма ҙур икән, ҡыярҙың тәме боҙола. Шулай уҡ был үҫемлеккә ел үтә өрөп тороу ҙа килешмәй.

● Әгәр йәй башында уҡ бер-нисә борос сығып, артабан үҫемлек сәскә атмай башлаһа, был боростарҙы өҙөп алырға кәрәк. Артабан үҫемлек икеләтә көс менән сәскә ата башлар һәм яҡшы уңыш бирер. Борос тамырҙары һауа һулаһын өсөн үҫемлек төбөндәге тупраҡ ҡатлауы ҡатмаҫлыҡ итеп йыш ҡына йомшартып торорға кәңәш ителә.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 май "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры

**19 май "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия

**20 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**21 май "Хуш, юбилей миҙгеле!"** театрлаштырылған концерт

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**17 май "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00

**20 май "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 11.00

**20 май "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айтматов), хикмәт

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

76-сы ижад миҙгелен ябыу тантанаһы **19 майҙа** - "Химиктар" мәҙәниәт һарайында, **21 майҙа** филармония сәхнәһендә буласаҡ.

**КЕМ АЛЫҠ?**

Филармония составындағы эстрада төркөмдәрен атағыҙ.

**Телефон: 8-927-956-68-89**

✔ Уйҙарға гонаһ ҡылыу еңел. Сөнки уны бирәү ҙә күрмәй, уның өсөн берәү ҙә һине ғәйепләмәй. Ләкин Хоҙайҙан бер нимә лә йәшереп булмай. Кеше уйы менән дә ҡылған гонаһтары өсөн үҙ ғазаптары менән түләй барыбер...



ӘЙТЕШ

# НИҢӘ ҺАМАН БЕҘ ЯРЛЫБЫҘ,

## Йәшәһәк тә бик бай илдә?

**Өшөрә менән Айыҡтужа сәсәндәр башлаған әйтеш эстафетаһын гәзитебеҙҙең 18-се һанынан Йәнһылыу менән Көфө сәсән үҙ ҡулына алғайны. 19-сы һанда Көфө сәсән Йәнһылыуға шундай фекерҙәрен төбәгәйне:**

Беҙҙең өсөн кеше булыу
Тоғролоҡтор асылға.
Ғүмер буйы тоғро булыу
Әүәләнмәш хасилға.
Гонаһтыр, тим, милләтеңдә
Башҡаға алыштырыу.
Был бит хатта үҙ-үҙеңде
Хоҙайҙы алдаштырыу...

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**
Таулы буйында ҡырсын юҡ,
Булмағас, ҡыҙырмайым.
Үтә ғүмер, эше - үтеү,
Артынан һыҙғырмайым.
Өңөрәйгән тәҙрәләргә
Һалам тығыу файҙаһыҙ.
Тыуым-үлемдәрҙе йыуып,
Йәшәнек мәғәнәһеҙ.
Ай, сәсәнем, мейегеңдә
Ауыр уйҙар кимерә.
Уйлангандар мәғәнә эҙләй,
Уйһыҙҙар ғүмер һөрә.
Дөрөҫ йәшәп булыр микән -
Яуапһыҙ һорау, сәсәнем.
Хатанан хали түгелбеҙ,
Гонаһ ҡурҡытмай кешене.
Төндә тыныс йоҡлар өсөн,
Тегеңдә тыныс йоҡлар өсөн,
Гел изгелек ҡылырғалыр?
Уң сикәгә сәпәһәләр,
Һул сикәне ҡуйырғалыр?
Миндә лә яуапһыҙ һорау -
Мейене уя, тишә,
Елеккенәмә төшә.
Кеше итеп әүәләнмеш -
Асылға тоғро булмыш,
Милләтең, илең, телең
Тиң булған тормош ҡормош,
Лайыҡлы ғүмер һөрмөш.
Минең генә был уйғынам -
Сүллектәге бөртөк ҡом.
Мәғәнәһе ҡомға һеңһә,
Ғәйепләмәсһең, ҡустым.

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**
Шундай данлы заттан булып
Бахырланмайыҡ әле.
Беҙ - мосолман өммәтенән,
Кафырланмайыҡ әле.
Беҙҙе күптәр яратмайҙар,
Беҙ уға мохтаж түгел.
Кеше хаҡында тик насар
Уйлай тик насар күңел.
Азатты ҡол яратамы?
Ғүмерҙә ҡол булманыҡ!
Ҡасан кемдәр күргән икән
Кире аҡҡан йылғаны?
Салауаттың әйткән һүҙе:
"Юҡ беҙҙәрҙә усаллыҡ..."
Әммә һәр саҡ ике яғы
Була бер үк миҙалдың.
Уң сикәгә һуҡҡандарға
Ҡуймабыҙ һул сикәне.
Беҙ беләбеҙ азатлыҡтың
Яуаплылыҡ икәнен.
Был йәһәттән Рәми ағай
Әйткән һүҙҙәре алтын:
Йөрәгендә халҡы юҡтың
Юҡ кеше булыр хаҡы.
Кеше булыу - башҡорт булыу,
Икеһе бер мәғәнә.
Ошо берҙәмлекте һаҡлау
Ожмахтарға иғәнә.
Миллиардер манҡорт булғансы,
Ҡәҙимге башҡорт булам.
Зарлыларҙың күңеленә
Ҡурай моңондай тулам.
Бер күренеш - күрҙеңме һәң,
Мәрәкә вә күңелле:
Башҡа булып ҡыланғандар
Маймыл була түгелме?

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**
Һай, сәсәнем, ишелеп яуһын
Башҡайыңа рәхмәттәр!
"Кеше булыу - башҡорт булыу",
Тип ысын башҡорт әйтер.
Хафаларымды тараттың,
Ҡурай моңондай арбаның.
Зарлыларға шатлыҡ өсөн
Һакла "Ҡурай" каналын...

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**
Кеше булыу - башҡорт булыу,
Был шарт башҡортҡа ғына.
Башҡорт булыу - мөһөр түгел,
Яҙыу паспортҡа ғына.
Ул еткереү киләсәккә
Атайҙар аманатын.
Үҙ асылын һаҡламаған
Еткерер яманатын.
Урыҫ телле башҡорттар бар,
Татар телле башҡорттар.
Улар, гүйә, дөйөм туптан
Айырылған аҡкоштар.
Рухы зәғиф булғандарҙың
Аңы ябыҡ, томанлы.
Ай-һай, ауыр ҡайтарыуҙар
Асылдан тайпылғанды.
Ер йөҙөндә бар халыҡтар
Ҡайтһын үҙ асылына.
Ул сағында дошманлыҡтар
Юҡ булыр хасилынан.
Кешеләргә ҡарап шул саҡ
Хоҙайыбыҙ ҡыуаныр.
Дуҫлыҡ ҡояштары ҡалҡыр,
Асыл үҙе йылмайыр.
"Асыл" һүҙе асылыуҙы
Аңлата изгелекте.
Шул асыл бит ябылыуҙан
Илебеҙ емерелде.
Ошо хаҡта фекереңде
Апай, бик белгем килә.
Гәзит уҡыусыларына
Белеп, еткергем килә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Йәнһылыу менән Көфө сәсәндең әйтеше артабан да дауам итә. Яғылса менән Супай сәсәндәр сиратҡа басты. Өшөрә менән Айыҡтужа, Йәнһылыу менән Көфө сәсәндәрҙең әйтештәре гәзит уҡыусыларҙа ниндәй фекерҙәр уятты икән - шул хаҡта ла белергә теләр инек. Бәйгелә әйтеш ҡоророға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә.**

АТЫҢ КЕМ?

# ӨЙӨМ ЙӘМЕ - ҠЫҘҘАР-ЙОНДОҘҘАР



Беҙҙең пар ҡанаттарыбыҙ-ҡыҙҙарыбыҙҙың исеме - Таңсулпан һәм Зарифа. Уларҙың береһенә 5, икенсеһенә 2 йәш. Гәҙәттәгесә, "Юлдаш" радиоһын тыңлаған ваҡытта тормош иптәшем "Таңсулпан" исеменә иғтибар иткән икән. "Әйҙә, ҡыҙыбыҙға Таңсулпан тип исем ҡушайыҡ. Минең бер генә түгел, ә ике йондоҙом булһын", - тине. Шулай, таң менән тыумаһа ла, ҡыҙыбыҙға ин изге теләктәр юрап, "таң йондоҙо", "балҡып тороусы" тигәнде аңлатыусы ошо исемде бирҙек. Таңсулпан ҡыҙыбыҙ һәр ерҙә лә өлгөр, аҡыллы, һылыу, башҡорт халҡының йыр-моңона ғашиҡ, үҙе лә бейей, йырлай, тасуири итеп шиғырҙар һөйләй, оҫта һүрәт төшөрә.

Икенсегә малай көткәйнек, өйөбөҙгә нур, наҙ өҫтәп, ҡыҙ бала донъяға килгәс, сабыйға тыуғас та исем ҡушырға кәрәк, тигән ырымды иҫтә тотоп, Ләйлә тигән йүргәк исем бирҙек. Һуңыраҡ Луиза өләсәһе ҡыҙыбыҙға матур яңғырашлы "Зарифа" исемен һайлашты. Ирем Рөстәм, ҡурайсы булғас, шундуҡ "Зарифа" көйөн көйләп тә ебәрҙе. Был исем ғәрәп теленән ингән, "матур", "аҡыллы" тигәнде аңлата. Аллаға шөкөр, Зарифабыҙ тыныс, зирәк, егәрле, ярҙамсыл, һөйкөмлө бала. Ҡыҙҙарыбыҙ бер-берең өсөн өҙәләп тора, терәк-таяныс, беҙгә - ҡыуаныс та, йыуаныс та улар.

Өфөнөң балалар баҡсаһына йөрөгәндә Таңсулпан "мам", "пап" тип әйтергә өйрәнеп ҡайтҡайны. Атаһы ҡаты итеп: "Бында "мам" да, "пап" та юҡ. Атай менән әсәй генә бар", - тип, баштан уҡ өйҙә үҙ-ара русса аралашмауыбыҙҙы аңғартты. Бына шулай, өйөбөҙҙөң йәме, тормошобоҙҙоң ҡото булған ҡыҙҙарыбыҙға ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, йыр-моңобоҙҙо өйрәтергә, Тыуған илебеҙгә һөйөү тәрбиәләп, рухлы итеп үҫтерергә тырышабыҙ.

**Зөһрә БАҺАУВА.**
**Әбйәлил районы Тал Ҡусҡары ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АСЫУ АЛДАН ЙӨРӨР,

## аҡыл арттан йөрөр

Бай байлығын итә: ай һайын ҡатын ала, ауыл һайын йорт һала.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙ ҡулдары менән булдырмай тороп, камиллыҡтың ни икәнен кеше белмәҫ.

**(Гарриет Мартино).**

Бәхетһеҙҙәрҙе аҡыл да ташлап китә...

**(Овидий Назон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Күңеле аҙғын бер ҡатын йәшәгән, әммә уны был ҡылығы һәр саҡ борсоған: үҙе теләмәһә лә, ниндәйҙер яуыз көс уны шундай алама уйҙар уйларға этәрә һымаҡ тойолған уға. Ул бик йыш ғашиҡ булған, әммә уның был гонаһы уйҙарында ғына булғас, иренә хыянат итәм тип уйламаған. Шулай бер саҡ ул Хоҙайға мөрәжәғәт итеп:**

**- Аллам, ни өсөн мин күңелем сафлыҡҡа сарсай тороп, шундай аҙғын уйҙарға тартылам? Мин барыбер гонаһлымы?- тигән.**

**- Уйҙар гонаһы ҡылыҡтар гонаһынан көслөрәк, сөнки ҡылыҡ бер тапҡыр ғына булырға мөмкин, ә уйҙарҙың иге-сиге юҡ. Шуға ла уйҙар гонаһының да иге-сиге юҡ. - тигән Хоҙай. - Ҡылыҡ -инде ҡылынған гәмәл, ә уй - ҡылынмаған гәмәл. Әгәр ҙә ярамаған ҡылыҡ өсөн төрлө ғазаптар рәүешендә яза бирелһә, уйҙарға, ул тормошҡа ашмай тороп, яза бирелмәй.**

**- Улай булғас, мин оҙаҡ ғазапланасаҡмынмы ошондай гонаһлы уйҙарым арҡаһында?- тигән ҡатын.**

**- Мейеңдәге уйҙарыңды тормошҡа ашырмай һәм уның өсөн яза алмай тороп, һин ғазапланыуҙан туктамаясаҡһың, - тигән Хоҙай.**

**Ысынлап та, ҡартлыҡта ла күңеле тынысльlҡ тапмаған ҡатындың. Тамам хәлдән яҙғас, фәхишәләр йортона илткән юлдың бер яҡ ситенә сығып ултырған да, үткән бер кешегә үҙенең тарихын ҡысҡырып һөйләргә тотонған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың кеменеләр уның һөйләгәнен тыңлап, юлынан боролоп, тормошон үҙгәртергә ҡарар иткән. Кемдер аҡылдан яҙған ҡарсыҡтан мыҫҡыл итеп көлгән. Был тарихты ишеткән аҡыл эйәһе башҡаларҙы аҙғын юлдан дүндереү өсөн риүәйәт уйлап сығарған...**

**Шулай итеп, уйҙар - беҙҙең дуҫ һәм дошман. Уйҙар - ул беҙҙең осош та, түбәнгә колап төшөү ҙә. Уйҙар беҙҙе ожмахҡа ла, тамуҡҡа ла илтеүсе. Ҡылыҡтар күренеп тора, ә уйҙар йәшерелгән. Уйҙарға гонаһ ҡылыу еңел. Сөнки уны берәү ҙә күрмәй, уның өсөн берәү ҙә һине ғәйепләмәй. Ләкин Хоҙайҙан бер нимә лә йәшереп булмай. Кеше ҡылыҡтары менән дә, уйы менән дә ҡылған гонаһтары өсөн үҙ ғазаптары менән түләй барыбер..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 15 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 2171